✓ *Сентябргә тиклем 2010 йылдың тәүге яртыһына ваҡытынан алда "Киске Өфө"гә яҙылыу бара. Йәғни ошо осорҙа гәзитебеҙгә элекке хаҡтар менән: 50665 индекслыһына - 294 һум 84 тингә, 50673 индекслыһына - 282 һум 66 тингә яҙылыу мөмкинлеге бар. Ә сентябрҙә хаҡтар бер аҙ ҡиммәтләнер, моғайын. Бергә ҡалайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

www.kiskeufa.ru

22 - 28 АВГУСТ (УРАҠАЙ) 2009 ЙЫЛ

№34 (348)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


### Белем артынан...




7

### Был йәндәрҙе Мәскәү осраштырған,

сәхнә иһә бергә иткән...



8-9


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Эскелеккә ҡаршы көрәш һөҙөмтәле булһын өсөн дәүләт тарафынан ниндәй саралар бойомға ашырылыу фарыз?

***Ләлә БИИШЕВА, Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ойошмаһы ағзаһы:***

- Иң тәүҙә алкоголле эсемлектәр менән һатыу итеү дәүләт тарафынан закон нигеҙендә көйләнергә тейеш, һәм бында кеше һәм йәмғиәт һаулығы өҫтөн ҡуйылыуы мотлаҡ. Мәҫәлән, законға самогон ҡыуыуҙы һәм уны һатыуҙы тыйыуҙы хоҡуҡи норма индереү бик ваҡытлы сара булыр ине. Ә ни эшләп төндәрен араҡы, самогон һатҡандарға, көпә-көндөҙ үҫмерҙәргә һыра һатыуҙан тыйыла алмағандарға ҡаты саралар ҡулланылмай? Ошондай хоҡуҡ боҙоуҙар асыҡланған осраҡта ла ғәйепләләр бик еңел ҡотола - штраф түләгән аҡсаны улар иртәгәһенә үк ҡаплай ала бит.

Совет дәүерендә эскелек һаҙлығына бата барғандарҙы үҙ иркенән тыш, йәғни мәжбүри рәүештә махсус дауалау учреждениеларына ебәрә торғайнылар. Улар унда дауалау курсынан башҡа, файҙалы эштәргә йәлеп ителде. Берҙән, ундай урынға ебәрелеүҙән ҡурҡыу, хурланыу тойғоһо кемделер эскенән тотҡарлап торһа, икенсе берәүҙәр оҙаҡ ҡына ваҡыт эскелек мөхитенән айырылып тороу һәм дауалау һөҙөмтәһендә ошо һәләкәтле ғәҙәтенән ҡотола алды. Хәҙер Рәсәйҙә бындай учреждениелар юҡ, уларҙы тергеҙеү маҡсатҡа ярашлы булыр ине.

***Евгения НӘБИУЛЛИНА, 1-се Республика наркология диспансерының баш табибы урынбаҫары:***

Ошо афәткә ҡаршы көрәшеү, уны иҫкәртеү һәм эскелектән кешелеген юғалта барғандарҙы дауалау бары медицина учреждениеларына ғына йөкмәтелеп килде. Әммә медицина сараларын ғына ҡулланып, халыҡтың алкоголле эсемлектәр менән сиктән тыш мауығыуын туҡтатып булмай. Был проблеманы дәүләт кимәлендә комплекслы хәл итеү фарыз, бигерәк тә ошо эшкә ижтимағи, дини һәм башҡа социаль институттарҙы йәлеп итеү кәрәк. Ғаиләлә һәм йәмғиәттә балаларҙы, йәштәрҙе айыҡ һәм сәләмәт тормош юлына сығарыу ошо көрәштең өҫтөнлөклө йүнәлеше булырға тейеш, тип уйлайым.

***Әмир ҒҮМӘРОВ, журналист:***

- 1985 йылдағы эскелеккә ҡаршы көрәштең һөҙөмтәләрен яҡшы беләбеҙ: хәҙер һәр бер өйҙә тиерлек самогон ҡыуыу аппараттары бар. Ошоларға миллионлаған кешеләрҙең техник спирт, суррогат эсеп, яҡты донъянан китеүҙәрен өҫтәһәң, Горбачев башлаған кампанияның һөҙөмтәһе 200 процентҡа барып етте, тиергә була. Илебеҙ тағы ла эскелеккә ҡаршы ошондай көрәште башлап торғанда, түбәндәге проблемаларҙы иғтибарға алыу урынлы булыр:

- Эскелек - сир, ә сирҙе тыйыу юлы менән генә бөтөрөү мөмкин булмаясаҡ;

- эскелектең һөҙөмтәһе менән түгел, сәбәптәре менән көрәшеү фарыз;

- эскән кеше хыялға бирелә, ошо юл менән үҙенең йәшәү мәғәнәһен, бәхетен эҙләй, ә илебеҙ етәкселеге эскелек урынына кешегә нимә тәҡдим итә ала һуң?

- ҡайһы бер диндәрҙә эскелек тыйылмаған, тимәк, ошо динде тотоусы халыҡтарҙың эскелекте тәбиғи күренеш тип аңлау позицияһына баҫыуы ихтимал;

- Рәсәй Федерацияһында "Иң айыҡ милләт", "Иң айыҡ регион" тигән конкурстар үткәрергә тәҡдим итер инем;

-эскелеккә ҡаршы көрәш кампанияға әйләнергә тейеш түгел, йыш ҡына ундай кампаниялар эскелек ойоштороусы кампанияға әүерелеүсән.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ яҙып алды.**

### ҺИММӘТЛЕ ФЕКЕР !

**Әгәр ваҡлап һатыу әйләнешенең тауар структураһын ҡараһаҡ, 2008 йылда алкоголгә һәм һыраға 7,7 процент тура килеүен күрәбеҙ. Сағыштырыу өсөн: еңел автомобилдәргә 8 процент тура килә, йәғни ғәмәлдә шул уҡ тиклем. Икенсе төрлө әйткәндә, был күңелгә йәтеш түгел, әммә дөрөҫө шул - рәсәйлеләр йыл һайын күпме яңы автомобиль һатып ала, шул уҡ ҡәҙәрһен эсеп бөтөрә.**

**Борис ГРЫЗЛОВ, РФ Дәүләт Думаһы спикеры.**

АФАРИН!

# БЕЛЕМ АРТЫНАН...

## Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларына



Хәниф СӨНӘҒӘТУЛЛИН фотоһы.

**Ниһайәт, абитуриенттар өсөн көсөргәнешле, ауыр һынау осоро тамамланды. Кисәге мәктәп уҡыусылары бөгөн инде оло тормош юлына аяҡ баҫты, Башҡортостандың төрлө юғары уҡыу йорто студенттары булыу бәхетенә өлгәште. Шулай уҡ Башҡортостандан 120 уҡыусы Мәскәү һәм Санкт-Петербург юғары уҡыу йорттарына маҡсатлы йүнәлтмә буйынса уҡырға инде. Улар оло юлға сығыр алдынан Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев менән осрашты.**

(Дауамы 6-сы биттә).

КИНӘЙӘ

## БАЙРАҠ ЕРҘӘ ЯТА. Күтәрегеҙ байраҡты!

**Бына инде беҙҙең "социализм" тип аталған илебеҙҙең емерелеүенә егерме йыл да тулып килә, ә мин һаман уны иҫкә алып, уйланып йөрөйөм: "Ул илде тәҙөгәндә йәндәрен аямай ҡорбан булған шәхестәр бөгөнгө хәлде күреп ни тейерҙәр ине икән?" Шәйехзада Бабич, Шәһит Хоҙайбирҙин, Николай Островский...**

Ошондай бик күп шәхестәрҙең хыялдарын, инаныуҙарын инҡар итеп, хәҙер капитализм иле төҙөйбеҙ. Спекулянттар эшҡыуарҙар тип атала. Ил байлығын хәйлә юлы менән эләктергән бурҙар - олигархтар...

Күптән түгел "Культура" телеканалының "Линия жизни" тип аталған тапшырыуына режиссер П. Лунгинды саҡырҙылар (Ул төшөргән "Остров" кинофильмы халыҡ-ара фестивалдә "Золотая ветвь" призын яулаған). Уға төрлө һорауҙар бирҙеләр. Уның бер яуабында, "В России имитация реальной жизни", йәғни бераүҙәр арып-талып бер туктауһыҙ эшләй, әммә етеш кенә йәшәп китә алмай, ә икенселәр бөтөнләй эшләмәй байып, шашып йәшәй, тигән фекер яңғыраны. Совет осоронда бындай хәл булдымы икән? Французҙар ҙа беҙҙең совет ҡоролошонаң емерелеүен, хәҙер инде шул осор тарихын юҡҡа сығарырға тотоноуыбыҙҙы бик ауыр кисергән, тип ишеттем. Улар бит, ана, "Бастилияны алыуҙы" һаман да байрам итә. Ил тарихын үҙгәртеп яҙыу, үҙгәртеп маташыу башҡа халыҡтарҙа күҙәтелмәй шикелле ул.

Урамда оло йәштәрҙәге бер ир танышыма шулай тип һөйләп торҙо: "Бына мин йәш кенә сағымдан үк берәй машина һатып алырға хыялландым. Заводта юғары разрядлы токарь булып эшләгән сағымда, ғаиләмдән өҙөп-йолҡоп, ай һайын һаҡлыҡ кассаһына күпмелер аҡса һала барҙым. Шул аҡсаны машина алырлыҡ күләмгә еткергәйнем генә, 1998 йылда "дефолт" тип, ғүмер буйы йыйған аҡсамды йоттолар. Вәт бәлә!.. Ә шулай ҙа бер аҙҙан "Компенсация" тигән эш башланылар (юғалған аҡсаны ҡайтарыу). Ул "Компенсация" тип аталған аҡсаға тәки машина алдым бит, әй - ейәнемә уйынсыҡ машинаға етте ул аҡса". Моңһоу ғына йылмайһа ла был ир, был бер ҙә көлкө хәл түгел инде ул. Әммә иларлыҡ булһа ла иламай шул беҙҙең халыҡ.

Камалова Фәриҙә тигән танышым, рәссам-керамист, илдең емерелеүен ҡабул итә, был хәл менән килешә алманы. Ҡаланың бер осонан икенсеһенә минең яныма килеп етә лә, аптырап, һушы китеп, тетрәнеп һөйләй тормошта барған үҙгәрештәр тураһында. Элек ул ныҡ ҡына тотлоға ине, хатта тотлоғоуон да онотто. Уны тынысландырырға тырышһам да, йыуатырлыҡ һүҙҙәр тапманым. Бергәләп ниндәйҙер проект өҫтөндә эшләгәндә, ул гел генә: "Башыңды эшләт, Фәүзиә!" - ти торғайны. Бер ҡасан да башҡа бер кәңәш тә бирмәй ине ул, тик шул өндәүе генә яңғырай ҡолаҡ төбөндә. Ул донъя ҡуйҙы инде. Һәйбәт- һәйбәт шәхестәребеҙ донъя ауырлығын күтәрә алмай, йөрәктәрен тоталар ҙа ауалар шулай. Фекерҙе туплап булмай торған буталсыҡ ваҡытта йәшәйбеҙ шул.

Бөтә ышаныс - йәш быуында. Фәриҙәнең һүҙҙәрен саҡ ҡына үҙгәртеп : "Баштарығыҙҙы эшләтегеҙ, йәштәр!" - тип өндәйһе ҡала. Боронғолар өндәүе лә ҡанда һаман: "Байраҡ ерҙә ята. Күтәрегеҙ байраҡты!"

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ИШАРА

# БАЙЛЫҠ - БЕР АЙЛЫҠ, ДУҪЛЫҠ - МӘҢГЕЛЕК,

## йәки Дмирий Медведевтың Виктор Ющенкоға хат яҙғаны

**Бер илдең баш түрәһе икенсе илдең хакимына хат яҙып ебәргәнен ишеттегеҙме әле? Китсе, туҙға яҙмағанды ысын булһа ла һөйләмә, хәҙер ил башлыҡтары түгел, ябай кешеләр ҙә бер-береһе менән хат яҙышыу тигән нәмәне күптән онотоп бөттө инде, тип әйтерегеҙҙе алдан уҡ һиҙемләп торам.**

Шулайын шулайҙыр ҙа ул, әммә Рәсәй Президенты Дмитрий Медведевтың, ысынлап та, үҙенең украин коллегаһы Виктор Ющенкоға тос ҡына бер хат яҙып ебәреүе хаҡында бөгөн бар ғәләм белә. Элеккеләр һымаҡ, "Хат башы - яҙ ҡаршы" ла тимәгән, "Беҙ, бөйөктәрҙән-бөйөк Бөтә Рәсәй державаһының законлы хакимы Дмитрий Медведев, "самостийный вә незалежный" Украина мәмләкәте юлбашсыһы Виктор Ющенко ғәли йәнәптәренә күптин-күп, сүктин-сүк сәләмдәр ебәреп ҡалабыҙ", тип тә тәмле теллеләнеп тормаған. Киреһенсә, бик асыуланып-үпкәләп, ҡәтғи дәғүәләр белдереп яҙған ул әлеге хатын. Хәҙер яҙғанылды маркалы конвертҡа һалып, заказлы-фәлән итеп тороуҙың һис бер кәрәге юҡ: Интернет тигән бөтә донъя мәғлүмәт селтәре бар бит, күҙ асып йомған арала хатың тейешле адресатҡа бара ла етә. Шул селтәрҙән һөҙөп алып, ҡулдарыма тотоп ҡарай алмаһам да, үҙ күҙҙәрем менән күреп уҡыным ошо хатты.

Ни эшләп Рәсәй Президенты үҙенең коллегаһына асыҡ хат яҙып ебәрҙе икән, тип ғәжәпләнәһегеҙҙер, моғайын. Сәбәптәре бар уның. Бактинһән, ил башлығы Ющенко әфәндегә былтыр уҡ хат яҙып һалған булған, ә тегеһе һаман да яуап хаты яҙмай, көттөрә лә көттөрә, ти. Көтөүҙең дә бер сиге була бит. Иҫке дуҫың һине һанға һуҡмай башлаһа, нисек ҡыйын булғанын үҙегеҙ ҙә беләһегеҙ. Ә Украина бит иҫке дуҫ ҡына түгел ине ҡасандыр. СССР тип аталған оло йортобоҙҙа "өлкән ағай" менән бергә-бергә көн иткән иң яҡын туғандарҙың береһе булды ул.

Э-э-х, "братья славяне", ни эшләнегеҙ һеҙ, ә? Дуҫлыҡ-туғанлыҡ тигән кәмәбеҙҙең ҡомға төртөлөрө теге яңъяллы йылда Аҡ Русиәнең, йәғни Белоруссияның Беловежская пуща тип аталған үткеһеҙ урман төпкөләндә айырылышыу протоколына имза һалған Борис Ельцин, Леонид Кравчук һәм Станислав Шушкевичтың төшөнә лә инеп сыҡмағандыр әле. Әммә мөстәҡил Украинаның тәүге президенты Кравчук ҡына былай ҙа салланып ағарған сәстәренә көл һибә бөгөн: "Әгәр 1991 йылда хәлдең бөгөнгөләй буларын, халыҡ депутаттарының залда бер-береһен кәмһетерен, президенттың ҡайҙа ултырыу һәм ниндәй һарайға күсеү тураһында ғына уйларын, демократия урынына сикһеҙлек (беспредел) килеп сығырын белгән булһам, Беловеж килешеүенә имза һалмаҫ өсөн ҡулымды ла киҫеп ташлар инем", - тип уфтана. Хәҙер ни, күпме үкенһәгеҙ ҙә һуң инде, Кравчук әфәнде, неҙ ҡылған эш тарихтың ҡара бер бите генә булып төҫмөрләнә. Кравчук - Кучма - Ющенко линияһының бер нөктәнән башланғанын онотоп киттегеҙме әллә?

Дмитрий Медведев та Рәсәй-Украина рәсми мөнәсәбәттәренең боҙолғандан-боҙола барыуына, ул әйткәнсә, деградацияға дусар булыуына һис риза түгеллеген белдерә үҙенең хатында. Бәлки, эштәрҙең шул тиклем хөртләйеүенә бәләкәй абхаз менән осетиндар өсөн уҫал "өлкән ағай" булырға тырышҡан Саакашвили ғәйепләлер? Йәш быҙау кеүек, галстук һымаҡ сепрәк-сапраҡты сәйнәп алырға әүәҫ булһа ла, ул Ющенко әшнәһе ебәргән автомат-пушкаларҙан, танкыларҙан атып, абхаз һәм осетиндарға Грузияның "ағайлыҡ" ҡанунын төшендерөргә генә тырышты бит. Тик батоно Михаил Рәсәйҙә хан замандарынан уҡ йәшәп килгән, "Бер ҡазанға ике тәкә башы һыймай", тигән ҡанунды ни эшләптер инҡар итергә маташты. Абхаз менән осетиндарҙың бер юлы ике "өлкән ағаһы" булмаҫ бит инде.

Ярай, туғандар бер талашһа, бер яраша бит ул. Әммә был юлы хәлдәр ҡатмарланып китте бит әле. Бөтә тирә-яҡты әфлисун төҫөндә ҡурһәтә башлатыусы "төҫлө инҡилап" сире йоҡҡан украин туғандарҙа русофобия, йәғни Рәсәйҙән ҡурҡыу синдромы ныҡ аҙып киткән, тиҙәр. Был бик ҡурҡыныс, йоғошло сир икән, махсус тикшеренеүҙәр уның сығанағының Көнбайышта булыуын асыҡларға ярҙам итте. НАТО тигән хәрби берекмәгә инеүеү була, был синдром күҙ алдында юҡ та була, ти. Быны ни өсөн һалам төҫлө сәсен башына таж кеүек уратып үреп йөрөргә яратҡан Юлия Тимошенко, Виктор Ющенко менән көн аралаш низағлашып торһа ла, ҡыҙыл-һары ауырыуы йоҡҡан халҡын НАТО ҡанаты аҫтына индерергә теләй. Быны шуның өсөн дә Дмитрий Медведев уларҙы хат аша булһа ла үҙ аңына ҡайтарырға тырышалыр инде.

Быныһына ғына түҙергә булыр ине әле: рәсәйлеләр НАТО-нан түгел, шайтандың үҙенән дә ҡурҡмай ул. Әммә өндәшмәгән һайын бөтөнләйгә юлдан яҙып бара шул ошо тыңлауһыҙ "малоростар". Шул уҡ НАТО илдәренә ебәрелгән газды урлапмы урлайҙар, тәкәтте ҡоротоп бөттөләр. Ишеүетмәнә, үҙҙәре яҡкан газ өсөн түләргә аҡсалары ла юҡ, Путин менән Медведевты аҡса һорап йөҙәтәләр. Вәт, ҡыҙыҡ, әй: Украина яҡҡан Рәсәй газы өсөн беҙ үҙебеҙ түләргә тейеш булабыҙ инде. Стабфонд та Әндрәй ҡаҙнаһы түгел бит, көрсөк тигән нәмәкәй доллар-евроны ла, алтын-көмөш запасын да ашап бөтөрөп бара. Так что, украин туғандар, "Дружба - дружбой, а деньги врозь", тигәнде һеҙгә лә аңларға ваҡыттыр инде.

Эйе, әйтерлек түгел, һуңғы ваҡытта Украиналағы славян туғандар аяуһыҙ шашып китте. Исмаһам, күрше генә көн иткән батько Лукашенконан өлгө алһындар ине: ул үтә үҙ һүҙле булһа ла, урыҫ телен хөрмәт итә. Ә былар урыҫса гәпләшеп, телдәребеҙ буталып бөттө, башҡаса москаль телендә һөйләшмәйәсәкбеҙ, тип зыҡ ҡуба. Рәсәй фильмдарын украинсаға күсереп бөтөп баралар ти, шилмалар. Тимәк, хәҙер Украинала Чапаев та Петька менән украинса ғына һөйләшәсәк. Фильм берәү генә лә ул, әммә улар хаҡында халыҡ сығарған мәҙәктәрҙе лә тәржемә итергә тура киләсәк. Тәржемәселәр йәл: исмаһам, Гоголь, малорос була тороп, урыҫса яҙмаһа була ине бит!

Ошондай йәмһеҙ күренештәрҙең ваҡытлы хәл булыуына, Украина һәм Рәсәй халыҡтары араһында туғандарса мөнәсәбәттәрҙең ҡайтанан өҫтөнлөк аласағына ышана Рәсәй Президенты. Элегерәк хакимлыҡ иткән бер ил башлығының: "Хакимдар килә лә китә, ә халыҡтар йәшәүен дауам итә", - тип әйткәнен онотмағанһығыҙҙыр. Был юлы ла шулай булыр ул, тик ғәмәлгә ашмаған яман ниәттәр юшҡыны ғына халыҡтарыбыҙ хәтерендә быҫраҡ тап булып, күңелдәрҙә ҡырып тороуы бар.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә эш сәфәре менән Рәсәй Пенсия фонды идараһы рәйесе Антон Дроздов булып китте. Ул баш ҡалала РФ Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһе эшмәкәрлеге менән танышты, Башҡортостан Республикаһы Президенты менән осрашты.

✓Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте A(H1/N1) киҙеүе менән сирләүселәрҙе дауалауға тәғәйенләнгән вирусҡа ҡаршы препараттар һатып алыу өсөн 10 миллион һум аҡса бүлмәксе. Башҡортостанда суска киҙеүенең икенсе осрағы теркәлде. Ул илдә тарала бара. Ошо көндәрҙә был киҙеүгә ҡаршы вакцинаға клиник тикшереү үткәрергә рөхсәт бирелгән. Шуға ярашлы, "Иммунопрепарат" предприятиеһы ла моновакцинаға һынауҙар үткәрә башлаясаҡ.

✓Һаулыҡ һаҡлау мәсьәләләре буйынса Республика советының күсмә ултырышы быйыл Бишбүләк, Мәләүез, Миәкә һәм Стәрлебаш районында үтәсәк. БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, күсмә ултырышҡа әҙерлек тамамланыу алдында. Бишбүләк ауылында яңы поликлиника һәм дауахана, Ҡырғыҙ-Миәкәлә - дауалау корпусы, Стәрлебаш ауылында - дауалау корпусы, Тәтер-Арыҫлан ауылында амбулатория төҙөлгән. Башҡа объекттарҙағы капиталь ремонтлау һәм реконструкциялау эштәре лә тамамланыу өҫтөндә.

✓Сибай ҡалаһы балалар сәнғәт мәктәбенең өлгөлө "Гөлдәр" бейеү ансамбленә Башҡортостан Республикаһы Президентының 100 мең һумлыҡ гранты тапшырылды. Луиза Яхина етәкселегендәге балалар ансамбле был наградаға республика мәҙәниәтен һәм сәнғәтен үҫтереүгә ҙур өлөш индергәне өсөн лайыҡ булды.

✓Башҡортостанда ярты йылда 26732 бала тыуған. Был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 626 сабыйға күберәк.

✓З. Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте рус телендә Әнүәр Әсфәндийәровтың "История сел и деревень Башкортостана и сопредельных территорий" тигән китабын баҫып сығарҙы. Китапта Башҡортостандың 41 районы һәм Пермь крайы, Свердловск, Һамар һәм Һарытау өлкәләрендәге башҡорт ауылдарының тарихы буйынса материалдар тупланған.

АҘНА ШАҢДАУЫ

**Кеше ниңә эсә? Аңлап тораһығыҙҙыр, һүҙ һыу йәки сәй, йәки, әйтәйек, ҡымыҙ хаҡында бармай. Был юлы спиртлы эсемлектәр, йәғни һыра һәм аҡлы-ҡыҙыллы шараптар, коньяк һәм араҡы, текила, виски, сакэ, бренди, ром, абсент, арманьяк, граппа, кальвадос, киршвассер, сливовица, метакса, көмөшкә, маотай, узо, чача, тутовка, ханшина, бамбузе, цинар, шнапс, ягати, кизлярка һәм башҡа тиҫтәләгән (ә бәлки, йөҙләгән) исем аҫтында йөрөүенә ҡарамаҫтан, кеше тарафынан бер генә маҡсатта - иҫереү, ә тимәк, иҫәрләнеү өсөн уйлап сығарылған эсемлек менән мауығыу һәм кешелектең үҙе үк етештергән был эсемлек менән әлегә тиклем уңышһыҙ көрәше тураһында буласаҡ.**

# ЭСЕРГӘМЕ, ЭСМӘҪКӘМЕ?

## Йәки дәүләткә бөгөн ниндәй йәмғиәт уңайлыраҡ - эскәнеме, әллә айыҡмы?



Тарих төпкөлөнә төшөп тормайыҡ. Файҙаһыҙ. Алкоголь йәки спиртлы эсемлектең тәү башлап Ер шарының ҡайһы төбәгендә, ниндәй халыҡ араһында барлыҡҡа килгәнен хәҙер берәү ҙә аныҡ ҡына әйтә алмай, шикелле. Башты әйләндереп, күңелдәрҙе күтәреп ебәргән был шыйыҡсаны кеше теләһә ниндәй ризыҡтан һәм хатта тәү ҡарашҡа ауыҙға алырға мөмкин булмаған һәм ярамаған сеймалдан етештерә ала. Картуф һәм бөртөклө иген, емеш-еләк һәм һөт ризыҡтары, ағас һутынан алып нефть һәм тәбиғи газға тиклем бөгөн спирт "һығып" сығарыу сеймалы була ала икән.

Бәләкәй сағымда уҡ Синбад-диңгеҙсенең бер утрауҙа ҡояш нурҙары аҫтында әсеп, иҫерткес эсемлеккә әүерелгән емештәрҙән әҙерләнгән шыйыҡса ҡулланып, ҡоллоҡтан ҡотолғаны хаҡында "Мең дә бер кисә" әкиәттәренән уҡып белгәйнем. Бөгөн бөтә донъя буйлап йөҙәр миллионлаған кеше ошо эсемлек ҡоллоғонан бер нисек тә ысҡына алмай аптырана. Эскелек менән көрәш күптән инде айырым бер кешенең генә эше түгел. Уның менән дәүләттәр, ижтимағи ойошмалар, врачтар, хатта төрлө сихырсылар (йәғни, экстрасенстар) алышып маташа. Әммә быға тиклем ул көрәштә бер генә яҡ - араҡы ғына еңеп килә. Ғүмер буйы эсеп тә тормошонон аҙағында араҡының йоғонтоһонан ҡотолоп айыҡҡандарҙы күп күргәнем бар. Әммә оло йәштәгеләр сафына баҫып, етмеште уҙыуҙарына ҡарамаҫтан, "Эстем, эсәм һәм эсәсәкмен!" тип маһайыусылар ҙа аҙ осраманы. Эйе, эскелектән ҡотолған айырым кешеләр юҡ түгел. Бар. Әммә, дөйөм алғанда, Ер шарының бер генә дәүләте лә айыҡ йәмғиәте менән маҡтана алмай. Хатта Африка джунглиҙарында тәүтормош шарттарында йәшәгән ҡайһы бер ҡәбилә кешеләре әлегә тиклем һаман тәгәрмәс уйлап тапмаған, әммә ағас һутын ағыҙып алып, ҡояшта әсетеп, эсеп иҫереп ләззәтләнеүҙе күптән белә, имеш.

Кеше нишләп эсә? Ошо һорауға яуап табылһа, эскелек менән көрәшеүе лә күпкә еңеләйер ине, моғайын. Әммә уға яуап биреүе анһат түгел. Кеше ҡайғынан да, шатлыҡтан да, эшкә урынлашһа ла, ҡыуылһа ла, балаһы тыуһа ла, ата-әсәһе, яҡындары вафат булһа ла, башҡа төрлө меңәрләгән сәбәп менән һәм дә сәбәпһеҙ рюмкаға үрелә.

Берәүҙәр эскелекте "сир" тип атай һәм уның менән медицина ярҙамында көрәшергә тәҡдим итә. Икенселәр фекеренсә иһә, ул "социаль сир" һәм унан арыныр өсөн тотош йәмғиәтте сафландырырға, таҙаландырырға, сәләмәтләндерергә кәрәк. Өсөнсөләр эскелектең төп сәбәбе рухи өлкәлә түгел, ә иҡтисадта, тип иҫәпләй. Ысынлап та, бөгөн спиртлы эсемлектәр етештереү һәм һатыу - ифрат табышлы өлкә. Унда миллионлаған түгел, миллиардлаған һумдар, долларҙар, евролар әйләнә. Спиртты етештереү арзан, ә уны ҡулланыусыларҙың һаны бихисап һәм улар көн һайын артҡандан-арта ғына. Дөрөҫ, спиртлы эсемлектәр менән сауҙа итеү дәүләт тарафынан сикләнә. Йәғни, уға акциз талап ителә. Был иһә үҙ сиратында араҡыға хаҡ артыуына килтерә. Рәсәйҙә, мәҫәлән, бер шешә аҡ араҡы хаҡының кәмендә өстән бер өлөшө акцизға тура килә. Йәғни, ярты литрлыҡ бер шешәне, әйтәйек, 100 тәңкәгә һатып алғанда, шул хаҡтың 33 һумы дәүләт ҡаҙнаһын тулыландырыуға тәғәйенләнә. Насар түгел бит, ә? Нефть менән газ һатыуҙан дәүләтебеҙ ул хәтлем табыш ала микән?

Шулай булғас, дәүләт ниңә эскелек менән көрәшергә тейеш әле, тигән һорау тыуа бит. Ниңә телевидениела спиртлы эсемлектәрҙең рекламаһы тыйылған? Ни өсөн бәлиғ булмағандарға араҡы һатылырға тейеш түгел? Ниңә врачтар кешене эскелектән арындырырға ынтыла? Ни өсөн Рәсәй Президенты Дмитрий Анатольевич Медведев 12 августа, эскелек - Рәсәйҙең милли бәләһенә әүерелде, тип белдерҙе әле? Таяҡтың башы икәү шул. Эскән кешенең тейешле кимәлдә хеҙмәт итерлек хәле юҡ. Һөҙөмтәлә иҡтисадҡа ярайһы уҡ зыян килтерелә. Күп кенә фажиғәләрҙең, һәләкәттәрҙең нигеҙендә тап ана шул эскелек ята ла инде. Саян-Шушенск гидроэлектростанцияһындағы аварияның сәбәптәрен асыҡлай алмай аптыраналар. Ә, бәлки, унда тыуған көндән, йәки машина "йыуыу"ҙан һуң эшкә килгән берәй хеҙмәткәр берәй кәрәкмәгән кнопкаға ғына баҫҡандыр, ә?

Ҡайҙа барһаң да бер үк балыҡ башы килеп сыға түгелме? Халыҡ эсһә лә ҡыйын, эсмәһә лә еңел түгел. Дәүләтебеҙгә араҡыһыҙ, һыраһыҙ, шарапһыҙ ғына күңел аса белгән, шул уҡ ваҡытта эшһеҙ ҡалыуы, йәки эш хаҡы түбән булыуы сәбәпле төшөнкөлөккә бирелмәгән оптимистик рухтағы йәмғиәт кәрәк. Дәүләтебеҙгә мәлен белеп кенә эскән, тик акцизлы араҡыны ғына һемергән, икенсе көн айығa һалып, эшенә йүгергән, баш ауыртыуынан бер ҙә ыҙаламаған, эскән килеш рулгә ултырмаған, ғаилә ағзаларын туҡмап үлтермәгән, балаларын эсергә өйрәтмәгән халыҡ кәрәк. Шул уҡ ваҡытта дәүләтебеҙгә бөтөнләй эсмәгән кеше кәрәкмәй. Ап-айыҡ Рәсәй тәбиғи газдан һәм нефттән баш тартҡан Көнбайыш дәүләттәре кеүек үк - илебеҙ етәкселеге өсөн күҙ алдына баҫтырып булмаған ҡурҡыныс киләсәк.

Асылда, 2009 йылдың 12 августында илебеҙҙә эскелеккә ҡаршы яңы көрәш кампанияһы асылды. Михаил Серегеевич Горбачев башлаған көрәштең эҙемтәләре барығыҙҙың да күҙ алдында. 1985 йылдың апрелендә башланған кампания 1991 йылдың авгусында СССР-ҙың тарҡалыуы менән тамамланды. Шуны ла әйтергә кәрәк - илдең юҡҡа сығыуын бары тик эскелеккә ҡаршы көрәш менән бәйләү дөрөҫ булмаҫ. Әммә барыбер совет йәмғиәтендә Горбачевҡа ҡарата ышанмаусанлыҡ тыуыуы тап ана шул алкоголгә ҡаршы кампания менән бәйле лә инде. Совет кешеләренең ул саҡтағы хис-тойғоларын аңларға мөмкин - араҡыға хаҡ һәр бер ҡалала һәм ауылда урынлаштырылған В.И.Ленин һәйкәлдәре кеүек, тиҫтәләрсә йылдар буйына ҡымшанмаҫ ине - 3 һум 62 тин. Тотош юҡлыҡ осоронда араҡы һумдан айырмалы рәүештә бөтә ерҙә лә ҡабул ителгән үҙенсәлекле аҡса берәмегенә - шыйыҡ "валюта"ға әүерелде. Тап ана шул ваҡытта бит "Горбачевҡа әйтегеҙ - йөҙ һум булһа ла эсәсәкбеҙ, сөнки бына ошо деталдең хаҡы бер шешә араҡы" тигән көләмәс барлыҡҡа килде.

Бөгөн беҙ ҡабаттан шул уҡ хәлде кисерербеҙме икән? Әлбиттә, юҡ. Араҡыға хаҡ артыуы, ә был күптән көтөлгән хәл, беренсенән, көмөшкә ҡыуыуын көсәйтеүгә килтерәсәк. Был иһә, үҙ сиратында, шәкәргә хаҡты арттырасаҡ. Элекке ваҡыттағыса, татлы ризыҡты һатыуҙы сикләп булмаясағы көн кеүек асыҡ. Йәғни, "эстем, эсәм һәм эсәсәкмен" девизы менән йәшәүселәр өсөн бер нәмә лә үҙгәрмәйәсәк. Икенсенән, төрлө алкоголь суррогаттары менән ағыуланыусыларҙың һаны артасаҡ. Дәүләттән бөгөн йәмғиәт нимә көтә һуң? Айыҡлыҡ юлында аныҡ һәм айыҡ аҙымдар. Балаларҙы, үҫмерҙәрҙе һәм йәштәрҙе эскелеккә йәлеп итеүселәрҙе ҡаты язаға тарттырыу (ә улар сауҙа предприятиелары ғына түгел, телевидение, ҡайһы бер ваҡытлы матбуғат саралары, күңел асыу урындары һ.б.) менән бер рәттән, айыҡ ялды ойоштороу, кешене эскелектән арындырыу өсөн эш урындары менән тәьмин итеү (ауыл ере өсөн айырыуса мөһим), туҡтауһыҙ эскелеккә сумғандарҙы, алкоголизм менән яфаланғандарҙы хатта көсләп дауалау һәм башҡа ошондай саралар.

Иң мөһиме, дәүләт үҙенең сираттағы кампанияһы менән ниндәй һөҙөмтәгә өлгәшмәксе икән? Ысынлап та, бөгөн беҙҙең дәүләткә айыҡ йәмғиәт кәрәкме? Әллә был тағы ла бер тапҡыр халыҡты ваҡытлыса ғына айыҡтырған, ә асылда иһә, йәмғиәтебеҙҙең эскелек упҡынына ҡолар алдынан үлемесле тыпырсыныуын дауам иттергән сара ғына булып ҡаласаҡмы?

**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Баш ҡалала сәскә байрамдары башланды. Бөгөн Якутов исемендәге ял паркында Совет районы хакимиәте "Сәскәләр карнавалы" тип аталған ҙур сара үткәрәсәк. Ошондай уҡ саралар Дим районында һәм Киров районында (Салауат Юлаев исемендәге майҙанда) ла ойоштороласаҡ.

✓"Өфө" аэропортында эшләйәсәк милли база авиакомпанияһы "Арҡайым" исемен йөрөтәсәк. Пассажирҙар уның эшен быйыл уҡ баһалай ала: декабрҙә "Арҡайым" эш башлаясаҡ. Халыҡты хеҙмәтләндереү "Боинг", "Эйрбас" тибындағы самолеттарҙа башҡарыла. Лизингыға ете һауа судноһы алыу планлаштырылған. Сама менән 700-ләп эш урыны барлыҡҡа киләсәк.

✓Өфөлә 22-26 сентябрҙә Нанотехнологиялар конгресы үтәсәк, унда донъяның төрлө илдәренән 300-ләп ғалим ҡатнашыуы көтөлә.

✓Өфөлә "Китап" мәҙрәсәһе базаһында наркотиктарҙан бойондороҡлолар өсөн мосолман реабилитация үҙәге асылды. Реабилитация программаһына бик етди көн тәртибе һалынған: хеҙмәт дисциплинаһын күҙәтеү, доғалар уҡырға өйрәнеү, дин әһелдәре үткәргән дәрестәрҙә ҡатнашыу. Үҙәктә пациенттарҙы медицина дауалауы үткәндән һуң ғына ҡабул итәләр. Мөрәжәғәт итергә: Максимовка ҡасабаһы, Сосновский урамы, 1/1. Телефон: 8-901-442-1080.

✓Өфөнөң быйылғы тәүге ярты йыллыҡтағы социаль-иҡтисади хәле күрһәткестәре Рәсәйҙең уртаса күрһәткесенә ҡарағанда яҡшыраҡ, тип белдерҙе журналистар менән осрашыуҙа Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Альбина Йосопова. Мәҫәлән, баш ҡаланың 183 эре һәм уртаса предприятиелары 142,2 миллиард һумлыҡ тауар етештерҙе һәм хеҙмәт күрһәтте. Был былтырғы кимәлдең 86,5 процентын тәшкил итә. Кризисҡа ҡарамаҫтан, был предприятиеларҙа эш хаҡы 9,5 процентҡа артҡан.

✓Башҡортостан балалары - 12 йәшлек Искәндәр Ханнанов һәм 14 йәшлек Камилла Бикҡолова Португалияла йәйге мәктәптә үтәсәк Халыҡ-ара фестивалдә ҡатнашасаҡ. Фестиваль 16 көн барасаҡ һәм был осорҙа балалар менән донъя кимәлендә билдәле музыканттар шөғөлләнәсәк.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

**Үткән саҡырыу кампанияһында Башҡортостандан 11 меңгә яҡын егет армияға оҙатылды. Яҙғы саҡырыу осоро, мәғлүм булыуынса, 1 апрелдә башланып, 15 июлдә тамамланды һәм ул күп йәһәттән яңыса булды. Мәсәләнән, быйыл яҙ Ҡораллы Көстәр сафына элегерәк яҙмыштары енәйәт яуаплылығы менән бәйле егеттәр ҙә саҡырылды. Әлеге яҙмышҡа дусар булған егеттәр һаны 950-гә етә, һәм уларҙың бөтәһе лә еңелсә иҫәпләнгән енәйәт төрө өсөн шартлы сроктарға хөкөм ителгән.**

# ЕГЕТМЕН ТИГӘН ЕГЕТ...

## армияла булырға тейеш

- Төрмәлә ултырып ҡайтҡан бер генә йәш кеше лә армияға эләкмәне, - тип белдерҙе БР Хәрби комиссариатының саҡырыуҙы әҙерләү һәм граждандарҙы контракт буйынса хәрби хеҙмәткә туплаусы беренсе бүлек начальнигы вазифаһын башҡарыусы Гурий Поляков журналистар менән осрашыуҙа. - Шартлы рәүештә хөкөм ителгәндәре лә мөһим һәм төп частарға ебәрелмәне.

Һалдаттар сафын хөкөм ителгәндәр иҫәбенә тулыландырыу призывниктар һанын байтаҡҡа арттырыу кәрәклегенән сығып эшләнә. Сағыштырыу өсөн былтырғы һандарға ҡарау ҙа етә: 2008 йылдың яҙында Башҡортостандан бөтәһе 6600 егет армияға алынған.

Армияға саҡырыу буйынса пландың арттырылыуы иң тәүҙә хеҙмәт итеү ваҡытының ҡыҫҡартылыуы менән бәйле, әле ул бер йыл тәшкил итә. Бынан алдараҡ хәбәр ителеүенсә, 2008 йылдан башлап юғары белемле ауыл уҡытыусылары һәм врачтар, ҡайһы бер хоҡуҡ һаҡлау ведомстволары хеҙмәткәрҙәре, башланғыс һәм урта һөнәри белем биреү учреждениелары уҡыусылары (әгәр уларҙың тамамланған урта белеме булған хәлдә), оло йәштәге һәм инвалид ата-әсәнең улдары, өс йәшкә тиклемге балаларҙың атайҙары, ауырлы ҡатындарҙың ирҙәре, бала саҡтан инвалид йәки 8 йәшкә тиклемге ике һәм унан да күберәк балалар тәрбиәләнгән тулы булмаған ғаиләләге егеттәр ҙә армияға алына.

Яҙғы саҡырыу кампанияһын оҙайтыу ҙа армия сафына мөмкин тиклем күберәк кеше йәлеп итеү маҡсатынан эшләнде. Июль уртаһына тиклем өҫтәмә 15 көн юғары уҡыу йорттарын тамамлап, диплом алып сығыусы егеттәрҙе саҡырырға мөмкинлек бирҙе. Шул уҡ ваҡытта саҡырыу осорона 18 йәше тулһа ла, алдан вәғәҙә ителгәнсә, мәктәп тамамлаусы үҫмерҙәр армияға алынманы. Шуның менән уларҙың һәр береһенә юғары уҡыу йортона инеү мөмкинлеге бирелде.

Альтернативалы граждандар хеҙмәте 2004 йылда булдырылып, ул хәрби хеҙмәтте "гражданкала" эшләү менән алыштырыу мөмкинлеген бирә. Был төр хеҙмәткә ынтылып тороусылар тәүҙән үк булманы, шулай ҙа быйыл яҙ беҙҙең республиканан берәү ошо юлды һайланы, көҙгөләккә тағы өс ғариза яҙылған. Уларҙың бөтәһе лә үҙҙәренең дини инаныу тойғолары буйынса "гражданкала" ҡалырға ҡарар итте.

Армияға саҡырылыусы егеттәрҙең һаулыҡ торошона килгәндә иһә, республика медицина комиссияһы рәйесе Роберт Йыһангиров шулай тип белдерҙе: Башҡортостан егеттәренең сәләмәтлек торошо буйынса хеҙмәткә яраҡлылыҡ күрһәткесе 70,1 процент тәшкил итә, был иһә дөйөм Рәсәй күрһәткесенән байтаҡҡа юғары.

**Әлфиә ШӘРӘФЕТДИНОВА. "Башинформ".**

ЙӨҘӨН КҮРЕП, ЙӨҘ ОЯЛМАҺЫН!

# КҮҢЕЛ КҮҘЕҢ КҮРМӘҺӘ...

## маңлай күҙең ботаҡ тишеге




**Үткән аҙнала "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы БР Законын ғәмәлгә ашырыу буйынса Өфө ҡала округы хакимиәте эргәһендәге комиссияның сираттағы ултырышы уҙғарылды. Ултырышта баш ҡалабыҙҙың Дим һәм Совет райондарының хакимиәт башлыҡтары Зыфар Хәкимов һәм Салауат Бәхтейәров ҡаралған мәсьәлә буйынса бойомға ашырылған эштәр хаҡында мәғлүмәт бирҙе.**

Һүҙ юҡ, Өфөнөң был райондарында мәктәптәрҙә туған телдәрҙе, дәүләт телдәрен уҡытыуҙы талаптарға ярашлы ойоштороу, визуаль мәғлүмәт сығанаҡтарында телдәрҙе, бигерәк тә башҡорт телен дөрөҫ ҡулланыу маҡсатында байтаҡ эш башҡарылған. Элегерәк ҡала транспорты туҡталыштары атамаларында, төрлө учреждение һәм ойошмаларҙың алтаҡталарында, реклама яҙыуҙарында аҙым һайын тиерлек күҙгә салынып, йән көйҙөрөп торған бихисап хаталарҙы төҙәтеү ҙә күпкә әүҙемләште. Шулай ҙа тынысланырға иртәрәк әле, сөнки ҡала мөхитендә визуаль мәғлүмәт яңырып тора, шуның менән бергә иҫке хаталарға яңылары өҫтәлә. Ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев район хакимиәттәре етәкселәре иғтибарын тап шуға йүнәлтте лә инде. Комиссия ултырышына саҡырылғандарға экранда һәр бер район территорияһында төшөрөп алынған хаталы алтаҡталар, урам аншлагтары һәм башҡа яҙма мәғлүмәт сығанаҡтары күрһәтелде. "Был осраҡта беҙ тап коммунизмға табан барғандағы хәлгә төштөк: беҙ уға яҡынлашҡан һайын, ул йырағая бара ине. Хаталарҙы төҙәткән һайын, улар нишләптер күбәйә бара", - тип ғәжәпләнеүен йәшермәне баш ҡала округы хакимиәте башлығы. Һабаҡ булһын, типтер инде, Павел Качкаев ҡалабыҙҙың бер районы хакимиәте бинаһында ишеккә яҙылып эленгән таҡтасыҡтарҙың фотоларын күрһәтеп, хаталар өҫтөндәге эште үҙебеҙҙән башлау зарурлығын белдерҙе. Шуныһы ғәжәп, шул уҡ бинала тел буйынса ултырыштар алып барған район комиссияһы ағзалары үҙҙәре көн һайын күреп йөрөгән яҙыуҙарҙың дөрөҫмө-түгелме икәнлегенә һис иғтибар итмәгән. "Өфө ҡала округы хакимиәтенең торлаҡ хужалығы идаралығы" МУП-ының генераль директоры Б. Герасимовҡа ла торлаҡ хужалығы предприятиеларының береһенең дә алтаҡталары законға ярашлы эшләнмәүе тураһында дәғүә белдерҙе ҡала башлығы. Уға мәғлүм булған хаталарҙы 15 көн эсендә төҙәтеү бурысы йөкмәтелде.

Шул уҡ һорау буйынса ҡала округы хакимиәтенең физик культура һәм спорт буйынса комитеты рәйесе С. Степанов сығыш яһаны, әммә ул башлыса милли спорт уйындары хаҡында ғына һөйләү менән сикләнде. Павел Качкаев та, аптырағас, унан: "Милли спорт уйындары буйынса уңыштар булыуы һәйбәт, әммә уның тел тураһындағы законға ни ҡыҫылышы бар һуң?" - тип һорарға мәжбүр булды һәм киләсәктә ҡаралған теманан ситләшмәү зарурлығы тураһында иҫкәртте. Ысынлап та, баш ҡала спорты башлығына төрлө спорт ярыштарында дәүләт телдәрендәге лозунгылар, саҡырыуҙар, русса һәм башҡортса иғлан-белдереүҙәр, спорт ойошмалары алтаҡталарының дөрөҫ яҙылған булыуы хаҡында үҙ фекер-тәҡдимдәре менән сығыш яһарға кәрәк ине.

Әлбиттә, ултырышта тикшерелгән мәсьәләләр буйынса ҡала хакимиәте комиссияһы тейешле ҡарар ҡабул итте, уны үтәүҙе район комиссиялары етди контролгә алырға бурыслы. Тик ҡуйылған маҡсатҡа өлгәшеү өсөн һәр бер ойошма етәксеһенең, комиссияларҙың терминологик төркөмдәренең һәм телдәребеҙ ҡулланылышына битараф булмаған һәр граждандың иғтибарлы булыуы фарыз.

Күрергә теләмәгәндең күҙе һуҡыр булмаһа ла, күңел күҙе күрмәй бит ул. Бына үҙ мөхитебеҙҙән ябай ғына, әммә үтә фәһемле бер миҫал. Баш ҡалабыҙҙың нәҡ уртаһындағы боронғо бер урам урыҫса "Новомостовая" тип йөрөтөлә, шул исемдәге транспорт туҡталышы ла бар. Белмәйем, ҡайһы "аҡыллы баш"-тың тәҡдиме шулай булғандыр, был урам башҡортса хәҙер "Яңы күпер урамы" тип йөрөтөлә. Ышанмаһағыҙ, аншлагын табып, үҙегеҙ уҡып ҡарағыҙ. Ағиҙел аша һалынған яңы күпер менән бәйле, йәнәһе, ошо исем. Тик һүҙ барған күпер совет осоронда, 50-се йылдарҙа ғына төҙөлгән, ә урам революцияға тиклем үк булған. Вәт әй, бер ниндәй яңы күпер булмаған, ә ошо исемле урам булған! Айыҡ аҡыл менән уйлаһаң, йәғни логик фекер йөрөтһәң (бының өсөн рус телен бик һәйбәт белеү ҙә мотлаҡ түгел), был урам атамаһының башҡортсаһы "Яңы ташлы урам" була бит! Ә әлегә, үҙебеҙ ҙә, етәкселәребеҙ ҙә битараф булғас, абсурд хәл менән килешеп йәшәй бирәбеҙ: бер үк урамдың бер-береһенән бөтөнләйгә айырылып торған ике мәғәнәһе бар икән. Өфө урамдарына элек суйырташ түшәгәндәр, бына ошо таш түшәлгән урам "мостовая" тип йөрөтөлгән. Беҙгә ни, ундай урамдарҙы күргән булмағас, "Новомостовая" һүҙенән "Яңы күпер" яһау бер ни тормай инде... Был миҫалды ла кемделер ғәйепләр өсөн түгел, ана шул күңел күҙҙәребеҙ нығырыҡ асылһын ине, тигән уйҙан килтерҙем, хөрмәтле йәмәғәт.

Ә баш ҡала округы башлығы Павел Качкаев, ултырышҡа һығымта яһап, бик тапҡыр һүҙҙәр әйтте: "Беҙ ҡала урамдарында, үҙебеҙ йәшәгән мөхиттә таҙалыҡ, матурлыҡ булдырыуға өлгәштек. Тик әлегә телдәребеҙ мөхитендә генә сүп-сар күп, шуға илтифат биреп еткермәйбеҙ һаман. Шуға күрә ошо мәҙәни мәсьәләгә бик иғтибарлы булыуығыҙҙы теләр инем". Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ, тиҙәр, әммә ошо ултырышта яңғыраған тәнҡиткә яуап итеп, телдәребеҙ сафлығына өлгәшә алһаҡ, башҡалар алдында йөҙөбөҙ ҡыҙармаҫ ине.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә баш ҡаланың тышҡы итисади һәм региондар-ара эшмәкәрлеге тураһында мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнелеүенсә, тәүге ярты йыллыҡта Өфө предприятиеларының тышҡы сауҙа әйләнеше738,5 миллион АҠШ доллары тәшкил иткән, был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 18,8 процентҡа аҙыраҡ. Экспорт 18 процентҡа, импорт 21,8 процентҡа аҙайған. 67 ил Өфө предприятиеларының партнеры булып тора. Сит ил дәүләттәренең Өфөбөҙ менән ҡыҙыҡһыныуы тотороҡло көйө ҡала, тәүге ярты йыллыҡта ғына беҙҙә Германия, Австрия, Канада, АҠШ, Ҡытай, Төркиә һәм Чехияның эшлекле һәм рәсми делегациялары булып киткән.

✓ Быйыл ете айҙа республика юлдарында балалар һәм үҫмерҙәр ҡатнашлығында 232 юл-транспорт һәләкәте теркәлгән, уларҙа 12 бала һәләк булған, 239-ы йәрәхәтләнгән. БР буйынса Эске эштәр министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, республикала 13 сентябргә тиклем "Иғтибар, балалар!" акцияһы бара. Акция барышында инспекторҙар балаларҙың юлда имгәнеүҙәрен иҫкәртеү саралары, ата-әсәләр, балалар менән ошо темаға әңгәмәләр үткәрәсәк.

✓ "Салауат Юлаев" командаһы хоккейсылары миҙгел алдынан әҙерлек уйындарын Швецияла уҙғарҙы. Улар үткәрелгән өс уйында ла еңеү яулап, төп призға эйә булды.

✓ 1 сентябрҙән льгота менән файҙаланыусылар өсөн ҡала яны транспортында бушлай йөрөү бөтөрөлә, ҡала транспортында льготалар күләме ҡыҫҡартыла. Бынан ары льготалар менән файҙаланыусы граждандар социаль билет буйынса ни бары ҡала транспортында һәм айына илле тапҡыр ғына йөрөй ала. Ә ҡала яны тимер юл транспортында льготалы категорияға ингән граждандар өсөн 50 процент ташлама 1 октябрҙән бөтөрөлә.

✓ Куйбышев тимер юлы "Өфө-Яңы Уренгой" йүнәлеше буйынса өҫтәмә пассажир поезы бүлде. Ул Өфөнән 31 августа 21 сәғәт 10 минутта (Мәскәү ваҡыты менән) китә, Яңы Уренгойҙан 3 сентябрҙә 00 сәғәт 55 минутта сыға.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

**Үткән шәмбелә ишембайҙар ҡала көнөн байрам итте. Күркәм сарраның тантаналы төп өлөшө Ленин исемендәге майҙанда үтте. Ишембайҙарҙы ҡала байрамы менән ҡотларға Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сәлих улы Сарбаев килде.**

# НИСЕК КЕНӘ ХӘЛЕҢ, ИШЕМБАЙ?

Шул тиклем хөрмәтле ҡунаҡтарҙы, меңәрләгән тамашасыларҙы йәлеп итеп килтергәс, байрам сараларынан һуң һәр кем: "Ишембайҙа нимә бар? Нисек йәшәп ята заманында ҡара алтыны менән дан алған был ҡала?" - тигән һорауға яуап табырға тейеш ине һымаҡ. Ысынлап та, яуап табылды. Премьер-министрҙың сығышында яңғыраған "Ишембайҙа 30 меңдән ашыу төр сәнәғәт тауарҙары етештерелә. Торлаҡ төҙөү буйынса ла республикала иң яҡшы күрһәткестәрҙең береһе һеҙҙең ҡалала", - тигән һүҙҙәр артабан һәр аҙымда раҫланды.

Ленин исемендәге майҙанда ауыл хужалығы һәм урындағы предприятиелар етештергән сәнәғәт тауарҙары күргәҙмәһе йәйелдерелгәйне. "Башнефть" акционерҙар нефть компанияһы "Башнефть-Ишембай" филиалы үҙ күргәҙмәһендә "Һаҙлыҡ батшалығы тормошо"н сағылдырһа, "Сәнәғәт Нефть-газ берекмәһе" үҙе етештергән "Уют" маркалы контейнер тибындағы мобиль биналарҙы бөтә халыҡ иғтибарына ҡуйҙы. "Ишембай станоктар ремонтлау заводы", "Ишембай ойоҡ фабрикаһы", биш тиҫтә йыл Рәсәй баҙарында уңышлы эшләп килгән "Ишембай трикотаж әйберҙәре фабрикаһы", "Уралмебельсервис", "Ишембай-мебель", "Ишембай икмәк комбинаты", "Башспирт"тың Ишембай шарапараҡы заводы, "Асфальт-изъмә заводы" һәм башҡаларҙың оло ҡунаҡтарға күрһәтер хеҙмәт емештәре етерлек булды. Ошо сәнәғәт экспонаттары күргәҙмәһен ҡарап сыҡҡандан һуң үҙенең тәьҫораттары менән уртаҡлашып, Премьер-министр тағы:

- Ишембай сәнәғәт комплексының индекс күрһәткестәре республика буйынса иң яҡшылар иҫәбендә. Һеҙҙең кеүек эшсән, үҙ еренә тоғро булған кешеләр барҙа, беҙгә бер ниндәй ҡыйынлыҡтар ҙа ҡәртә була алмаясаҡ. Республика йәшәй һәм иҗад итә, - тип өҫтәне.

Байрамдың рәсми өлөшөнән һуң Раил Сарбаев һәм башҡа рәсми ҡунаҡтар Ишембайҙың Көньяҡ биҫтәһендә асылған "Юрматы" физкультура-һауыҡтырыу комплексын асыу тантанаһында ҡатнашты. Мәртәбәле ҡунаҡтарҙы байрамса биҙәлгән комплекс ихатаһында Ишембай спортсылары ҡаршы алды. Ә ҡала үҙенең спортсылары менән маҡтана ала. Бында "Нефтсе" стадионы, киң спорт залдары һәм йөҙөү бассейны булған Спорт һарайы, көслө матдитехник базаға эйә булған Шашка мәктәбе, Бокс үҙәге бар. Ә инде "Юрматы" физкультура-һауыҡтырыу комплексы тағы ла күберәк ишембайҙарҙы спортҡа йәлеп итеү мөмкинлеге бирәсәк.

Артабан Премьер-министр Ишембайҙың Юрматы биҫтәһендәге бәләкәй ҡатлы йорттар төҙөлөшө майҙансығына юлланды. Бөгөн бында социаль йүнәлешле 8 коттедж төҙөлөп бөтөп килә. Уларҙың һәр береһенең дөйөм майҙаны - 90 квадрат метр. Һәр ғаиләгә үҙ хужалығын алып барыу өсөн 9,5 сутый ер бирeләсәк. Премьер-министр был йорттарҙы һатыу шарттары менән ҡыҙыҡһынды. Миллион һумдан ашыу суммаға барып төшкән коттедждар хаҡының 30 процентын - бер юлы, ә ҡалған суммаһын аҡрынлап индереү шарты ҡуйылғанын белгәс, Хөкүмәт башлығы социаль торлаҡ өсөн был самаһан артыҡ шарт, тип билдәләне һәм урындағы етәкселәргә уны яңынан ҡарап сығырға кәңәш итте. "Бөгөн республикала "Үҙ йортоң" программаһы буйынса төҙөлгән торлаҡ йорттарҙы ысын мәғәнәһендә һәр кем өсөн ҡулайлы тип иҫәпләргә була. Өфө ситендә төҙөлгән был йорттарҙың бер квадрат метры 8 мең һумдан башлап баһалана. Ишембайҙа иһә күпкә ҡиммәт килеп сыға", - тине Хөкүмәт башлығы ҡалала ошондай йортто һатып алған йәш ғаилә - Гөлназ һәм Инер Вәлиевтар менән танышып, әңгәмәләшкәндән һуң.

"Витязь" машиналар эшләү компанияһы полигонында Премьер-министрҙы бында етештерелгән вездеходтар ҡыҙыҡһындырҙы. Бөтөнләй юлһыҙлыҡ шарттарында тайғаны, һаҙлыҡ урындарҙы бер ниндәй ҡыйынлыҡһыҙ үткән машиналарҙы "Витязь" йылына 30-35 берәмек етештерә. Канадала етештерелгән ошондай уҡ класлы вездеходтарға ҡарағанда, Ишембай машинаһы һатып алыусыға өс тапҡырға арзаныраҡҡа төшә.

Дөйөм алғанда, Башҡортостан Республикаһының Хөкүмәт башлығы Ишембайҙың социаль-иҡтисади үҫешен юғары баһаланы һәм бында сәнәғәт етештереүсәнлегенең кәмемәүе, хатта ҡайһы бер предприятиеларҙа уның үҫеше күҙәтелә, тип билдәләне. "Әле күптән түгел генә күп күрһәткестәр буйынса артта һөйрәлә тип белә инек Ишембайҙы, уның яңы һулыш алып, алға ынтылыуы ҡыуаныслы хәл", - тип билдерҙе байрамға килгән ҡунаҡтарҙың береһе. Уны башҡалар ҙа хупланы.

Гөлнур ДӘҮЛӘТЙӘРОВА.



Гөлназ ИШЕМБАЕВА фотоһы.

ҺИНЕҢ ХОҠУҒЫҢ

## КҮРШЕЛӘРҘӘ БАЛ ҠОРТО

**● Ауылда ихата биләмәһендә күпме оя бал ҡорто тоторға мөмкин? Күршебеҙҙең илле умарта ҡорто бар, йәйгеһен баҡсала эшләү бөтөнләй мөмкин түгел! Быға ҡарата ниндәйҙер ҡарар бармы? Беҙгә әхлаҡи һәм матди зыян килтергәне өсөн беҙ күршебеҙҙе судҡа бирә алабыҙмы?**

- 2004 йылдың 1 октябрендә ҡабул ителгән Башҡортостан республикаһының "Умартасылыҡ тураһында"ғы Законына ярашлы "Ҡорт күстәре менән умарталарҙы урынлаштырыу" тигән 9-сы статьяла "Физик шәхестәр һәм ойошмалар ҡорт күстәре менән умарталарҙы һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт, белем биреү учреждениеларынан кеше хәүефһеҙлеген тәьмин итерлек алыҫлыҡта урынлаштыра". Ҡорт күстәре менән умарталар ер участкаһы сигенән ун метрҙан да яҡын булмаған алыҫлыҡтағы урында урынлашырға тейеш, кире осраҡта умарталар ике метрҙан да кәм булмаған бейеклектә ултыртылырға йәки күрше ер участкаһынан бина, ҡоролма йәки ике метрҙан да кәм булмаған ҡуйы ҡыуаҡлыҡ менән кәртәләнеп торорға тейеш", тип яҙылған. Һеҙгә участка милиция инспекторына ялыу менән мөрәжәғәт итергә кәрәк. Әгәр ҙә хәл үҙгәрмәһә, күршеләрегеҙгә бындай эшмәкәрлек төрө менән шөғөлләнеүҙе тыйыу дәғүәһе менән судҡа мөрәжәғәт итергә мөмкин булыр.

## ПОДЪЕЗДА ТАРТҠАН ӨСӨН - ШТРАФ!

**● Әгәр ҙә баҫҡыс майҙандарын йыйыштырыусы юҡ, ә күршеләр дөйөм ҡулланыу урындарын үҙҙәре теләгәнсә файҙаланып, үҙҙәренең сүп-сарын йыйырға теләмәй икән, бындай осраҡта нимә эшләргә? Подъезда тартҡан, спиртлы эсемлектәр эскән һәм антисанитария булдырған өсөн штраф түләтеү ҡаралғанмы?**

- Йортта йәшәүселәрҙең торлаҡ йорт подъезында систематик рәүештә тартыуы Торлаҡ йортто ҡулланыу ҡағиҙәһенең 6-сы пунктын боҙоу һанала (Ул РФ Хөкүмәте тарафынан 2006 йылдың 21 ғинуарындағы ҡарары менән раҫланған). Был ҡарарға ярашлы, торлаҡ йорт менән файҙаланыу был йортта йәшәүсе граждандарҙың һәм күршеләрҙең хоҡуҡтарын һәм законлы мәнфәғәттәрен, янғын хәүефһеҙлеге, санитар-гигиена һәм башҡа закон талаптарын иҫәпкә алып башҡарылырға тейеш. Торлаҡ йорттоң баҫҡыс майҙанында тәмәке тартыу шулай уҡ санитар нормаларҙың "Торлаҡ йорттарға санитар-эпидемиологик талаптар" тигән 9.1 пунктын боҙоу булып тора. Был осраҡта яҙма ғариза менән йәшәгән урын буйынса прокуратураға мөрәжәғәт итергә кәрәк. Тикшереү һөҙөмтәләре буйынса прокуратура тарафынан административ эш ҡуҙғатыла, уның буйынса был йортта йәшәгән тәмәке тартыусыны штраф түләттереп, административ яуаплылыҡҡа тартылыуҙары ихтимал. РФ Граждандар кодексының 247-се статьяһындағы нормаларға нигеҙләнеп, күршеләргә подъезда тартыуҙы тыя алаһығыҙ. Уға ярашлы, өлөшләтә шәхси мөлкәттә урынлашҡан милек менән (шул иҫәптән, баҫҡыс майҙаны менән) файҙаланыу ундағы барлыҡ ҡатнашыусылар тарафынан башҡарыла. Был хоҡуҡ РФ Торлаҡ кодексының 36-сы статьяһына ярашлы бирелгән.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



### Сәхрәлә үлән ваннаһы

Элегерәк киң таралған ысулды иҫкә төшөрөп, үпкә, быуындар, артыҡ ауырлыҡ, тиргә шешектәр сығыуы һәм башҡа ауыруҙарҙан арынырға була.Йәйге селләлә ерҙә кеше һыйырлыҡ итеп ярты метр тәрәнлектә ҡаҙып, эсенә ут яғырға. Ут янып бөткәс, шул тирәлә үҫеп ултырған үләндәрҙе салғы менән сабып алып, ҡалын ғына итеп соҡорға түшәргә. Үлән өҫтөнән ҡайнар һыу һибергә лә, ауырыу кешене яткырып, өҫтөн алдан әҙерләнгән ҡайын, дегәнәк япраҡтары һалғандан һуң брезент йәки башҡа эфир майҙарын үткәрмәй торған япма менән ябырға. Муйын тирәһен тағы ла берәй нәмә менән өҫтәп ябығыҙ. Сирле кеше күпме ята ала, шул тиклем ятһын, шулай ҙа йылыһы бөтә башлаһа, үләндә ятырға кәңәш ителмәй. Йөрәге насар кешеләргә лә оҙаҡ ятырға кәрәкмәй. Был процедураны мунсала ғына эшләп булмаймы ни, тип һорарһығыҙ. Була, тик мунсала йылы үләнгә уранып, 20-25 минуттан артыҡ ятып булмай, ә сәхрәлә оҙағыраҡ ятырға була. Эҫе көндә башты дегәнәк япрағы менән ҡапларға һәм йылы процедуранан һуң һалҡын тейҙереүҙән һаҡланырға кәрәк.

### Тамаҡ ауыртһа...

Ромашка, бәйғәмбәр тырнағы сәскәләрен, бөтнөк, эвкалипт япрағын һәр береһен берәр ҡалаҡлап алып, өҫтөнә ярты литр ҡайнаған һыу ҡойоп, ярты минут ҡайнатҡас, ярты сәғәткә төнәтергә ҡуйырға. Төнәтмәне һөҙөп алып, көнөнә биш тапҡыр шуның менән тамаҡты яҡшылап сайҡатырға. Ун көндән һуң ирҙәле-кисле бер стакан йылы һыуға ярты балғалаҡ тоҙ һалып, бер-ике тамсы йод тамыҙып, шул ҡатнашма менән тағы ла ун көн сайҡатырға. Был процедураны ваҡыты-ваҡыты менән ҡабатлап торорға.

### Эсәктәр ауыртһа...

Ромашка, шалфей, һарыгүҙ үләнен һәр береһен берәр балғалаҡ алып, бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ярты сәғәт төнәткәс, һәр ике сәғәт һайын берәр ҡалаҡлап эсергә кәрәк. Өс ай эскәндән һуң, көнөнә дүрт-биш тапҡырға ҡалдырып, ауырыу тәҙәлгәнсе эсергә. Эсәк ауырыуы менән яфаланыусыларға табиптар бик ҡаты диета күҙәтергә ҡуша. Диета менән берлектә был төнәтмәне ҡулланғанда, күпкә тиҙерәк һауығырға мөмкин.

Флора БИКЕМБӘТОВА.

ӘЙТӘГҮР!

# ҮҘ ҺӨНӘРЕН...

## балалар үҙҙәре һайлаһын

**Ошо аҙнала Конгресс-холл бинаһында Өфө ҡала округы мәғариф хеҙмәткәрҙәренең август кәңәшмәһе булып уҙҙы. "Педагогтар эшен баһаларға һәм уларға стимул бирергә кәрәк. Бының өсөн иң тәү сиратта уларҙы лайыҡлы эш хаҡы һәм торлаҡ менән тәьмин итеү зарур", - тине кәңәшмә ултырышын асып, Өфө ҡала округы хакимәте башлығы П.Р. Качкаев. Уның һүҙҙәренсә, һуңғы ике йылда 130 уҡытыусы үҙҙәренең торлаҡ шарттарын яҡшыртҡан. Быйыл 93 мәғариф учреждениеһына ремонт яһалған. Баш ҡалала тыуымдың йылдан-йыл артыуын иҫәпкә алып, Павел Качкаев һуңғы биш йылда 26 балалар баҡсаһы асылыуын, быйыл өсәү төҙөлөүен, һәм тағы ла өсәү яңы уҡыу йылында тапшырыласағын әйтеп үтте. Һуңғы йылдарҙа муниципаль белем биреү системаһында ла ыңғай яҡҡа үҙгәрештәр күҙәтелә. Милли проектты тормошҡа ашырыу сиктәрендә 61 дөйөм белем биреү учреждениеларының дәүләт ярҙамы алыуы, 200 уҡытыусының 100 мең күләмендәге федераль грантҡа эйә булыуы ошоға дәлил. Бынан тыш, мәктәптәргә уҡыу кабинеттары өсөн 380 заманса ҡоролма комплекты, шулай уҡ 130 миллион һумдан ашыуға мультимедия ҡоролмаһы тапшырылған.**

**Форумда тикшерелгән мәсьәләләр, күтәрелгән проблемалар күп булды. Беҙ иһә ҡатнашыусыларға мөрәжәғәт итеп, шулай уҡ мәғариф системаһында проблема булараҡ күтәрелгән "Ни өсөн беҙҙең мәктәпте тамамлаусы балалар төп һөнәри йүнәлешен таба алмай?" - тигән һорауға яуап эҙләнек.**

**Айгөл ӘХМӘТСАФИНА, 109-сы урта белем биреү мәктәбенең директор урынбаҫары:** Мәктәбебеҙҙә балаларға дөрөҫ һөнәр һайлау, төрлө йүнәлештәр буйынса махсус кластар асыла, айырым предметтар төплөрәк өйрәтелә. Тик балалар үҙҙәре быға еңелерәк ҡарай. Беренсенән, һөнәр һайларға әле өлгөрөрмөн, тип уйлай. Икенсенән, ата-әсәләр балалары менән бер күҙлектән сығып эш итмәй. Әйтәйек, бала уҡыуын филология буйынса дауам иткеһе килһә лә, атай-әсәй уны иҡтисади йүнәлешкә этәрә. Шунан бала юғалып ҡала, сөнки ул был предметтарҙан алдыра алмай. Хәҙер БДИ һөҙөмтәләре буйынса юғары уҡыу йорттарына уҡырға ҡабул итә башланылар, был осраҡта ла ҡайһы бер предметтарҙан көсһөҙөрәк булған бала ни эшләргә белмәй албырғап ҡала. Тағы ла бер бәлә - ул вузда уҡыуҙың түләүле булыуы. Элек беҙ уҡыған совет заманында уҡыу бушлай булғас, балалар үҙ белеме менән үҙе һайлаған өлкәгә уҡырға инеп китә ине. Ә хәҙер атай-әсәйҙәр: "Иң мөһиме - диплом ал, ана, хәҙер төрлө курстар асыла, артабан үҙең теләгән һөнәргә эйә булырһың әле", - тип, фекер йөрөтә һәм балаларын коммерция нигеҙендә уҡырға индерә. Уҡып сығып, эш таба алмаһа: "Ярай, балам, быйылға көтөп тор, икенсе йыл берәй эше килеп сығыр әле", - тип, тағы ла үҙ елкәһенә ултыртып ҡуя. Беҙ шуға ла ошо йәһәттән ата-әсәләр менән айырым һөйләшеүҙәр алып барабыҙ, тик күпселек осраҡта улар үҙ фекерендә тороп ҡалыуҙы хуп күрә.

**Флүзә ХАННАНОВА, Ленин районы хакимиәте мәғариф бүлегенең туған телдәр буйынса методисы:** Бөгөн балалар уҡыу йорттарына күберәк ата-әсәһе теләге буйынса уҡырға инә, ә уның үҙ ҡарашы күпселек осраҡта иҫәпкә алынмай. Әгәр уҡыусылар һөнәр һайлау мәсьәләһен үҙҙәре хәл итһә, әлбиттә, башҡасараҡ күренеш булыр ине. Бөгөн диплом алып сыҡҡан йәштәр араһында үҙ һөнәре буйынса эшләмәү, йәки һөнәр алмаштырыу өсөн яңынан уҡырға инеү күренештәре ошоноң һөҙөмтәһе инде ул. Беҙҙең заманда бындай проблема торманы бит. Мәҫәлән, минең уҡытыусы булғым килде һәм ошо һөнәргә эйә булдым. Балалар менән эшләргә бик яратам, үҙемде мәғариф өлкәһенән ситтә бөтөнләй күҙ алдына килтерә алмайым, тимәк, мин үҙ юлымды тапҡанмын. "Ярты бәхет яратҡан шөғөлдән" тип бушҡа ғына әйтмәйҙәр бит. Ошоно балалар ҙа, ата-әсәйҙәр ҙә, мәғариф өлкәһендә эшләүселәр ҙә аңлаһа ине.

**Динара ИШБУЛАТОВА яҙып алды.**

АФАРИН!

# БЕЛЕМ АРТЫНАН...

## Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларына

(Башы 1-се биттә).

Әлегә тиклем республиканан илебеҙҙең алдынғы уҡыу йорттарына был тиклем дә күп уҡыусылар ебәрелгәне булмаған. Быйыл беҙҙең студенттарҙы Мәскәүҙең һәм Санкт-Петербургтың 48 юғары уҡыу йорто ҡабул итәсәк. Уҡыусыларҙың республикабыҙҙа талап ителгән тау эштәре, авиация двигателдәре, урман эштәре, техник йүнәлештәр буйынса һөнәрҙәрҙе һайлауы маҡтаулы күренеш.

- Бөгөн беҙҙә сығарылыш уҡыусыларына уҡырға илебеҙҙең генә түгел, ә сит ил юғары уҡыу йорттарына ла йүнәлтмә биреү мөмкинлеге бар, - тине Раил Сарбаев. - Бөгөн, илебеҙ өсөн еңел булмаған ваҡыттарҙа, кадрҙар әҙерләү мөмкинлеген тик иҡтисади яҡтан үҫешкән һәм төбәктең алға китеүен теләгән республика ғына булдыра ала. Был беренсе сиратта республикабыҙ Президентының хеҙмәте. Ошо йылдарҙа ул башҡарған эштәр Башкортостанға һаҡланып ҡалыу ғына түгел, ә иҡтисади яҡтан көслө төбәк булырға ла булышлыҡ итте. Уҡыусыларҙы оҙон һәм изге юлға оҙатҡан саҡта шуны әйтергә теләр инем: уҡыу йортон тамамлағас та, тыуған илегеҙгә ҡайтығыҙ һәм республикабыҙ файҙаһына эшләгеҙ. Һеҙ илебеҙгә кәрәкле белгестәр буласаҡ икәнегеҙҙе бер ваҡытта ла хәтерегеҙҙән сығармағыҙ.

Уҡыусылар республика Хөкүмәте Премьер-министры менән күҙгә-күҙ ҡарап аралашты, үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған, борсоған һорауҙарға яуаптар алды. Осрашыуға килгән һәр студенттың, ата-әсәнең йөҙөндә бәхетле йылмайыу сатҡылары балҡый ине. Атай-әсәй ҡосағынан, тыуған республикаһынан айырылып, ҙур ҡалаға уҡырға барыу йәштәрҙән ҙур яуаплылыҡ та талап итә. Ят мөхиттә юғалып ҡалмаҫҡа, төрлө милләт вәкилдәре араһында башҡорт халҡын танытырға тура киләсәк уларға. Хәйерле юл һеҙгә!



ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Флорида МИҺРАНОВА, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты сығарылыш уҡыусыһы:** Мин тап ошо гимназияла уҡыуым менән бәхетлемен. Был уҡыу йорто республикабыҙҙың төрлө төбәгенән йыйылған һәр балаға үҫергә мөмкинлек бирә. Мин үҙем гимназияла уҡыған осорҙа ҡала, республика конкурстарында, олимпиадаларҙа ҡатнаша торғайным. Миңә белем биргән уҡытыусыларыма, директорыбыҙ Әлфир Сулпан улы Ғайсинға ҙур рәхмәтемде белдерәм. Башҡортостаныбыҙҙың киләсәге беҙҙең ҡулда икәнде аңлайым. Хөкүмәтебеҙҙең беҙҙе, йәштәрҙе Рәсәй ҡалаларының юғары уҡыу йорттарына маҡсатлы рәүештә уҡырға ебәреүе бик маҡтаулы күренеш, етәкселәребеҙгә ҙур рәхмәт!

Журналист булыу - бала саҡтан килгән хыялым. Мәскәү дәүләт университетының журналистика факультетына уҡырға бик теләп барып индем. Сит ерҙә, сит кешеләр араһында йөрөгәндә бер ҡасан да үҙемдең Башҡортостандан, башҡорт милләтенән икәнде онотмаясаҡмын, үҙемде лайыҡлы тотасаҡмын, тип ышандырам, сөнки ситтәр тап беҙгә ҡарап, дөйөм Башҡортостаныбыҙ, халҡыбыҙ тураһында фекер йөрөтәсәк бит.

**Спартак СӘФӘРҒӘЛИН, Республика Башҡорт лицей-интернаты сығарылыш уҡыусыһы:** Миңә Мәскәү ҡалаһының Рәсәй химик-техник университеты студенты булыу бәхете тейҙе! Әлбиттә, был минең өсөн генә түгел, атай-әсәйем, уҡытыусыларым, класташтарым, дуҫтарым өсөн дә ҙур шатлыҡ. Илебеҙҙең баш ҡалаһына уҡырға инеү күптәнге хыялым ине. Республикабыҙҙа киң билдәле, иң алдынғы мәктәптәрҙең береһе булған Республика башҡорт лицей-интернатында уҡыуым менән ғорурланам. Лицейҙа белем алған биш йылым күҙ асып йомған арала һиҙелмәй уҙып та китте. Уҡыған мәктәбемә, яратҡан уҡытыусыларыма, тәрбиәселәремә ҙур рәхмәтлемен. Минең уңыштарымда уларҙың да өлөшө ҙур икәнен аңлайым, киләсәктә уларҙың ышанысын аҡлармын, йөҙҙәренә ҡыҙыллыҡ килтермәм. Әлбиттә, Мәскәү юғары уҡыу йорттарында яҡшы белем бирәләр. Унда үҙеңде төрлө яҡтан үҫтерергә, һәләтеңде арттырырға мөмкинлектәр күберәк. Мин үҙ алдыма университетты яҡшы тамамлап, кире республикама әйләнеп ҡайтырға, тигән маҡсат ҡуйҙым.

**Гөлсөм һәм Руслан ШАФИҠОВтар:** Улыбыҙ Урал РФ Хөкүмәте эргәһендәге Финанс академияһына уҡырға инде. Бәләкәй сағынан тырыш, ныҡышмал бала булды, алдына ҡуйған маҡсатын тормошҡа ашырмайынса ҡалмай торғайны. Фатима Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһын көмөш миҙалға тамамланы. Бәләкәй сағынан тик "5" билдәләренә генә уҡыны. Уҡырға ингәнен белгәс тә шул тиклем шатландыҡ. Әлбиттә, ҙур ҡалаға ебәрергә бер аҙ ҡурҡабыҙ. Шулай ҙа үҙенең теләге көслө булды, беҙҙе: "Ҡурҡмағыҙ, барыһы ла яҡшы буласаҡ", - тип йыуата. Башта төрлө уҡыу йорттарын ҡараны: ҡыш көнө, бер ҡайҙа ла китмәйем, Өфөлә генә уҡыйым, класташтарымдан, туғандарымдан айырылғым килмәй, тип тә йөрөнө. Әле бер уҡыу йортона, әле икенсеһенә барам, тип йөрөгән сағында Хөкүмәттән Мәскәү ҡалаһына уҡырға барырға тәҡдим алдыҡ. Урал күп уйлап тормай, шунда уҡ ризалашты. Алдына маҡсат ҡуйғас, ҡаршы торорға ярамай, тип уйлайбыҙ. Мәскәү ҡалаһы башҡорттары тураһында ишетеп торабыҙ, йыш ҡына осрашып торалар, берҙәм йәшәйҙәр. Улыбыҙ ҙа уларға ҡушылыр, тип уйлайбыҙ. Үҙенең теләге булғас, яҡшы уҡыр, һынатмаҫ, беҙҙең өмөттәребеҙҙе аҡлар, уҡыу йортон яҡшы тамамлап, һайлаған һөнәре менән республикабыҙға, халҡыбыҙға файҙа килтерер, тип ышанабыҙ.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

# БЕЛЕМ АРТЫНАН...

## Ҡытайға еткән

**Тормош ысынбарлығынан ҡурҡмай, маҡсаттарына табан алға ынтылған, күп яҡлы һәләткә эйә йәштәребеҙ бихисап. "Ғәйрәт иткән тау ярыр" тигән улар хаҡында халыҡ аҡылы. Һүҙем ана шундайҙарҙың береһе - Ҡытайҙың Ляонин провинцияһының Шәньян ҡалаһындағы Ляонин университетында белемен камиллаштырыусы Көйөргәҙе районы Ҡарай ауылы ҡыҙы Альбина ӘМИРОВА тураһында. Ул һуңғы йылдарҙа сәйәси йәһәттән дә, иҡтисади күрһәткестәр буйынса ла донъяла мөһим урын тотҡан ил хаҡындағы хәтирәләре менән уртаҡлаша:**



### Тел мәсьәләһенә етди иғтибар бүленә

Күҙаллауҙар буйынса, XXI быуатта донъяла Көнсығыш илдәре хакимлыҡ итәсәк, тиҙәр. Ә сәйәсәттәге төп ролдәрҙең береһен Ҡытай дәүләте уйнаясаҡ, имеш. Телсе ғалимдар ҙа илле йылдан инглиз теленең урынын ҡытай теле аласаҡ, тип иҫәпләй. Кешелектең алтынан бер өлөшө аралашҡан был телдең актуаль булыуына шик юҡ. Алдан күрә белеү һәләтенә эйә булған ҡытайҙар сит илдәрҙән телде өйрәнергә теләүселәрҙе күпләп саҡыра. Бигерәк тә ҡаҙылма байлыҡтарға бай Африка ҡитғаһы дәүләттәренән студенттар күп. Шуға күрә Ҡытайға барыуымдың тәү маҡсаты - Ляонин университетының сит телдәр институтында ҡытай әҙәби теле - путунхуаны өйрәнеү булды. Мин уҡыған төркөмдә Рәсәй, Германия, Кения, Мозамбик, Япония, Таиланд, Көньяҡ Корея, Марокко, Америка Ҡушма Штаттары, Канада, Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстан - йәмғеһе ун алты илдән студенттар уҡыны. Уҡыу программаһы өс төрлө йүнәлештә төҙөлгән: иероглифтарҙы өйрәнеү, аудирование, һөйләү телендә аралашыу һәм шулай уҡ гәзит-журналдар уҡыуҙан ғибәрәт ине. Төркөмдәштәребеҙ менән бик татыу булдыҡ. Тыуған көндәрҙе, байрамдарҙы бергә уҙғарҙыҡ. Хатта һәр беребеҙ үҙенең туған телендә йырлап, бәйге лә үткәрҙек. Башҡорт моно дуҫтарымдың күңеленә хуш килеүенә сикһеҙ шатландым. Шулай уҡ төркөмөбөҙ менән ҡала кимәлендә уҙғарылған ҡытай теле фестивалендә "Золушка" әкиәтен сәхнәләштереп, өсөнсө урын алыуға өлгәштек.

Иң алдынғы студенттарға бер йыллыҡ тел курсын тамамлағас, артабан белемде камиллаштырыу мөмкинлеге асыла. Ляонин провинцияһының мәғариф бүлеге стипендиялар һәм гранттар тәҡдим итә. Минә Ляонин университетының юридик факультеты аспирантураһында артабан уҡыу мөмкинлеге бирелде.

### Ҡытай донъяһы

Ҡытайҙа бөтәһе илле алты милләт вәкиле йәшәй. Даосизм һәм буддизм дине өҫтөнлөк итә. Мосолмандар ҙа байтаҡ. Дөйөм халыҡ һаны һигеҙ миллион тәшкил иткән Шәньян ҡалаһында ете йөҙ меңдән ашыу дини ҡәрҙәштәребеҙ йәшәй. Ҡытайҙар үҙҙәренең бик боронғо, бай мәҙәниәтле, меңәр йыллыҡ тарихҡа эйә милләт булыуы менән сикһеҙ ғорурлана. Төньяҡ провинцияларҙа йәшәүселәр көньяҡтағыларҙан ҡунаҡсыллығы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе теүәл күҙәтеүе менән айырылып тора. Көньяҡта иһә, халыҡ күберәк америкаларға тартыла. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: был илдә ифрат егәрле халыҡ йәшәй. Бер эштән дә ҡурҡмайҙар, тырыштар, алдан хәстәрлек күрә беләләр.

Ҡытайҙарҙың тағы ла бер ыңғай һыҙаты - мул һәм тәмле итеп туҡланыу. Улар күберәк йәшелсә ашай. Тәме ҡабаҡты хәтерләткән татлы картуфты, кукурузды, бәшмәкте бик яраталар. Күпселек диңгеҙ аҙыҡтарына, сусҡа итенә өҫтөнлөк бирәләр. Дөгө был илдә икмәк урынына ҡулланыла. Аш табынының уртаһына һәр ваҡыт махсус һауытта бешкән дөгө ҡуйыла. Аш-һыуҙың төрлөләренә хайран ҡалырлыҡ инде. Был һый-хөрмәтте әҙерләүсе ашнаҡсылар бөтә донъяла иң оҫталарҙан һанала. Эшлекле мөнәсәбәттәр ҙә ошондай табындар артында хәл ителә.

Шулай уҡ Ҡытайҙа туризм үҫешкән. Һәр бер әҙме- күпме тарихи әһәмиәткә эйә булған урын - килем сығанағы. Уларҙың тәжрибәһен Башҡортостанда ла ҡулланырға кәрәк, тип иҫәпләйем. Тик йәмәғәтселектең тирә-яҡ мөхитте һаҡлау проблемаһына күҙ йомоп ҡарауы күңелде ҡыра. Ҡалаларҙа үҙәк урамдарҙы ғына таҙарталар. Күп ерҙә сүп-сар һауыттары ҡуйылмаған. Тағы ла шул: бында велосипедсылар өсөн махсус юл ҡаралған. Ә бына автомобилселәр юл хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен һанға һуҡмайҙар. Шуға күрә ҡала магистралдәрендә сыуалыш барлыҡҡа килә. Урамда, йәмәғәт транспорттарында кеҫә бурҙары күп, уяулыҡты юғалтырға ярамай.

Ҡытайҙа йәштәр белем алып, эшләп, бер ни тиклем аҡса туплағас, 28-30 йәштәр тирәһендә ғаилә ҡоралар. Күпселек ғаиләләрҙә бер бала тәрбиәләнә. Был ҡағиҙәнән ситкә тайпылыусыларға икенсе бала өсөн беҙҙең аҡса бирәмеге менән яҡынса биш йөҙ мең һум штраф түләргә генә кәрәк. Шуға күрә, нигеҙҙә, байҙар араһында ике-өс йәки унан күберәк бала үҫтереүсе ғаиләләрҙе осратырға мөмкин.

Эш көнө бында иртәнге һигеҙҙә башлана. Төш ваҡытында сәғәт ун икенән алып икенсе яртыға тиклем бар халыҡ йоҡоға тала. Был мәлдә тротуарға гәзит түшәп ятҡан серем итеүселәр ҙә ят күренеш түгел. Кистәрен ҡытайҙар караоке-барҙа ултырырға ярата. Пенсионерҙар халҡы һәр кис һайын парктарҙа йыйылып йырлайҙар, бейейҙәр, физик күнекмәләр эшләйҙәр.

### Ҡытайҙа башҡорттар XIX быуатта уҡ йәшәгән

Башҡорт халҡының тарихында асылмаған серҙәр, яҙылмаған биттәр бихисап. Әлеге көндә тыуған илкәйҙәренән йыраҡта йәшәп, ҡайтыу юлдары мөмкинлегенән мәхрүм булып, бер күреүгә зарығып гүмер кисергән башҡорт зыялыларының Ҡытайҙағы эшмәкәрлеге хаҡында бер ниндәй ҙә мәғлүмәттәр юҡ. Уларҙың был үҙенсәлекле Көнсығыш дәүләтендә милләт-ара, дәүләт-ара мөнәсәбәттәрҙе көйләүҙәге ролен, йәмғиәттә ниндәй урын биләүен асыҡлау башҡорт тарихы өсөн ҙур әһәмиәткә эйә.

Был илгә барыуымдың икенсе маҡсаты ла башҡорттарға ҡағылышлы тарихи мәғлүмәттәр туплауҙан ғибәрәт ине. Билдәле булыуынса, был илгә башҡорттарҙың тәүге төркөмө XIX быуат аҙағында Ҡытай көнсығыш тимер юлын (хәҙерге Транссебер магистрале) төҙөгәндә бара. Икенсе төркөм 1918-1919 йылғы Граждандар һуғышынан һуң, Рәсәйҙә совет власы урынлаштырылғас, Алыҫ Көнсығыш аша сығып, Маньчжурияла (хәҙерге төньяҡ-көнсығыш Ҡытай), Синьдзиан-Уйғыр автономия округында ваҡытлыса урынлаша. Улар араһында аҙаҡтан Японияла йәшәгән Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиев, Башҡорт милли хәрәкәте ағзаһы, билдәле төркиәтсе ғалим Ғәлимйән Тағандың (Венгрияға күсә) булыуҙары билдәле. Киләсәктә Шәньян, Харбин (элекке Мукден) ҡалаларындағы архивтарҙа башҡорттар тураһында тарихи документтар эҙләү менән мәшғүл булыуҙы ниәт итәм.

Әйткәндәй, ерле халыҡ Рәсәй вәкилдәренә оло хөрмәт, ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡарай. Бигерәк тә СССР менән Ҡытай араһындағы дуҫлыҡ мөнәсәбәттәрен иҫләгән оло быуын вәкилдәре һәм урыҫ телен өйрәнгән ҡытай студенттары тарафынан иғтибар ҙур. Халыҡ араһында РФ Премьер-министры В.В. Путин бик популяр. Тағы ла улар сит илдән килеүселәргә айырыуса иғтибар бүлә, һәр аҙымыңды күҙәтеп торалар. Урамда аҡ тәнлеләрҙе уратып алыу, тәнеңә тотоп ҡарау, инглиз телендә һүҙ ҡушыу - ғәҙәти күренеш. Башҡортостан менән ҡыҙыҡһыныусылар ҙа байтаҡ.

**Шулай итеп...**

**Альбина Әмирова быйыл сит илдә уҡыу менән бер рәттән, Башҡорт дәүләт университеты тарих факультетының магистратураһын ҡыҙыл дипломға тамамланы. Ә белеме бар кешегә һәр ерҙә юлдар асыҡ. Ҡытай дәүләтен яулаған, башҡортом, тип янып-көйгән ҡыҙға уңыштар теләйек.**

Зилә ИСХАКОВА яҙып алды.

АҒИНӘЙҘӘР МӘКТӘБЕ

# ТӘНӘЙЕМДЕ ӨЙЛӘНДЕРҘЕМ ТӘКИ...

**- Өс малайыңды ла өйләндерҙең. Гелән үҙ ягыңды ғына ҡайырырға ярамай. Тәнәйең хаҡында ла ҡайғыртһаң ине...**

Еңгәбеҙҙең үпкәләберәк әйткән һүҙҙәрендә дөрөҫлөк тә бар кеүек. Сөнки борон-борондан еңгә-еҙнәләр ошо изге эштә әүҙемлек күрһәткән бит. Оло улыбыҙҙы башлы-күҙле итеүҙе лә еҙнәһенә тапшырғанлыбыҙ иҫебеҙҙә. "Бына һинә ҡәйнешең, әүрәт, өгөтлә, әммә һинән ҡайтҡанда кәләш алам, тип әйтерлек булһын", - тинек. Хәҙер, ана, киленебеҙ менән ул үҫтерәләр, Аллаға шөкөр. Шул димселәрҙең хәстәрлеге арҡаһында һәр ауылда тиерлек элекке ҡарт буйҙаҡтар ғаиләле булып, гөрләтеп донъя көтәләр.

Эйе, хәҙер ауылдарҙа - буйҙаҡ егеттәр, ҡалаларҙа кейәүгә сыҡмаған ҡыҙҙар күбәйгән заман. Был бер афәткә әйләнеп бара һымаҡ. Хәҙистәрҙә лә, буйҙаҡлыҡ - һеҙҙең арағыҙҙа ямандарҙың-яманы, тиелә.

Еңгәмдең улын -буласаҡ кейәү егетен үлтереп уҡ маҡтамаһаҡ та, ҡулында һөнәре, яңы төҙөлгән, ғаиләһе көтөп зарыҡҡан өйө бар. Улының төндәр буйы ҡайҙа йөрөгәнен белмәй, ҡайтырын көтөп ятыусы әсәләргә еңел түгел.

Шулай итеп, бер кемгә лә белдермәйенсә, тәнәйем өсөн ҡулайлы ҡыҙ эҙләй башланым. Элекке кеүек, ат еткән ергә - ат, хат еткән ергә хат ебәреүҙең кәрәге юҡ. Күҙ-ҡолаҡ телефонды ғына эшкә ектем. Ниһайәт, ауыл тормошона түҙерлек, донъя көтөүҙең рәте-сиратына төшөнөрлөк бер балалы йәш ҡатынға туҡталдым. Аҡыллыға ишара ла етә. Йүгәнһеҙ ат кеүек, үҙ иркенә сабып өйрәнгән берәүҙе ҡулға эйәләштереү өсөн түҙемле, сабыр булырға кәрәклекте аңғарттым тege ҡатынға. Ғаилә усағын терелтеп ебәрерлек ҡуҙ-күмерҙең дә ҡатын-ҡыҙ өлөшөнә төшәсәге тураһында ла ул үҙе хәбәрҙәр булып сыҡты.

Сиратта кейәү егетенең тел төбөн тартҡылау, уны үҙ яғыма ауҙарыу бурысы ҡалды. Әсәһе һөйләүенсә, улы өйләнеүгә аяҡҡулы менән ҡырҡа ҡаршы. Хатта был хаҡта ишеткеһе лә килмәй. Һиҙенеүемсә, төп һөжүм итеүсе ролен үҙемә үтәргә тура киләсәк.

Һәр эш ниәткә бәйле. Иртән көтөү ҡыуғас та, бер аҙ һөйләшкеләп алыу теләге менән, өйҙәренә һуғылам. Тәнәйемдән елдәр иҫкән. Әһә, мин әйтәм, һин - өлгөр, ә мин - йылғыр. Алдыма алғанды эшләмәй ҡала торғаным юҡ. Икенсе көндө иртәрәк барып, тәнәйемдең йоҡоһонан уянғанын көтөп ултырырға тура килде. Тороп кейенгәс тә тағы сығып һыҙҙы был. Бәҙрәф ишегенең асылғанын түҙемле генә һағалайым. Артынан ҡалмай әйәреп, үҙемдекен игәйем генә. Өҫтәл артына ултырғас та мәсьәләне ҡабырғаһы менән ҡуям. Ниһайәт, ыҡҡа килгәндәй тойолдо. Буласаҡ ҡатынын барып күрергә вәғәҙәһен алыуын алдым. Әммә тағы егетебеҙҙең аумаҡай яғы сыҡты ла китте.

-Үҙегеҙ генә барып килтерегеҙ...

Ай-вайына ҡуймай, кейендереп-яһандырып алып сыҡтыҡ быны әсәһе менән икебеҙ. Һәм изге юлға сыҡҡанбыҙ икән: йәштәр бер-береһен оҡшаттылар ҙа ҡуйҙылар. Ҡоҙалашыу көнөн билдәләргә генә ҡалды беҙгә. "Еңел никах - хәйерле никах", тиелә хәҙистәрҙә. Минең димселек эшмәкәрлегемдең һәҙемтәһе йәштәрҙең яңы өйөндә гөрләтеп туй яһау менән тамамланды.

Зөлфиә КӘРИМОВА.
Учалы районы.

✓ *Арыҫлан Мөбәрәков: "Уны Мәскәүгә уҡырға ебәрергә кәрәк", - тип тәҡдим иткән. Ағайым шул кистә ҡайтып төштө лә мине Өфөгә алып та китте. Мәҙәниәт министрлығында поезға билет алып ҡуйғайнылар.*



**Мәскәүҙәге Луначарский исемендәге Дәүләт театр сәнғәте институтының башҡорт студияһын тамамлаған бер төркөм йәш артистар 1959 йылда Өфөгә Башҡорт дәүләт академия драма театрына эшкә ҡайта. Халыҡ араһында уларҙың исеме тиҙ үк тарала. Һәләтле, энергиялы йәштәр ошо йылда асылған башҡорт телевидениеһы өсөн дә ярҙамсы көскә әүерелә. Был йылда тағы ла бер иҫтәлекле ваҡиға тарихҡа инә - төркөмдә барыһын да һоҡландырған ике йәш йөрәк Роза һәм Вил Кәримовтар ғаилә ҡора. Был билдәле ваҡиғаларға бөгөн 50 йыл ваҡыт уҙған. Ошо күркәм юбилей айҡанлы беҙ Башҡортостан Республикаһының элекке мәҙәниәт министры Вил КӘРИМОВ һәм Башҡортостандың халыҡ, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Роза КӘРИМОВА менән уларҙың йәшлек йылдары, сәнғәт һәм мәҙәниәт донъяһы тураһында әңгәмә ҡорҙоҡ.**

# БЫЛ ЙӘНДӘРҘЕ

**сәхнә иһә**

**Һеҙҙе замандаштарығыҙ иң матур ғаилә ише, тип белә. Әйҙәгеҙ әле, ана шул тәүге тапҡыр осрашып, ҡауышҡан йәшлек йылдарына әйләнеп ҡайтайыҡ. Ниндәй хәтирәләр уята ул йылдар һеҙҙең күңелдә?**

**Вил Сәғит улы:** Мин Учалы районының Түңгәтәр тигән ҙур ауылында тыуып үҫтем. Бәләкәйҙән гармунда уйнаным. Әле булһа хәтерләйем, гармун алып, йәштәр менән йылға буйына төшөп тә, күпер өҫтөндә лә, клубҡа барып та уйнап, бейеп ҡайта инек. Һуғыш йылдарында ҡатын-ҡыҙҙар, бер өйгә йыйылып, кис ултыралар, хаттар уҡыйҙар, илашалар, йырлашалар ине. Ҡайһы саҡта әсәйемә: "Орҡоя апай, беҙгә Виленде биреп тор инде", - тип, мине һорап киләләр ине. Мин күршеләрҙән гармун алып, улар эргәһенә барып уйнай инем. Сталинградтан Берлинға тиклем яу юлы үткән атайым миңә һуғыш тамамланғас, гармун алып ҡайтты. Был минең өсөн иң шатлыҡлы ваҡиға булғандыр. Тик ул гармунда уйнарға өйрәнеү үҙе бер язаға әүерелде. Һуҙһаң - бер тауыш, ҡыҫһаң, икенсе тауыш сыға, тигәндәй. Шул гармунымды ҡосаҡлап, 1954 йылда Өфөгә барып, имтихандар тапшырып, Мәскәүҙәге Луначарский исемендәге Дәүләт театр сәнғәте институтына (ГИТИС) уҡырға инеп киттем.

**Роза Шәйхетдин ҡыҙы:** Артист булыу уйы минең башыма ла инеп сыҡмай торғайны. Беҙҙең мәктәпкә (Нуриман районы Иҫке күл ауылы) һуғыштан ҡайтҡан бер апай немец теленән уҡытырға килгәс, шул апайҙы яратып, уның кеүек сит телдәр уҡытыусыһы булғым килде. Был хыялымды тормошҡа ашырырға тип, Өфөгә пединститутҡа имтихандар тапшырырға килдем. Тәүге имтихан немец теленән ине, миңә "3"лә билдәһе ҡуйҙылар. Ауылда башҡортса уҡығас, русса һәйбәт белмәйем, шуға ла белгәндәремде лә аңлата алманым. Уҡытыусы миңә: "Башҡа имтихандарыңды уңышлы тапшырһаң, мин һиңә "яҡшы" билдәһе ҡуйырмын, уҡырға инерһең", - тип сығарып ебәрҙе. Әммә ауылдаш ҡыҙҙар (улар икенсе факультетҡа килгәйнеләр) иншаларын "2"гә яҙып сыҡҡас, мин дә улар менән бергә ҡайтып китергә булдым. Документтарыбыҙҙы алырға тип, ҡабул итеү комиссияһына килһәк, бер ағай менән апай: "Мәскәүгә ГИТИСҡа театр башҡорт студияһына уҡырға йыялар, теләгегеҙ булһа, Мәҙәниәт министрлығына барығыҙ, унда Мәскәүҙән килгән профессор имтихан ҡабул итә", - тип, беҙгә адрес тотторҙо. Ҡыҙҙар ҡоторошоп: "Әйҙә, ҡыҙыҡ өсөн барып ҡарайыҡ", - тигәс, киттек тегендә. Артист нисек була икәнен дә белмәй инем әле. Өфөгә яҡын йәшәһәк тә театр күргәнебеҙ булманы, радио һуң ғына һөйләй башланы, шуға ла сәнғәт өлкәһе беҙҙең өсөн ҡыҙыҡ тойолғандыр инде. Барҙыҡ, этюд-маҙар эшләргә ҡуштылар. Ҡыҙҙар эшләп күрһәтте, мин ҡарап ҡына ултырҙым. Мәскәүҙән килгән теге профессор апай: "Әйҙә, һин дә уйнап күрһәт", - ти. Мин: "Юҡ, мин артист булырға теләмәйем", - тим. Шулай ҙа, ныҡышҡас, бер этюд эшләп күрһәттем. Профессор иптәш ҡыҙҙарымдан айырым алып ҡалып, иртәгәһенә миңә театрға килергә ҡушты. Мин комсомол ағзаһы булғас, уға ҡаршы әйтергә ҡыймағанмындыр инде, килергә һүҙ бирҙем. Миңә, рус теле менән тарихтан ғына имтихан бирәһең дә, уҡырға бараһың, тип әйттеләр. Әммә мин ризалашмайынса ауылға ҡайтып киттем. Шул көндәрҙә бер туған ағайым хәрби училищенан ҡайтышлай осраҡлы рәүештә Арыҫлан ағай Мөбәрәковтарға һуғылған. Ул Рәғиҙә апай Янбулатованың ике туған ҡустыһы менән бергә уҡыған булған. Сәй табыны артында Арыҫлан ағай: "Нуриман районынан бер ҡыҙ килеп, имтихан тапшырғайны ла, кире ауылға ҡайтып китте. Тик ҡайһы ауылдан икәнен белмәйбеҙ", - тип һүҙ ҡуҙғатҡан. Ағайым ул ҡыҙҙың мин икәнлеген әйткәс, Арыҫлан Мөбәрәков: "Уны Мәскәүгә уҡырға ебәрергә кәрәк", - тип тәҡдим иткән. Ағайым шул кистә ҡайтып төштө лә мине Өфөгә алып та китте. Мәҙәниәт министрлығында поезға билет алып ҡуйғайнылар. Мине Мәскәүҙә ГИТИСта режиссерҙар факультетында бишенсе курста уҡып йөрөгән Хәлит Усмановҡа эйәртеп ебәрҙеләр. Ауылдан бер ҡайҙа ла сығып өйрәнмәгәс, шул тиклем ҡыйын булды, өс көн буйы илап барҙым. Барғас та, ҡайтам, тип хаттар яҙҙым. Ағайым: "Ярай инде, быйылға түҙеп тор, Мәскәүҙә афиша уҡып йөрөп булһа ла әҙерәк белем алырһың. Мин бер йылдан уҡып бөтөп, Өфөгә ҡайтам, ҡайҙа теләйһең, шунда уҡырға индерермен", - тип йыуата. Әсәйем Аллаһы Тәғәләгә ышанған кеше булараҡ: "Баламды тамуҡ түмәре итеп, артист булырға ебәрҙең", - тип, ағайымды битәрләй. Атайым менән әсәйем минең артист булыуымды үҙ итмәгәйне шул. Шулай итеп, мин бер ай һуңлап төркөмгә барып ҡушылдым. Иптәштәрем барыһы ла этюдтар эшләй, сәхнә теленә, дикцияға өйрәнә. Мин ауыҙымды ҡымтып алам да, тик ултырам. Шулай ярты йылымды бер нәмә эшләмәй уҙғарҙым. Деканаттан мине ҡайтарып ебәрергә ҡарар иткәс, уҡытыусыбыҙ Ольга Ивановна Старостина: "Ярай, бер йыл ултырһын инде", - тип, декандың ҡарарын үҙгәрттергән. Ҡайтам, тип йөрөгән бер мәлдә Вил менән дуҫлашып киттек. Шунан уҡырға ла күңел киттем, сәнғәт донъяһына нығыраҡ үтеп ингән һайын, үҙемә лә ҡыҙыҡ тойола башланы. Күрәһең, күңел төпкөлөндә сәнғәт ойотҡоһо ятҡан булғандыр...

**Вил Сәғит улы:** Бер саҡ институттың икенсе ҡатына баҫҡыс буйлап күтәрелеп барһам, өҫтән ике кеше төшөп килә. Береһе Хәлит Усманов, ә уның эргәһендә шул тиклем һылыу, һөйкөмлө, зифа буйһылы, оҙон толомдары биленә тиклем төшөп торған һеңлекәш атлай. Уны күргәс, сибәрлегенә һушым китеп, йөрәгем зымбырҙап китте. Хәлит ағай менән күрештек. "Бына, Вил, таныш бул, Нуриман районынан Роза исемле һеңлекәш була, һеҙҙең менән бергә уҡыясаҡ", - тип, беҙҙе таныштырҙы. Шул саҡ үҙ-үҙемә эстән генә: "Был һеңлекәш минеке буласаҡ!" - тип әйттем. 6 ноябрҙә беҙ беренсе тапҡыр төркөмөбөҙ менән бергә йыйылдыҡ. Шул осрашыуҙа мин тәүге тапҡыр Розаға үҙемдең хистәремде белдерҙем. Шунан алып беҙ биш йыл буйы дуҫлашып йөрөнөк. Уҡыуҙы тамамлаған йылды апрель айында өйләнештек. Быйыл беҙҙең бергә йәшәүебеҙгә илле йыл тула. Теге дуҫлашып йөрөгән йылдарҙы ҡушып, илле биш йыл тип тә әйтергә мөмкиндер.

**Роза Шәйхетдин ҡыҙы:** Ул бик етди, төплө фекер йөрөткән, уҡытыусылар ғаиләһендә үҫкән, русса яҡшы белгән аҡыллы комсомол егет ине. Гармунда уйнап, моңло итеп йырлауы ла күңелде әсир иткәндер. Ул мине шул тиклем ҡурсалап йөрөтә торғайны. Ҡайтыр булһаҡ, поезға билет барып ала, ауыл яғына автобусҡа оҙатып ҡуя. Ҡайҙа барырға кәрәк булһа ла, барыһын да хәстәрләй торғайны. Һәм ғүмер буйы ана шундай үҙен хужаларса тотоп, мине ҡурсалап, яҡлап, ҡәҙерләп йәшәне, Аллаға шөкөр.

**Ғаилә булғас, һауыт-һаба шылтырамай тормай, тиҙәр. Бигерәк тә сәнғәт өлкәһендә эшләгән кешеләрҙең үҙ-ара ғаилә мөнәсәбәттәре ҡатмарлыраҡ була, тиҙәр. Һеҙ нисек итеп ғаиләгеҙҙе бер ниндәй ҙә ел-ямғырҙарға тейҙермәйенсә, тулы, татыу, саф итеп һаҡлап ҡала алдығыҙ?**

**Роза Шәйхетдин ҡыҙы:** Эйе, ғаилә булғас, төрлө саҡтар булып китә. Мин үҙем ҡыҙыу булдым, тиҙ генә тоҡанып китер инем. Вил сабыр булды, ваҡлыҡтарға иғтибар бирмәне, үпкә һаҡламаны. Сәнғәт өлкәһендә эшләгәс, ғәйбәттәр ҙә йөрөмәй торманы - беҙ уларға иғтибар итмәнек. Ғаилә проблемаларын ситкә сығарып һөйләп йөрөмәнек, өйҙә генә үҙ-ара хәл итә инек. Бер-беребеҙгә ихтирамлы булдыҡ.

**Вил Сәғит улы:** Минең мәшәҡәтле эштәр менән мәшғүл булыуым да ғаиләлә ниндәйҙер етешһеҙлек эҙләп ултырырға, ундағы ваҡ проблемаларҙы ҡуйыртырға мөмкинлек бирмәгәндер. Театрҙан телевидениеға эшкә



*Бер саҡ институттың икенсе ҡатына баҫҡыс буйлап күтәрелеп барһам, өҫтән ике кеше төшөп килә. Береһе Хәлит Усманов, ә уның эргәһендә шул тиклем һылыу, һөйкөмлө, зифа буй-һынлы, оҙон толомдары биленә тиклем төшөп торған һеңлекәш атлай. Уны күргәс, сибәрлегенә һушым китеп, йөрәгем зымбырҙап китте. Хәлит ағай менән күрештек. "Бына, Вил, таныш бул, Нуриман районынан Роза исемле һеңлекәш була, һеҙҙең менән бергә уҡыясаҡ", - тип, беҙҙе таныштырҙы. Шул саҡ үҙ-үҙемә эстән генә: "Был һеңлекәш минеке буласаҡ!" - тип әйттем. 6 ноябрҙә беҙ беренсе тапҡыр төркөмөбөҙ менән бергә йыйылдыҡ. Шул осрашыуҙа мин тәүге тапҡыр Розаға үҙемдең хистәремде белдерҙем.*



күскәс, баш режиссер вазифаһын да башҡарҙым. Ул ваҡытта бөтә тапшырыуҙар ҙа эфирға туранан-тура бара ине. Бер ниндәй яҙма ла, монтаж да юҡ. Ул ваҡытта партияның өлкә комитеты тарафынан контроль бик көслө булды. Яңы йылға, 8 март, 1 май, Еңеү көнөнә, ауыл хужалығы эшсәндәре көнөнә байрам концерттары әҙерләй инек. Бына шул тапшырыуҙарға икешәр-өсәр йөҙ кеше саҡырабыҙ. Ә студия берәү генә. Унда хор ҙа, бейеү ансамблдәре лә, район етәкселәре лә, ябай хеҙмәтсәндәр ҙә йыйыла. Ошо тапшырыуҙарҙы үткәреп, әҙерләп бөткәндән һуң, комиссияға күрһәтәбеҙ. Улар үҙ фекерҙәрен әйткәс кенә тапшырыу эфирға үтә ине. Көн юҡ, төн юҡ. Артабан партия өлкә комитетена эшкә күсерҙеләр, унан Мәскәүгә КПСС Үҙәк комитеты эргәһендәге Юғары партия мәктәбенә ике йылға уҡырға ебәрҙеләр. Өфөгә ҡайтҡайным, 34 кенә йәшемдә мәҙәниәт министры итеп тәғәйенләнеләр. Унда инде тағы ла көнө буйы эштәһең, минең өсөн оло бәхет, шатлыҡ булды, ҡатыныма рәхмәттәремде әйтеп бөтөрә алманым. Икенсе балабыҙҙың ҡыҙ булыуын теләнем, был юлы ла ҡатыным теләгемде үтәне. Ҡыҙыбыҙға Гөлназ тип исем ҡуштыҡ. Бына шулай әйткәнеңде тыңлап ҡына торғас, нисек итеп ҡатыныңды яратмайһың да, хөрмәт итмәйһең инде. Әлеге көндә улыбыҙ телевидениела режиссер булып эшләй. Киленебеҙ менән бер ул үҫтерәләр. Ҡыҙыбыҙ Өфө дәүләт сәнғәт институтын, Мәскәүҙә ГИТИС аспирантураһын тамамланы. Әле Германияла йәшәй. Яңыраҡ ҡына ейәнебеҙ менән Өфөлә булып киттеләр.

**▶ Һеҙҙең иң әүҙем ижад мәлегеҙ беҙҙең илдәге торғонлоҡ осорона тура килгән. Ул заманда милләтте, милли мәҙәниәт, милли сәнғәтте һаҡлау мәсьәләләре нисек хәл ителде? Ғөмүмән, нисек ине ул сәнғәт донъяһы?**

**Роза Шәйхетдин ҡыҙы:** Иң яҡшыһы - беҙҙең донъя, иң һәйбәте - беҙҙең замана, тип йәшәнек бит инде ул саҡта. лар, театр белгестәренән торған төркөм бергә йыйылып, шул пьесаны уҡып сыға. Әгәр ҙә пьеса халыҡ алдына сығарырға яраҡлы, тип табылһа, театрға тапшырыла. Театрҙа спектакль әҙерләнгәс, Мәҙәниәт министрлығының театр менән берлектә төҙөлгән комиссияһы ҡарамай тороп, афиша эленмәне. Бындай күренеш башҡа сәнғәт төрө өлкәһендә лә күҙәтелде. Мәҫәлән, рәссамдарҙың да яҙған картиналары махсус комиссия тикшереүе үтмәйенсә, күргәҙмәгә сыға алманы. Шуға күрә, беҙгә ошо рәссамдарҙың оҫтаханаларына бик күп йөрөргә тура килде. Композиторҙар менән дә шул уҡ хәл. Бындай комиссия тикшереүҙәрендә мотлаҡ рәүештә министр үҙе булырға тейеш ине. Бындай эш рәүеше ижадтың сифатына йоғонто яһағандыр, тип уйлайым мин.

**Роза Шәйхетдин ҡыҙы:** Хәҙер республикабыҙҙа халҡыбыҙҙың рухи мираҫын тергеҙеүгә, һаҡлауға, үҫтереүгә ҙур әһәмиәт бирелә. Ә элек был йүнәлештә аҙ ғына һүҙ ҡуҙғатһаң да һине шундуҡ милләҡҡа бәрелеп тик тора. Беҙ эшләгән заманда саф башҡорт телендә һөйләүгә ҙур иғтибар бирелде.

**Вил Сәғит улы:** Уҡып ҡайтҡас, ике йыл театрҙа эшләгән дәүеремде әле булһа хәтерләйем. Арыҫлан Мөбәрәков, Рим Сыртланов, Ғәзим Туҡаев, Ғәлимйән Ҡарамышев, Хөсәйен Ҡудашев ағайҙар шул тиклем башҡортса матур һөйләшә ине. Спектаклдә аҙ ғына телмәр яңылышлыҡтары ысҡындырып ебәрһәң, улар быны иғтибарҙан ситтә ҡалдырмай, һәр ваҡыт беҙҙе төҙәтеп ебәрә ине. Һүҙҙәр яңғыратыу - бер, ә шул һүҙҙәр менән фекереңде дөрөҫ баҫымдар яһап әйтеп биреү - икенсе эш. Ошо йәһәттән улар беҙгә күп һабаҡ бирҙе. Бындай шәхестәр менән бергә эшләү яңы ғына институт тамамлап ҡайтҡан йәш актерҙар өсөн тәжрибә мәктәбе булды. Бөгөн сәнғәт әһелдәрен әҙерләп сығарыусы училищеларыбыҙ, академия бар, әммә ҡайҙа хәҙер шундай артистар? Ул замандарҙағы актерҙарҙы беҙ әле булһа онота алмайбыҙ, һағынып хәтерләйбеҙ. Уларҙгәзиттәрҙә лә күп яҙалар, радио-телевидениенан да йыш һөйләйҙәр, халҡыбыҙ ҙа иманға ныҡлап ҡайта башланы, Аллаға шөкөр. Аллаһ исеме менән йәшәгән, Аллаһ исеме менән тәрбиәләнгән кеше бер ваҡытта ла насар юлға баҫа алмай. Был турала хәҙистә лә: "Бәхәсләшеүҙәргә бирелеп китмәһә, дин юлына аяҡ баҫҡан кеше аҙашмаҫ", - тип әйтелә. Халҡыбыҙҙы, бигерәк тә йәштәрҙе, боҙоҡлоҡҡа өйрәтеүсе, яҙыҡ юлға тайпылдырыусы Көнбайыш мәҙәниәтенән ҡурсып ҡалыу, иманыбыҙҙы нығытыу өсөн кәрәк беҙгә дингә ҡайтыу.

**Роза Шәйхетдин ҡыҙы:** Мин үҙемде белә-белгәндән башлап дин тотҡан апай-инәйҙәр араһында үҫтем. Әсәйем шул тиклем диндар кеше ине, уның атаһы ла мулла булған. Шуға күрә мин бәләкәйҙән дингә яҡын булдым. Әлбиттә, беҙ элек динде мулла образы аша ғына күҙ алдына килтерһәк, бөгөн уны кешеләрҙе яҡтылыҡҡа, ғилемгә, рухи-әхлаҡи камиллыҡҡа әйҙәүсе нур, тип беләбеҙ. Зәйнулла ишан кеүек бөйөк шәхестәре-

# МӘСКӘҮ ОСРАШТЫРҒАН,

## бергә иткән…

кистәрен спектаклдәр, концерттар, төрлө репетициялар ҡарау менән мәшғүлһең. Мәшәҡәтле лә, яуаплы ла эштәр башҡарырға тура килде шул.

**Роза Шәйхетдин ҡыҙы:** Бындай эштә эшләгән кешене ҡатыны өйҙә йылы аштары менән көтөп кенә торорға тейеш тә бит инде. Ә мин икешәр ай буйы Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан яҡтарында гастролдә йөрөй торғайным. Ҡайһы саҡта гастролдән ҡайтыуыма ирем: "Ярай инде, Роза, йәшәп ҡараныҡ, бүтәнсә былай йәшәй алмайым, икенсегә өйләнәм", - тип әйтер инде, тип ҡурҡа торғайным. Ә ул шул тиклем сабыр булды. Яңғыҙы донъя көттө, балаларҙы ҡараны. Балаларҙы шул тиклем ярата ине, уларҙың идеологик тәрбиәсеһе булды ул. Икеһен етәкләй ҙә, ҡулына сәскә тотоп, самолеттан мине ҡаршы алырға килә ине.

**Вил Сәғит улы:** Балалар мәсьәләһенә килгәндә, уларға ҡарата яратыу хисе беҙҙең ғаиләнең нигеҙе булғандыр. Тәүге бала булыр алдынан Роза дауаханаға инеп киткәнсе: "Миңә малай кәрәк, беренсеһе малай булырға тейеш", - тип әйтеп йөрөнөм. Хатта Булат тип, исемен дә уйлап ҡуйғайным. Дауаханаға барһам, Роза икенсе ҡаттан тәҙрәнән: "Беҙҙең улыбыҙ тыуҙы!"- тип ҡысҡыра. Улымдың тыуыуы

Башҡорт театр сәнғәтен үҫтерергә, сәхнәнән үҙебеҙҙең башҡорт телен матур итеп яңғыратырға, сәхнә әҫәрҙәре аша халҡыбыҙҙың тарихын танытырға, тигәнерәк изге маҡсаттар бар ине инде ул күңелдә һәм ынтылыштарыбыҙҙа. Райондан-районға, ауылдан-ауылға икешәр айға гастролдәргә сығып китәбеҙ. Беҙ Мәскәүҙән уҡып ҡайтҡан йылда Өфөлә телевидение асылды. Унда тура эфирҙан төрлө шиғырҙар уҡый, яҙыусыларҙың романдары, повестарынан тиҙ генә инсценировкалар эшләп, шуларҙы яңғырата инек. "Мосфильм" төшөргән киноларҙы башҡортсаға ауҙарып, дубляж эшләй инек. Минең эш көнөм иртәнге сәғәт 9-ҙа радиола "Башҡортостан пионеры" гәзетаһын уҡыуҙан башлана. Шунан сәғәт 11-гә театрға эшкә киләм, 2-нән һуң телевидениеға репетицияға барам. Унан һуң өйгә ҡайтып өлгөрһәң - өлгөрәһең, өлгөрмәһәң - юҡ, тура театрға спектакль уйнарға киләһең. Бына шулай хеҙмәт ителде инде сәнғәтебеҙгә лә, халҡыбыҙға ла.

**Вил Сәғит улы:** Ул ваҡытта сәнғәт өлкәһендәге тормош башҡасараҡ ине шул. Драматургтар әҫәр яҙғас, тәүҙә Мәҙәниәт министрлығына алып килергә тейеш ине. Бында драматургтар, яҙыусыләтселектә ғәйепләй башлайҙар ине.

**Вил Сәғит улы:** Хәҙерге ваҡытта беҙҙең етәкселәребеҙ тарафынан тел, милли сәнғәт, мәҙәниәт мәсьәләләренә иғтибар артты. Был йүнәлештә артабан да эште дауам итергә кәрәк. Беҙ эшләгән заманда халҡыбыҙҙың рухи мираҫының бөйөклөгөн, моңонoң, йырҙарының мөғжизәгә тиң булыуын эстән тойомлаһаҡ та, уға ҙур әһәмиәт биреп, асыҡтан-асыҡ һөйләп, фекер алышып йөрөү булманы. Милли мәсьәләләргә ҡағылған темаларға өйҙә генә һөйләшеү алып бара инек, әммә халыҡ алдына сығып, ундай хәбәр һөйләп тороу ярамаған эш һаналды.

**▶ "Һәр замандың үҙ көйө", тиҙәр. Бөгөнгө сәнғәтебеҙгә ниндәй баһа бирер инегеҙ?**

**Роза Шәйхетдин ҡыҙы:** Беҙҙең сәнғәт өлкәһенән киткәнебеҙгә байтаҡ ваҡыт үтте. Унан һуң спектакль, концерттарға ла йыш йөрөмәйбеҙ. Шулай булғас, беҙ хәҙер донъянан артта ла ҡалдыҡ инде. Һәр замандың үҙ драматургы, үҙ режиссеры, үҙ тамашасыһы бар. Бөгөн театр Мәскәү менән тығыҙ бәйләнештә эшләй, сит илдәргә йөрөй, уларҙың ижады менән таныша, тәжрибә уртаҡлаша, үҙҙәренсә ижад итә. Беҙҙе бер генә нәмә борсой: театрға рус мәктәбен бөткән, русса фекер йөрөткән актерҙар килә. Ә был спектакль барышында шундуҡ һиҙелә, ағас тел ҡоағы буй-һын, тауыш, дикция, темперамент ниндәй ине бит! Уларҙы тыңлап, спектаклдән йөрәктәре дарҫлап тибеп, шул тиклем һоҡланып ҡайта ине тамашасы. Кисергән тәьҫораттар аҙналарға, айға етә ине. Ә бөгөнгө тамашасы ниндәй хистәр менән сыға икән театрҙан?

Ә йырҙар һуң? Бөгөн һәр дәрте булғаны йыр яҙа, үҙе аранжировка эшләй, үҙе ике ярым-өс кешенән торған төркөмө менән сәхнәгә сығып сығыш яһай. Радио, телевидениеның да бындай йырҙарҙы ҡабул итеп, яңғыратып тороуы аптырата. Нимәһе иң ҡыҙығы һәм ҡыҙғанысы: улар йыр башҡарып тора, мин шул йырҙың көйө ҡайһы композиторҙан урлап алынғанын тотоп алып, Роза ханымға йырлап ултырам. Был хәл күпме дауам итер, быға ҡасан сик ҡуйылыр икән?

**▶ "Ислам дине, - тип өйрәтә Ҡөрьән, - кешенең тәбиғи дине. Бәндәләрҙе Аллаһ ана шул дингә яраҡлы итеп яралтҡан. Дөрөҫлөктә, һеҙҙән алда йәшәгән халыҡтарға ла Аллаһ Ислам динен генә өйрәтте". Һеҙҙең күңелдә ниндәй инаныс йәшәй, мосолман донъяһына ниндәй ҡараштаһығыҙ?**

**Вил Сәғит улы:** Беҙ икебеҙ ҙә Аллаһы Тәғәләгә ышанып йәшәйбеҙ. Ислам тураһында күберәк белгән һайын, уның асылына төшөнгән һайын, был инаныс көсәйгәндән-көсәйә бара. Был турала хәҙер беҙ булыуын да беҙ яңы ғына уҡып белә башланыҡ бит. Мин үҙем намаҙ уҡымаһам да, әсәйемдән өйрәнеп ҡалған доғаларҙы иҫемдән сығарғаным юҡ, һәр ваҡыт уларҙы ҡабатлап йөрөйөм. Әсәйем миңә яҡшы әхлаҡи тәрбиә бирҙе.

**Шулай итеп…**

**Әңгәмәселәремдең тормош юлы тураһында һөйләгәндәрен тыңлап ултырғандан һуң үҙемде хыял менән ысынбарлыҡ, йәшлек менән ҡартлыҡ, заман менән заман араһында сәйәхәт ҡылып ҡайтҡандай тойҙом. Мине оҙатырға тип йорт күтәрмәһенә сыҡҡан Роза апайға ҡараным да, бынан илле биш йыл элек ГИТИС баҫҡысынан төшөп килгән Нуриман һылыуын күҙ алдына баҫтырҙым. Ул саҡта ла уның йөҙөндә ошондай мөләйемлек, күҙҙәрендә ошондай йәшлек нуры булғандыр. Вил ағай иһә, ана, әле лә һөйөү тулы ҡарашы менән Роза апайға иркәләп баға. Ысынлап та, ниндәй һоҡланғыс кешеләр улар! Ниндәй генә заманда йәшәһәләр ҙә, ниндәй генә ижад үрҙәрен, хеҙмәт баҫҡысын яулаһалар ҙа, бәхетте бергә булғанда тапҡандар, шатлыҡты бала бағыуҙа күргәндәр - шуныһы менән оло хөрмәткә лайыҡ Кәримовтар ғаиләһе. Уларға иҫәнлек-һаулыҡта оҙон-оҙаҡ бәхетле ғүмер кисереүҙәрен теләйек.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА**
яҙып алды.

ДОНЪЯ -ҠУЛАСА

# ӘСӘҺЕНӘ ҠАРАП...

## ҡыҙын ҡос

**Ике бажаның бер-берсенән: "Кәләшеңдең, ҡартайғас, ниндәй булырын белгең килһә, ҡәйнәмә ҡара", - тип шаяртыуы көнкүлдә өйкәп йөрөгән бер хәлде иҫкә төшөрҙө.**

Танышымдың армиянан ҡайтҡан улы 17 йәшлек кенә ҡыҙға әүерәне лә китте. Күп тә үтмәй, егет өйләнергә теләүен хәбәр итте. Быға тиклем улының бер теләгенә лә ҡаршы килмәгән яңғыҙ әсә был юлы фатихаһын бирергә ашыҡманы, ҡыҙҙың бигерәк йәш булыуына һылтауланы. Үҙ һүҙле улғынаһы ҡыҙ уҡыуын тамамлау менән бер нәмәгә лә ҡарамай өйләнәсәген белдергәс, әсәһе ҡыҙҙың туғандарының экскесе, тормошҡа еңел-елпе ҡараған заттар икәнлеген әйтергә мәжбүр булды.

"Балалар ата-әсәһе өсөн яуап бирергә тейеш түгел!" - тип, әсәһенә үпкәләп сығып киткән көндө тап килде ул егет миңә. Үҙ уйына шул тиклем сумғайны, хатта эргә-тирәһендәгеләрҙе лә күрмәй, уҙып бара, туҡтатып, хәл-әхүәлен һорашҡас, эштең ниҙә икәнлеген һөйләп бирҙе. Уны тыңлап торҙом да, ул ғашиҡ булған ҡыҙҙың әсәһен мин дә белеүем хаҡында әйттем һәм уға түбәндәгеләрҙе һөйләп бирҙем.

... Ғәлиә институтта минән ике курс түбән уҡыны. Уҡыу йортона килгәс тә бөтәһен дә сибәрлеге менән таң ҡалдырғайны. Бирһә, бирә бит ул Хоҙай: буй-һын тиңһеҙ, тулҡынланып торған ҡуйы ҡара сәстәреме, бешкән еләктәй иренеме - торғаны ысынъяһау. Теше-тырнағы менән уҡырға йәбешкән ул, йәмәғәт тормошонда ла әүҙем ҡатнашты. Алсаҡ күңелле, ярҙамсыл Ғәлиә үҙе тураһында ғына әллә ни асылып барманы. Башҡалар һымаҡ, ял-байрам көндәрендә өйөнә атлығып торманы, каникулдан-каникулға ғына ҡайта ине. Өйөнән хат яҙыусы, килеүсе лә булманы, шикелле.

Шулай ҙа бер көндө әсәһе-атаһы тураһында асылып һөйләргә йөрьәт итте. Һәр ваҡыт күтәренке кәйефле, шаталаҡ, сибәр Ғәлиә бик бәхетһеҙ ине: экскесе әсәһе арҡаһында атаһы, яратҡан өләсәһе ваҡытынан алда гүр эйәһе булған. Ун-ун ике йәштәргә тиклем Ғәлиә бик бәхетле була: әсәһе - маҡтаулы һауыусы, атаһы ла алдынғы эшсе, ҡыҙ өләсәһенең (атаһының әсәһе) фәһемле риүәйәттәрен тыңлап, теләгән кеймен кейеп, күңеле көсәгән аш ашап, иркә генә үҫә. Ун ике - ун өс йәштәрҙә әсәһенең йыш ҡына эштән иҫереп ҡайтҡанын, шул сәбәпле өйҙә шау-шыу, янъял ҡубыуына иғтибар итә. Өйҙәге тауышты ишетмәҫ өсөн тәрлә түңәрәккә, мәҙәниәт йортона репетицияға йөрөй башлай. Ә бер көндө әсәһенең хыянаты тураһында белеп, атаһы иҫерек әсәһен ныҡ итеп туҡмай һәм өйҙән ҡыуып сығара. Ғәлиәне алып, әсәһе үҙенең әсәһенә ҡайтып китә. Эсергә яратҡан өләсәй ҡыҙының хәлен еңеләйтәм, тип, көн дә өҫтәлгә "ялтыр баш" ултырта, үҙҙәре һымаҡтарҙы йыйып, шағараҡ ҡора. Ғәлиә шунда аңлай: әсәһенә оҡшаш әсәкәйе яҙыҡ юлға баҫҡан...

Ғәлиә уҡыуын тамамлай алманы. Һылыулығына, буй-һынына тәү күреүҙән ғашиҡ булып, ятаҡханала ике йыл буйы артынан бер тотам ҡалмай йөрөгән күрше район егетенә кейәүгә сығып, бер-бер артлы өс ҡыҙ бала тапты. Бәхетле генә йәшәп ятҡанда, ире фажиғәле үлеп ҡалды. "Шунан бирле күңелем толҡа тапмай, эсһәм, бер аҙ енел булғандай", - Ғәлиә үҙенең эскелеккә бирелеүен шулай аҡланы...

Ошоларҙы һөйләп биргәс, егет уйсанланды. Бая ғына буш, битараф ҡарашҡа нур, мәғәнә инде. Бер аҙ торғас: "Әсәйемдең, әсәһенә ҡарап, ҡыҙын ҡос, тигәне дөрөҫ инде улайһа", - тине. Шунда ул ҡыҙҙың өләсәһе эсеп үлеүен, әсәһе һаман боҙоҡ юлда йөрөүен, ҡыҙыҡайҙың үҙенең дә кәйеф-сафа ҡорорға яратыуын әйтеп һалды. Егеттең дөрөҫ һығымта яһауына һөйөндөм. Ә ҡыҙҙан эстән генә ғәфү үтендем. Башҡаса сарам юҡ ине...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**




Тулы ҡараңғылыҡ һәм ҡолаҡ һыҙлатҡыс тынлыҡ менән бергә-бер тороп ҡалған тоткон ҡалдыҡ сәйенә ҡушып ҡаты икмәк кимерҙе. Сәйе бөттө, икмәге лә бер ҡабым ҡалды. Шулай ҙа бая килгән уйынан рух төшөнкөлөгөнә бирелергә етешкән Айбулат, барлыҡ ихтыяр көсөн туплап, яман кисерештәрҙе янынан ҡыуырға тырышты. Ул мөмкин тиклем тиҙерәк тынысланырға һәм өҫтөнлөктө үҙ ҡулына алырға тейеш. Бирешмәҫкә! Ебеп төшмәҫкә! Ҡыулауы янына шырпыһын әҙерләп һалған Айбулат эске тулҡынланыу ҡатыш түҙемһеҙлек менән көтә башланы. Ул инде белә: януар таңһыҙ килеп күренмәйәсәк, шуның өсөн хәҙер бер аҙ ғына серем итеп алғанда ла була. Йоҡо тигәне ниндәйҙер арбау өҫтөнә ихтыярҙы быуыр көс кеүек ине...

Айбулатты йәнә шомло ҡыштырлау менән һаҫыҡ еҫ уятты. Ул, йоҡлап ҡала яҙғанына үртәлеп, ҡабалан-ҡарһалан шырпы һыҙҙы һәм яҡтылыҡҡа ҡарай алмайынса, күпмелер ваҡыт күҙҙәрен ҡаплап торҙо. Ахырҙа, ҡыулауын һәрмәп алып тоҡандырырға баҫты ул. Ауыһыҙ көслө балҡыштан ҡапылғара ҡараштары томаланып киткән һунарсы, бер ҡулы менән яҡтылыҡты ышыҡлап, тар ауыҙға текәлде. Ә унда, йә Хоҙа!..

Айбулат ҡаршыһында, тексәйеп, шырт-ерән йөн менән ҡапланған, ҡиәфәте кешегә оҡшаш булһа ла маймыл йөҙлө, ғәләмәт ҙәү һәм яурынтаҡ ғифрит тора ине. Ослая барып бөткән йәмерәй ҡабағы аҫтында селт-селт асылып йомолған сәйер-кескәй күҙҙәре айырым иғтибар менән ҡарай. Күренеп тора: бүрәнә ише беләктәрҙә көс-ғәйрәт тигәнеңдән сиге юҡ. Бер һелтәүҙә "ыһ" та итмәйсә бүгәй үгеҙеңде йығалыр был. Тышҡы ҡиәфәте ҡот осҡос булыуға ҡарамаҫтан, Айбулат уның ҡараштарында уҫаллыҡтың тамсыһын да күрмәне. Эйе, кирепенсә, ҡулына ут тотҡан әҙәми заттан ул үҙе шикләнә кеүек. Шикләнә, әммә ҡурҡмай. Уны сытыр-сытыр янған ҡыулау яҡтыһы шулай хафаға һаламы, әллә танауҙы ярып барған төтөн еҫе һағыраҡ ҡыланырға мәжбүр итәме? Бәлки, ул тәбиғәте менән бөтөнләй үк яуыз да түгелдер әле - кем белә.

Өнмә был, әллә бары ҡурҡыныс төш кенәме: хайран торған Айбулатты ғифриттың "йыуаш" ҡараштары тынысландыра төшкәндәй булды. Өн дә баһаң, өн! Һушы китеүҙән ул атырға әҙерләнеп күтәргән мылтығын кире төшөрҙө. Үҙе, тағы һаташам әллә, тип, һаман икеләнә. Юҡ, был юлы Айбулат һаташмай. Уның алдында, күҙгә күҙ текәшеп, Ҡар кешеһе үҙе тора. Уны беҙҙең яҡтарҙа Албаҫты тип атайҙар. Мәгәр, берәйһе ошо күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән ғифритты Ирәндектә осраттым тиһә, ул гүмере ышанмаҫ ине. Уға ла ышанмаясаҡтар. Әлбиттә, Албаҫты ҡулынан иҫән-һау ҡөйө ҡотолоп, берәйһенә һөйләй алһа...

Ул, ана, теп-тере көйө алдына баҫҡан да, һынамсыл ҡарашын төбәгән килеш, хәрәкәтһеҙ тора. Гүйә, баянан бирле бер ни тиклем үҙенә оҡшаш кешенең ҡыйыулығын һынай. Тик, бәләкәс кенә төҫһөҙ күҙҙәре кепеслэй ҙә, ауыр һулыштан йөнтәҫ күкрәге бер ҡалҡа, бер төшә. Албаҫты тигәне, кетмәгәндә, ҡапыл ғына бороло ла, эре аҙымдар менән һуҙа баҫып, мәмерйә төпкөлөнә китеп юғалды. Был юлы ул бер өн дә сығарманы. Ни уйларға ла белмәгән, иҫе килделе-киттеле Айбулат аптырап торҙо ла ҡалды. Бер аҙҙан, быуындары бушап, һалҡын ергә шыуышып төштө, ҡыулауын һүндерҙе. Әле генә күргәненән һушын йыя алмайса, ташҡа һөйәлгән килеш оҙаҡ ултырҙы. Юҡ, ул ғифриттан ҡурҡманы. Нисектер, уйламаны ла шикелле. Әллә ҡыҫҡа ғына осрашыуҙан ҡурҡырға ҡапылғара өлгөрмәй ҡалдымы? Улай тиһәң, әле лә ҡурҡмай. Ҡурҡыу тойғоһо аҙаҡ, барыһы ла аныҡлана барып еткәс килерме? Әлегә уның күргәне башына һыймай ҙа, аҡылы ҡабул итергә теләмәгәнлектән, аныҡна барып етмәй. Айбулат әле ысынбарлыҡ менән әкиәт донъяһы араһында йөҙә һәм үҙен бала сағында фантастик кино күргәндәге һымаҡ хис итә. Ләкин, нисек кенә ышанғыһы килмәһә лә, был уйҙырма түгел, ә ааyһыҙ хәҡиҡәт ине: ул теп-тере Албаҫты менән күҙгә-күҙ осрашты! Тимәк, бынан ары уға ошо аяу белмәҫ аяныслы хәҡиҡәттән ҡотолоу юлын эҙләргә ҡала. Эйе, тик ҡотолоу юлын! Бары шул ғына. Сөнки уны атып һәләк итергә лә, был тирәнән - төйәк иткән еренән - өркөтөп ебәрергә лә, гөмүмән, уға бер зыян да итергә ярамай. Уникаль йән эйәһе тере ҡалырға һәм ошо урында йәшәргә тейеш. Мотлаҡ! Хәҙер шуныһы асыҡ: ҡотолоу юлы берҙән-бер генә - ҡасыу. Унайлы осраҡты һағалап торорға ла сығып ҡасырға! Башҡаса әмәле юҡ. Ләкин ҡалай итеп һәм ни рәүешле килер ул унай осраҡ? Ғөмүмән, килерме? Килһә, ҡасан, бөгөнмө, иртәгәме, бер аҙнананмы, айҙанмы? Көтөп ята торғас, һуң булып ҡуймаҫмы? Айбулаттың ашарына бөттө, эсеренә лә юҡ. Хәл шулай уҡ ҡотолғоһоҙмо икән ни? Хәйер, хәлдәрҙең ҡотолғоһоҙо булмай.

Ныҡ ҡына сарсаған Айбулат, ғәҙәте буйынса, термосын һәрмәп тапты. Уныһының инде буш икәнлеге хәтеренә төшөүҙән асырғанып, кире этәрҙе. Ҡара иҫәп буйынса уның ун дүрт бөртөк шырпыһы ҡалды, йәнә лә бер ярым ҡыулауы бар. Ырамалы түгел. Быларҙы күпмегә етерергә була? Ошолай уйланып ята торғас, ул ҡәтғи бер ҡарарға килде: бында әжәленде көтөп ятҡансы, яҙмышты һынап ҡарау һис ҡамасауламаҫ. Хәйер, әжәл бар урында ла бер әжәл инде ул. Бында ятып астан үлдең ни ҙә, сығыр юлды эҙләгәндә һәләк булдың ни - барыбер түгелме?

Сәйер, тәүге осрашыуҙарынан аҙаҡ Албаҫты кешегә ҡарата нисектер ҡыҙыҡһыныуын юғалтҡандай. Битараф күренергә тырышып, әллә шулай ҡылана ғынамы. Иҫәбе, күрәһең, уңай осраҡты тап килтереп, көтмәгәндә ташланыу. Шулай булмағанда, ниңә һуң бая, тәүге көндәрҙәге кеүек, уның тәңгәлендә туҡталып та торманы, мыш-мыш килеп еҫкәнмәне лә. Айбулат иҫәбенсә, ул хәҙер өс тапҡыр сығып йөрөп килде, тимәк, "танышыуҙарына" өс тәүлек булып китте. Ә уның, ҡалдыҡ бер тешләм икмәген йотоп ҡуйғандан һуң, тамсы һыу күргәне юҡ.

* * *

Өс көн элек башына килгән ҡарарын тормошҡа ашырырғамы, юҡмы, тип, ошоғаса һаман икеләнгән Айбулаттың башҡаса сараһы ҡалманы. Албаҫты сираттағы һунарына сығып китеү менән ул боҫоп ятҡан урынын ҡалдырҙы ла, мәмерйә буйлап китте. Шөкөр, ҡыулауы шәп яҡтыртҡанлыҡтан, аяҡ аҫты һәйбәт күренә. Теге таныш сатҡа еткәс, был юлы һулға боролдо. Уң ҡулда ни барын ул хәҙер яҡшы белә: унда ғифрит ояһы. Унан алыҫлашҡан һайын, танауҙы ярып килгән күнел болғандырғыс үләт еҫе кәмей бара, быныһы яҡшы. Бара торғас, һаман сеңләгән ҡолаҡтарына һыу селтерәгәне салынып ҡалғандай булды. Ары ҡуҙғалды. Күп тә үтмәне, селтер һыу тауышы тағы ишетелде. Был юлы ап-асыҡ һәм яҡында ғына. Янар ҡыулауы инде бөтөүгә яҡынлашҡан Айбулат йүгерә-атлай алға ташланды: ғәмһеҙ генә йырлай-йырлай аҡҡан ер аҫты шишмәһен тиҙерәк күрергә ине. Мәгәр, шишмә һыуы эсергә яраҡлы икән, тимәк, ул һыуһап үлеүҙән ҡотола.

Мәмерйә коридоры иркенәйгән һайын, ымһындырғыс селтерәү ҙә көсәйә бара. Бына ул шишмә. Ниһәйәт! Айбулат ҡәҙерләп тотонған ҡыулауын һүндергәндән һуң ғына ныуға йомолдо. Таныҡлап кителгән һыу татырыраҡ булһа ла ғәжәп татлы ине, һалҡынлығы тешкә үткән һыуҙы таныһығы ҡанғанын да тоймайса оҙаҡ эсте. Тәненә лә, йәненә лә сихри еңеллек һәм рәхәтлек йүгереү менән бергә йәшәүгә бермә-бер ынтылыш артты. Аҙағынан ах-уах килеп йыуынып та алғас, бөтөнләй йән кереп, шәбәйҙе лә ҡуйҙы. Шишмә ярындағы эреле-ваҡлы ҡырсынташҡа аунап, күпмелер хәл йыйғандан һуң, бөтөнләй яҙылып, ҡыулау төпсөгөн ҡабат тоҡандырҙы ла... шаҡ ҡатты. Шишмәнең буйынан-буйына емелдәшеп ятҡан аҫыл-баҙыҡ гәүһәр һибелгән ине. Улары араһында меңәр йылдар ятыуҙан тоноҡлана төшкән алтын бөртөксәләре лә күренә. Айбулат ошо күҙ ҡыҙҙырғыс хазинаның бер нисәүһен ҡулына алды, битараф ҡыҙыҡһыныу менән ҡарап торғандан һуң, теләр-теләмәҫ кенә ары атланы.

Үтә күренмәле саф һыуын ҡыулау балҡышында уйнатып ятҡан ер аҫты шишмәһе мәмерйәнең ҡап уртаһынан ағып китә. Шишмә ағышына ҡарағанда, урын ярайһы ғына һарҡыу кеүек. Тимәк, мәмерйә ҡыуышы аҡрын-аҡрын ғына тау түбәненә ҡарай йүнәлә. Бер уйлағанда, һәр шишмә ниндәй ҙә булһа оло һыуға барып ҡойорға тейеш. Быныһының тамағы ҡайҙа икән? Уның ниндәй йылғаға ҡушылыуы мөмкин? Бара торғас, түбәнән унда-бында тысҡылдап тамсы тамғаны күренде. Йөҙәрләгән тамсыларҙың туҡтауһыҙ сәп-сәп килгән тауышы шишмә селтерәүенә ҡушыла ла, үҙе әйтеп бөткөһөҙ аһәңле, үҙе сиселмәҫ сергә уралған ғәжәйеп көй тыуҙыра. Торғаны бер симфония! Ер аҫты батшалығы симфонияһы! Уны күпме тыңлаһаң да тыңлап туймаҫлыҡ һымаҡ.

Һалҡын һыуҙан шөйлә еңеләйеп киткән Айбулат арыу белмәй барҙы ла барҙы: ҡасандыр бер осо булырға тейеш тә баһаң был таш ҡыуыштың? Ҡы-

***✓ Күңелдәргә шөбһә һәм хәүеф тойғолары һалған тауыштан Айбулаттың йөрәге өшөп ҡуйҙы. Ошо урында уның нисәмә көнлөк мәхшәр арҡаһында зәғифләнеүҙән арына барған мейеһен ҡурҡыныс уй ярып үтте: Албаҫты! Теге яман тауыш уныҡы!***

улауының икенсеһе бөткәс, өсөнсөһөн - инде һуңғыһын - тоҡандырҙы. Таштар араһындағы күҙгә күренмәҫ ектәрҙән унан да, бынан да ағып төшкән һарҡынды һыу иҫәбенә ҙурая барған шишмә ыңғайына мәмерйә лә иркенәйә. Уның түбәһенән тамсылар туҡтауһыҙ тама ла тама: тып... тып... тыпы... тып, сәп... сөп, сәп... сөп...

Ҡапыл ифрат бейек көмбәҙле мәғәрәгә килеп сыҡҡан Айбулат нимәгәләр абынып йығылды. Аяҡ аҫты тулып ятҡан ағас тамырҙары икән. Улары бында ҡайҙан һәм нисек килеп эләккән? Ул, ҡыулауын күтәрә биреп, өҫкә ҡараны. Ана улар. Джунгли лианалары шикелле аҫылынғандар ҙа ҡатып ҡалғандар. Шомло ла, сәйер ҙә күренеш. Эреле-ваҡлы тамырҙарға бер талай ҡарап торған Айбулат шуға төшөндө: улар, ахыры, һәлберәгән килеш кибә торалар, кипкән береһе мәғәрә төбөнә ҡолап төшә тора. Шуларға йәбешеп өҫкә үрмәләгәндә? Айбулат, батып барыусы һаламға ла йәбешә тигәндәй, иң оҙон тамырға тотондо. Аҙ ғына тартыуға уныһы һынып китте лә, саҡ башына килеп төшмәне: булмай шул. Ярай әле, янтайып өлгөрҙө. Ул ниməһендер юғалтҡан кешеләй, яңағын байҡап торғандан һуң, ары китте. Китеүен китте, әммә тиҙ арала барлыҡ ышанысы селпәрәмә килде лә ҡуйҙы: артабан юл өҙөлә ине. Ошо урында шишмә, һикәлтәләп, йәтеш кенә шарлауыҡ яһай ҙа, суҡайсыҡ таш ҡая аҫтына инеп юғала. Шулай ҙа был ни ғәләмәт? Юғалған шишмә тамағында ҙур ғына тыныс-буръяҡ зөмбәй барлыҡҡа килгән. Уның өҫтөндә, күңелгә шом һалып, һарғылт күбектәр йөҙөп йөрөй. Күкшелләнеп ятыуына ҡарағанда, зөмбәй тәрән генәлер. Ләкин уныһы мөһим түгел, Айбулаттың күңеленә шик йүгерткәне икенсе: шишмә һыуы күҙ йәше шикелле тап-таҙа, ә ниңә ҡойған урыны буръяҡ? Ләм ҡатыш сүп-сар алып килгән оло йылға һыуына оҡшап ята. Ошо мәл, бар булмышын һиҫкәндереп, һыуҙа һығылмалы-оҙон ниҙер тулҡынландырып уҙҙы. Йылан! Ә, түгел, ҙур ғына шамбы балығы икән. Шамбы? Уныһы нисек итеп, ниндәй юл менән бында килеп тарыған? Эх, тотоп алғанда-а... Әлеге уйҙан Айбулаттың кинәт эсе бороп ҡуйҙы. Үәт әй, ҡарыны уға хәҙер ашау тураһында уйларға ла рөхсәт итмәй. Шулай ҙа, баяғы таш шамбыһы мәмерйә эсендәге ятыуға ҡалайтып инә алған? Бәлки, уның ингән урыны кеше һыймалылыр әле... Хәйер, ниməһенә һаман хыяллана? Иреккә юл артабан булмағас, булмаҫ инде. Таш ектәренән үтеп сығырға ул бит шыйғалаҡ шамбы түгел.

Айбулат күпме генә эҙләнмәһен, артабан юл юҡ ине. Мәмерйәнең был ботағы ошо урында тамамлана. Хатта шишмә лә, ҡаты саҡматашты кимереп, үҙенә юл яра алмаған. Ярай инде, һин еңдең, тигәндәй, мөһабәт аҡ таш ҡуйынына инеп йәшеренә. Айбулаттың бына-бына гөлт итеп ҡалыр ышаныс салҡылары шул ерҙә һүрелә, бар булмышын тағы өмөтһөҙлөк ғәләмәте солғап ала. Ә өмөтһөҙлөктән аянысты аҙымға ҡул һуҙымы ара. Ул ултырып илар сиккә етте. Уның бар көсөнә аҡырғыһы килде. Теге Албаҫты кеүек. Албаҫтының, моғайын, нимәгәләр ныҡ асыуы килә, шунлыҡтан боғаҙ йыртып үкерәләр.

Ҡысҡырырға тип тәрән һулыш алған тотҡондоң мейеһен көҙөклө уй ярып үтте: ә уның тауышын ишеткән теге мәхлүк килеп етмәҫме? Айбулат инде нисәнсе ҡат ниндәйҙер эске көс ярҙамында ошо рәүешле үҙен-үҙе тыйып, тынысландыра килә. Тынысландыра ла, бөтәһен дә яҡшыға юрап, яҡты киләсәккә инанырға тырыша. Ә ниңә, үҙенде-үҙең ҡайғыртмаһаң, был ҡотһоҙ соҡорҙа һинең башҡаса кемгә кәрәгең бар? Хәйер, кәрәге бар бит. Албаҫтыға. Бер ултырып тамаҡ туйҙырыр өсөн. Тик тамаҡ туйҙырырҙан алда уны ҡулға төшөрөр кәрәк әле. Ә уның тиҙ генә, еңел генә бирелергә иҫәбе юҡ. Ул йәшәү өсөн һуңғы һулышына ҡәҙәре көрәшәсәк! Әммә Албаҫты ғүмере хаҡына түгел. Уныһы бигерәк ҡимməткә төшөр. Албаҫты нисек тә тере ҡалырға тейеш. Бер көн килеп, ҡотолғоһоҙ өмөтһөҙлөктән аҡылын юйып ҡуймаҫмы? Ошолай уйлаған Айбулат кире яҡҡа боролдо. Хәҙер ул ҡотолоу юлын әлеге сатай-ботай тамырҙарҙа эҙләмәксе: уларының шулай уҡ бер ярҙамы ла теймәҫме икән? Ләүкеп янған ҡыулау яҡтыһында арлы-бирле генә күренеп ҡалғылаған мәғәрә түбәһенә ымһынып ҡараны. Торҙо-торҙо ла, йөҙөмгә буйы етмәгән төлкө шикелле ҡыланып, ҡул һелтәне: булмаҫтыр, ынтылған урыны артыҡ бейек. Ҡапыл эсе бошоп киткән тотҡон, ахырҙа, ҡыулауын һүндерҙе лә, лып итеп йомшаҡ тупраҡҡа ултырҙы. Һалҡын ташҡа һөйәлә төшкән Айбулат тағы уйға ҡалды. Ошо таш зиндан уның һуңғы төйәге булырмы икән ни? Тимәк, ул бында әжәле артынан үҙе килеп сыҡты. Соҡор ауыҙына башын тыҡмағанда, бер ни ҙә булмаҫ ине. Аҡыл тигәнең әҙәми затҡа, ғәҙәттә, шул рәүешле килеүсән бит ул. Килеүен килә, әммә күп осраҡта инде һуң була.

Шырпы алырға тип кеҫәһенә ҡулын тыҡҡан Айбулаттың бармаҡ осона ҡытыршы әйбер һуғылды. Икмәк һынығы икән. Ҡайҙан килеп ятҡан ул бында? Ә-ә, хәтеренә төштө, теге көн, Олоташ тарафтарына ҡарап ҡуҙғалыр алдынан, этенә ашатыр өсөн әҙерләп ҡуйғайны. Уныһы ҡайҙалыр йөрөп ҡалды, ә кетерməккә әйләнеп бөткән өлөшө, бына, хужаһына тәтене. Рәхмәт инде. Ул икеөс ҡабым ҡаты икмәкте шишмә һыуына еботкәндән һуң, айырым ләззәт менән һура-һура, ваҡ киҫәксәләргә бүлгеләп сәйнәне лә, тәмләп кенә йотоп ҡуйҙы. Аһ, икмәк тәме! Һинән танһығыраҡ, һинән дә татлыраҡ башҡа тәм юҡтыр ул донъяла. Шулай уйлаһа ла, ҡурышҡан ҡарыны, остоҡ ҡына ризыҡ төшөүҙән, ни ғәләмәттәр, яндырып алды ла китте. Хатта яман итеп ҡапыл борҙо ла, уҡшыта биреп ҡуйҙы. Быныһы инде оҙайлы асығыу касафатылыр. Ҡыҙыҡ, байтаҡтан ашағаны булмаһа ла Айбулат асыҡҡанын тоймай. Тәү баштараҡ һыуға сарсап интеккән ине, хәҙер уныһы аяҡ аҫтында йылға булып ағып ята.

* * *

Эт, тигәндән, уныһы ошо мәлдә ҡайҙарҙа темеҫкенә икән? Бәлки, әйләнеп ҡайтҡандыр ҙа әле. Хужаһын көткән-көткән дә ҡайтып киткәндер. Уның яңғыҙын ғына күргән Гөлзифа ни эшләне икән? Гөлзифаһы көтәлер, Гөлкәйе һағыналыр. Атай, минең атайым, тип өҙөлөп тора бит ул. Эй, сабый, көт әйҙә, көт, өмөтөңдө өҙмә. Сабыйҙар теләген Тәңре иң әүәл ҡабул ҡыла, ти.

Йәнә буталсыҡ уйҙарға бирелеп киткән Айбулат күҙгә күренмәҫ шишмә йырына ойоп ултыра торғас, ҡапыл ауырайҙы ла ҡуйҙы. Үҙе йоҡлап барған кеүек, ә аңы уяу. Ул һәр саҡ уяу. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Айбулат аңһыҙ тәбиғәт ҡылмышына ҡаршы бер ни ҙә эшләй алмай. Ошо йәһәннәм төбөндә йәшәп ятҡан үҙе наҙан, үҙе быҫраҡ бер Албаҫты унан өҫтөн тора. Был мәңге ҡараңғылыҡ батшалығында - көслөнөкө замана. Ниндәйҙер ер ҡатламы аҫтынан сыға алмайса ултырсы әле! Әҙәм көлкөһө! Шунан ул аҡылындан ни фәтүә? Аҡыл биргәнсе, ошо таш моҡсайҙы емереп сығыр ғәйрәт бүләк итһәң, о, Тәңре!

Әстәғи! Тағы ҡайҙарға төшөп китте уйҙары? Уларға саҡ ҡына ирек бир... Ә ниңә, Айбулаттың әле зиһене яҡты, шунлыҡтан уйҙары ла дөрөҫ юҫыҡта. Тоғроһо шул: тәүге ауырлыҡтарға уҡ бирешеп, көрәшһеҙ-ниһеҙ бағынырға уның - Әҙәм менән Һауа нәҫеленең - хаҡы юҡ. Хаҡы ла, хоҡуғы ла. Уның хаҡына, әжәл тырнағынан ҡотолоу хаҡына ул бар таҫыллығын һалып, булған белемен эшкә егергә тейешле. Айбулат үҙе, иҙрәп, татлы йоҡоға тала барған кеүек, ә үҙенең уяу мейеһендә ошоноң ише тетрәндергес уйҙар ҡайнаша. Уларҙың осо ла, ҡырыйы ла юҡ. Ҡайҙан киләләр ҙә, ҡайҙа китә торалар, тиһең. Ә-ә, төшөнә башланы, буғай! Уның бит ҡайҙалыр, ҡасандыр, хәтерләмәй, уҡығаны бар. Имеш, Ети тип аталған йән эйәләре кешелектең бер тармағы иҫәпләнә һәм ул үҙенә ҡарағанда нығыраҡ үҫешкән ҡәрҙәшенең рухын арбап, күҙен быуырға һәләтле. Соҡорҙаш Албаҫты ана шул Ети була ла инде. Бына әле лә Айбулаттың уяулы-йоҡоло ятыуы тик уның ғына эшелер. Сөнки мәрт йоҡоһона тартым был халәтте башҡаса бер нисек тә аңлатып булмай. Ҡорбанын да шул рәүешле ҡаптыралыр әле. Ни өсөн тигәндә, теге таш уйымы эсендәге ҡыу һөйәктәр араһында ятҡан дәү мышы мөгөҙҙәре бында нисек килеп эләккән тиһең? Мышы һынлы мышыны былай ғына йығып булмай.

Айбулат, ҡапыл, тағы тертләп китте лә, һеңгәҙәүҙән ҡатып ҡалған көйө бер талай хәрәкәтһеҙ ятты. Сикәләре ни эшләп еүеш? Ә-ә, илаған икән. Әллә төшөндә, әллә өнөндә илап ята. Оят, валлаһи... Ең осо менән күҙҙәрен һөрттө. Ниməһенә шулай бәлжеп, балауыҙ һыға һуң әле? Бәлки, төшөнкөлөккә бирелеүҙең ахыр сигенә еткәндер ҙә башҡаса түҙерлек әмәле ҡалмағандыр? Юҡ! Һис тә улай түгел! Хәле, шөкөр, етерлек, аяҡтары атлай, ҡулдары ла тоторға эшкинә. Тик бына күҙҙәре генә бер ни күрмәй. Талағы ташҡан Айбулаттың хәҙер ҡуҙғалаһы ла килмәй. Ошолай ҡырын төшөп кенә ятыуҙары рәхәт тә. Тағы ойоп бара... Юҡ инде. Йоҡоға юл ҡуйҙыниһәң, ул бер ваҡытта ла туймаҫ та, ҡуймаҫ та. Йәнеңә ялҡаулынырға юл ҡуйыу ярамай. Айбулат ауырлыҡ менән йөгөнөкләп торҙо, мүкәйләгән көйөнә һәрмәнеп, һыу эҙләне. Һыу. Бына ул йоҡоһон осорһа осорор. Ҡулы шишмә һалҡынлығына ҡағылыу менән, ҡуш услап битенә һипте. Ялбырап үҫеп киткән һаҡалы менән сәстәрен сылатты. Ошонан һуң баяғы икеле-микеле уйҙары ла, шөбһәле кисерештәре менән болоҡһоуҙары ла ҡапыл юҡҡа сыҡты. Гүйә, селтер шишмә һыуы ыңғайына аҡты ла китте. Әле генә бөлөнөп ултырған тау тотҡоно күҙ асып йомған арала әүәлге, йәшәү өсөн, киләсәк тормош тип, ғаиләһе, бигерәк тә алтынға тиңләгән балаһы хаҡына йәнен бирергә әҙер атлығып торған Айбулатҡа әйләнде. Һай, ҡөҙрәтле шишмә һыуы! Боҙомзәхмәттәрҙән берәй имең барҙыр ул һинең.

Уғаса булмай, мәмерйә эсен көтмәгәндә дәһшәт тулы ауаз тетрәтте. Көҙ миҙгеле яҡынлашып, йәшен ҡайтҡан осорҙа алыҫ-алыҫтарҙан ишетелеп ҡалыр тоноҡ деһерләүгә тартым ауаз оҙайлы ғына геүләп торҙо. Быныһы тағы нимә? Әллә ер һелкенәме? Хәйер, ер шарының иң ҡарттарҙан һаналған Урал тауҙарында әллә ҡасан уҡ һелкенере - һелкенеп, тетрәр урыны тетрәп бөткәндер. Ул сағында нимә геүләүе мөмкин? Үҙе сәйер, үҙе шомло. Ундайын ғүмерендә ишеткәне юҡ. Күңелдәргә шөбһә һәм хәүеф тойғолары һалған тауыштан Айбулаттың йөрәге өшөп ҡуйҙы. Ошо урында уның нисәмә көнлөк мәхшәр арҡаһында зәғифләнеүҙән арына барған мейеһен ҡурҡыныс уй ярып үтте: Албаҫты! Теге яман тауыш уныҡы! Ул үҙе әлегә әллә ҡайҙалыр, ә таштарға бәрелә-һуғыла мәмерйә ҡыуышы буйлап үткән имәнес тауышы шулай бөтөн бер яман геү булып килеп етәләр. Тимәк, ҡорбанының юҡлығын белеп алған да, эҙен табып, ҡыуа төшкән! Оҙаҡламай бында буласаҡ. Ә Айбулаттың юлы быуылған. Ошонан да аянысыраҡ хәлдең булыуы мөмкинме?!

**(Дауамы бар).**

*ЗАУЫҠ*

# МЕҢ ТӨРЛӨГӘ ӘЙЛӘНЕР ҘӘ ИНЕМ...

## Оло шатлаҡ

Өләсәй ҙә, ҡартатай ҙа булдыҡ,
Ҡандай бәхет, ниндәй күңелле.
Ҡай саҡтарҙа уйлап еткермәйбеҙ
Был донъяның мәңге түгелен.

Ейәнгенәм тулай ҡосағымда,
Үлеп һағынғанды һиҙәлер.
Баланыҡы бала балдан татлы,
Татығандар быны беләлер.

Кире ҡайтам шул саҡ йәшлегемә,
Тас һин инде ошо ейәнем.
Йылмайыуы, йөҙө, хәрәкәте,
Оҡшаш хатта атлап килгәне.

Ҡыҫып-ҡыҫып бәләкәсте һөйәм,
Шатлыҡтары булһын ғүмергә.
Хәҙер инде тик бер теләгебеҙ -
Бүләләрҙе яҙһын күрергә.

## Әсәйем доғалары

Енем һөймәй быҫҡып янғандарҙы,
Ҡыуандырып торһон һәр эшең.
Һоҡланырлыҡ булһа уй-тәртибең,
Ҡыуандырып торор һәр эшең.

Балаҡайым, бар хикмәт бит һиндә,
Ир, ер итә шул уҡ бер бисә.
Һары алтын сабырлыҡтың төбө,
Сабыр бул һин, балам, һин - әсә.

Йөҙөн йыртма бер үк ирендең һин,
Ир күңеле шауҙыр быяла.
Һаҡһыҙ ғына бер һүҙ ысҡындырһаң,
Саҡ-саҡ тора, хәҙер ыуала.

Ололоҡло-кеселекле булһаң,
Ҡәҙер итһәң, ҡәҙер күрерһең.
Гөл үҫтерә белгәндәрҙең генә
Донъялары гөлгә күмелер.

Яҡты сырай менән ҡаршы алһаң,
Балҡып китер кеше өйөндән.
Мең бәләнән ҡурсый бер фатиха,
Мең сауаплы тик бер һөйөнгән.

* * *

Ҡайһылай ҙа яйын табам, тиеп,
Китеп бөтөп бара ир-аттар.
Ауыл тулы яңғыҙ ҡатын-ҡыҙҙар,
Ҡайҙа ҡалды беҙҙең йәш саҡтар?

Булды инде матур заманалар,
Ҡәҙерҙәре үткәс, беленә.
Өмөтләнеп бағам тыуыр көнгә,
Башҡа хәҙер иҫкән еле лә.

* * *

Кире килдең киткән юлдарыңдан,
Үттең уның иң-иң ауырын.
Һинән башҡа йәшәй алмағанға,
Сара таптым, ҡаршы алырлыҡ.

* * *

Йөрәгемде ташҡа әйләндерҙең,
Ялҡыны юҡ уның, йылыһы.
Мең төрлөгә әйләнер ҙә инем,
Эх, ҡайтарып булһа барыһын.

* * *

Тыштан тыныс күренһәм дә,
Йөрәгемдә ут минең.
Һин - тыныслың, миңә күскәс
Ут-ялҡындарың һинең.

**Миңһылыу ӘМИНЕВА.**
**Хәйбулла районы,**
**Федоровка ауылы.**

Аһ-Аһ...

**Ибн Ғүмәр әйтеүенсә, Мөхәммәт бәйғәмбәр татуировка эшләтеүсене һәм эшләүсене ҡарғаған. Шуға күрә татуировка Исламда ҡаты тыйыла. Шулай уҡ татуировка эшләтеү христиан динендә лә тыйыла. Мәҫәлән, Европаның христиандар йәшәгән илдәрендә татуировкалар эшләү XIX быуатҡа тиклем ҡаты тыйылған булған. Европалылар быны ерәнгес һынаған, татуировкалы кеше күрһәләр, ҡоттары осҡан.**

# ТӘНЕҢДЕ ТИШКЕСЛӘТМӘ,

## гонаһы ла, зарары ла күп...

Был йола мәжүсилек заманынан тороп ҡалған. Тәүтормош кешеләрендә татуировка уларҙың мәғәниәте менән ныҡлы бәйләнгән була. Африкала, Полинезияла, Японияла татуировкалар эшләү борондан киң таралған булған. Мәҫәлән, Америка кешеһе Бернард Миллерҙың тәнендә 14 мең татуировка булған, ә Шотландия кешеһе Том Леппард бөтә кешеләрҙең дә иғтибарын тәненең леопард тиреһенә оҡшатып үҙгәртелеүе менән яулаған. Уның тәненең 99,2 проценты һорғолт-һары төҫтәр менән ҡапланған. Инглиз кешеһе Уилфред Харди унан саҡ ҡына ҡалыша - татуировкалар уның тәненең 96 өлөшөн биләгән.

Татуировканың кешегә ни тиклем зарарлы икәнен яҙып ҡына бөтөп булмай. Хатта татуировка махсус салондарҙа эшләнеп, зарарһыҙландырыуға ҡаршы тейешле саралар күрелһә лә, барыбер кешегә 22-гә яҡын ауырыу эләктереү ҡурҡынысы янай. Ә был сараларға ҡул һелтәп ҡараусыларға татуировкалар нимә килтерә? Тотҡондар, мәҫәлән, бигерәк тә элекке ваҡыттарҙа, татуировканы ҡулдарына нимә эләгә, шуның менән эшләгәндәр. Тишкеләгән тән урындарын буяу өсөн шариклы ручканың пастаһын, көйҙөрөлгән пластмассаны, көл сағын, хатта шәкәр, ҡором ҡатышмаһын да ҡулланғандар. Был буяғыстарҙы тире аҫтына ябай еп һәм тегеү энәһе ярҙамында индергәндәр. Улар булмаһа, медицина шприцтары, тимерсыбыҡтар, китаптарҙың төҙәйтелгән металл нығытҡыстары ҡулланылған. Татуировка эшләүҙең бындай төрө йыш ҡына ҡаты ауырыуҙарға, ағыуланыуға, йыш ҡына гангрена һәм ампутацияға килтерә.

Был ҡурҡыныс, зарарлы бәләгә ҡаршы тиҙ арала сара күреү мөһим. Модаға ундай тән боҙоусы яһалмалыҡты түгел, ә тәбиғи матурлыҡты сығарырға кәрәк.

Татуировка нимәнелер һүрәтләп кенә ҡалмай, ә кешенең тормошона кире тәьҫир ҙә итә. Психологтар әйтеүенсә, улар кешене ниндәйҙер кимәлдә зомбиға әйләндерә. Ниндәйҙер бер һүрәт арҡаһында кеше айырым бер фиғелгә инә һәм уны кире үҙгәртеүе бик ауыр.

Әгәр ҙә мосолман кешеһе, тыйылыуға ҡарамаҫтан йәки дингә килгәнгә тиклем, йә башҡа ниндәйҙер сәбәп арҡаһында татуировка эшләткән булһа, ул уны тиҙ арала юҡ итергә тейеш, сөнки был нәжес тип һанала. Был ҡатындарға ла, ирҙәргә лә ҡағыла. Әгәр ҙә мосолман быны эшләүҙән баш тарта икән, уны имамы мәжбүр итергә тейеш.

Әгәр ҙә беҙ, кеше барлыҡҡа килеү хаҡындағы Ҡөрьән аяттарына иғтибар менән күҙ һалһаҡ, кешенең кәүҙәһе иң камил рәүештә яратылғанын күрәбеҙ. Аллаһы Тәғәлә әйтә: "Һеҙгә гүзәл рәүеш-ҡиәфәт биргән дә һәм һеҙҙе саф-пак ризыҡтар менән ризыҡландырған да - Аллаһтыр" (40:64); "Беҙ, ысынында, кешене бик тә гүзәл ҡиәфәттә яралттыҡ" (95:4).

Кешенең үҙ белдеге менән тәнен үҙгәртеүе Исламда ҙур гонаһтарҙан һанала. Сөнки был эшкә уны Иблис ҡоторта. Ҡөрьәндә әйтелә: "Аллаһ шайтанға ләғнәт ебәрҙе. Шайтан әйтте:

"Ант итәм, ҡолдарыңдан үҙ өлөшөмә тигәнен алырмын. Уларҙы һис шикһеҙ тура юлдан яҙҙырып, буш хыялдар менән аҙҙырасаҡмын, терлектәрен уятырмын, ҡәтғи әмер итәсәкмен малдарҙың ҡолаҡтарына тамға һалырға, уларға Аллаһ яралтҡандарҙы үҙгәртергә бойорасаҡмын", - тине" (4:118,119).

Бөтә кешелек тарихында шайтан үҙенең маҡсаттарын тормошҡа ашырыр өсөн күп көс һалды. Мәҫәлән, һиндтарҙың майя ҡәбиләһе кешеләрен баш һөйәген, танау, ҡолаҡ, тештәрҙе үҙгәртергә кәрәк, тип ышандырҙы. Шуға күрә, кешенең кәүҙәһен "камиллаштырыу" маҡсатында майя ҡәбиләһе кешеләре яңы тыуған сабыйҙарҙың ҡолаҡ япраҡтарын һуҙған, аҫҡы ирендә, танау япраҡтарын тишкән, тештәрен уйған, ә саҡ ҡына һуңғараҡ - ҡылый күҙлелекте булдырыу маҡсатында баштарына муйынсаҡтар йәки таҫмалар элгән.

Шайтан XX быуаттың икенсе яртыһында тағы ла ҙурыраҡ уңыштарға өлгәште: хәҙер бөтә донъяла пластик операциялар эшләтеү киң танылыу алды. Яһалма матурлыҡ өсөн кешеләр ниндәй генә юлға баҫмай. Сәстәрен үрә лә торғоҙалар, тәндәрен дә тишкесләп бөтәләр... Хатта хәҙер, бөтөнләй шайтанға оҡшарға теләп, мөгөҙ ҙә ҡуя башлағандар.

Ислам кешенең етешһеҙлектәрен бөтәрә торған пластик операцияларға ҡаршы килмәй. Мәҫәлән, ҡуян тешле булған осраҡта уны төҙәтеү рөхсәт ителә.

Шайтанға эйәрмәй, хәҡиҡәт юлынан ғына атларға яҙһын!

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ИР ҺӘМ ҠАТЫН...

## бер-береһенең кейеме



**Изге Ҡөрьәндә "Ир менән ҡатын бер-береһенең кейеме", тип әйтелә. Был һүҙҙәргә тәрән мәғәнә һалынған, сөнки Аллаһы Тәғәлә беҙҙең асылды беҙгә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ белә. Әйҙәгеҙ, "кейем" һүҙенең мәғәнәһенә төшөнөп ҡарайыҡ башта, ошо юҫыҡта үҙебеҙҙең икенсе яртыбыҙға күҙ һалайыҡ.**

Халыҡта "Кейемгә ҡарап ҡаршылайҙар" тигән мәҡәл бар. Кейемеңдән таҙалығы, бөхтәлеге, төҫө - һинең визит карточкаң ул. Кейемең матур икән, тимәк, һин үҙеңде баһалай, ҡәҙерләй беләһең, тигән һүҙ. Ә бысраҡ, йыртылған, иҫкергән кейем үҙеңде һанламауыңды күрһәтә. Кейем һинең шәхесеңдең визит карточкаһы.

Икенсе яртың да - һинең визит карточкаң. Әгәр уны йонсотһаң, хәлдән тайҙырһаң, өҫбашын ҡарамаһаң - иң тәүҙә үҙеңә зыян килтерәһең. Үҙ шәхесен, үҙ көсөнә ышаныһын юғалтҡан, бер ҡиммәте лә булмаған хәләл ефетең һинең дә шундай уҡ яҙмышлы булыуына ишаралай. Тимәк, һеҙ бер-берегеҙҙе генә түгел, үҙ-үҙегеҙҙе лә баһалай белмәйһегеҙ.

Бәхетҡә күрә, кейем беҙҙе матурлау менән бергә, кеше күҙенән йәшерергә тейеш булған урындарыбыҙҙы ла ҡаплай. Кейенеү - ул ниндәйҙер дәрәжәлә серҙәреңде һаҡлаусы ла булып тора. Уйлап ҡара, кейемең йыртылып йәки һүтелеп китһә, кешеләр алдында ниндәй уңайһыҙ хәлгә ҡалыр инең.

Ир менән ҡатын да бер-береһенең етешһеҙлектәрен ҡапларға, бүтәндәргә күрһәтмәҫкә яратылған. Һинең тормош юлдашың һинең турала бер кеше белмәгәнде белә, башҡаларҙан йәшерелгәндә күрә. Ул, кейем кеүек, һине ҡаплап торор өсөн кәрәк. Әгәр хәләл ефетеңдең хаталарын, кәмселектәрен йәшерер урынға уларҙы асып һалырға тырышаһың икән, һин уның өсөн "кейем" була алмайһың. Быны шуның өсөн дә икенсе яртыңды башҡалар менән сағыштырырға тырышма, сөнки башҡаларҙы бит һин "кейем"дә генә күрәһең.

Кеше кейеп йөрөгән әйберҙең генә ҡиммәте бар. Бер кейем дә тәртәктә ятыр өсөн тегелмәй. Икенсе төрлә әйткәндә, кеше кейемгә мохтаж булған кеүек, әйбергә лә хужа кәрәк. Кеше өҫтөндәге кейем һөйләй, иштә, күрә, хатта уйлай кеүек. Иң матур кейем дә хужаһын икенсе төрлө итә алмай. Мәғәнәһеҙ кешенең кейеме лә матур күренмәй.

Беҙ ҙә шулай бөтә яҡтан килгән өлгөлө тормош иптәше эҙләйбеҙ. Ә үҙебеҙҙең шул өлгөгә яраҡ-ярамауыбыҙ тураһында күп осраҡта уйлап та бирмәйбеҙ. Иң шәп кейем дә бөтә кешене матурлай алмаған кеүек, яҡшы тормош иптәше лә өлгөлө ғаиләүгә тормошон үҙе генә ҡора алмай. Иң беренсе үҙебеҙгә яҡшы юлдаш булыу юлдарын эҙләргә, таҙа, һәйбәт мөнәсәбәттәр булдырырға, уларҙы һаҡларға өйрәнергә кәрәк.

Ир менән ҡатын бер-береһенә кейем булғас, улар араһындағы мөнәсәбәттәрҙең гүзәллеге хаҡына уларҙың бер-береһенә яраҡлашыуы мотлаҡ. Кейем кейеп кенә танылып булмай, кейемгә ниндәйҙер деталдәр өҫтәргә тейешбеҙ. Шуның кеүек, үҙебеҙҙән хәләл ефетебеҙгә ярашлы йөрөргә, торорға, эшләргә, нимәлер хәл итергә тейешбеҙ.

Кейем - беҙҙе һаҡлаусы ла. Ҡаплауҙан тыш, кейем беҙҙе һалҡындан, түҙеп торғоһоҙ эҫенән, бысраҡтан, саңдан һәм башҡаларҙан һаҡлай. Беҙҙең тормошҡа, тирегә ниндәйҙер ҡурҡыныс янаһа, беҙ кейемгә нығыраҡ төрөнәбеҙ бит. Ә киреһенсә эшләһәк һәм кейемде ғәйепләһәк, беҙ иҫәр һәм ғәҙелһеҙ булыр инек.

Тормош юлдары ҡатмарлы, ир менән ҡатын араһын һалҡынайтыусы сәбәптәр ҙә етерлек. Һеҙ ғүмер юлында осраған шатлыҡ һәм ҡайғыларҙы бүлешергә вәғәҙә биргәнһегеҙ икән, төрлө ҡаршылыҡтарға осрағанда ла арағыҙҙағы мөхәббәт нығынырға, бер нисек тә һүнмәҫкә тейеш. Һеҙ бит ауыр ваҡытта бер-берегеҙгә терәк булырға яралғанһығыҙ. Ауырлыҡ осраған һайын, айырылышыу тураһында уйлау йәки икенсе яртыңды ғәйепләү - туңған саҡта кейемдәреңде сисеп ташлау менән бер. Тап шул мәлдә ул һеҙгә кәрәк бит. Ауыр мәлдәрҙә хәләл ефетеңдең терәге мөһим. Әгәр кейемгә нығлап төрөнмәһәң, ел уны йолҡоп алып китәсәк, тимәк, һеҙҙең аралар һыуынасаҡ.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Аллаһы Тәғәләнең "Ир менән ҡатын - бер-береһенең кейеме"тигән һүҙҙәре менән килешәһегеҙме? Һеҙҙең тормош иптәшегеҙ һеҙгә "кейем" була алдымы?**

**Лена ЯМАЛЕТДИНОВА, 59 йәш, пенсионер:**

- Мин Ҡөрьән Кәрим китабын бер нисә тапҡыр башҡортса тәржемәлә уҡып сыҡтым. Ундағы тәрән фекерҙәргә хайран ҡалдым һәм, ысынлап та, ундағы һүҙҙәр беҙҙе Яратыусы тарафынан әйтелгәндер, тигән фекерҙәмен. Ҡөрьән беҙҙе тик яҡшылыҡҡа һәм инсафлыҡҡа өйрәтә. Ә был аятта иһә ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәттәр тураһында һүҙ бара. Әлбиттә, мин был фекер менән килешәм. Әгәр ир менән ҡатын бер-береһен ҡаплаусы, һаҡлаусы булып, ярашып йәшәй алмай икән, тормош та килеп сыҡмай.

**Фуат ҒИНИӘТУЛЛИН, 55 йәш, фермер:**

- Был фекер бик дөрөҫ, ләкин тормошта барыһы лаыңғай ғына килеп сыҡмай. Ғаиләү ҡорғанда уҡ, бер-беребеҙ менән ярашып йәшәй алырбыҙмы икән, тип уйланырға кәрәк. Кешеләр төрлө-төрлө ғаиләлә тыуа, йәшәй, төрлө тәрбиә ала. Шуға ла бер бөтөн булып йәшәп китеү өсөн күп ауырлыҡтар кисерергә, утты-һыуҙы үтергә тура килә, түҙмәгәндәр айырылышып та ҡуя. Түҙгәндәр генә ҡартайғансы бергә йәшәй, хатта береһе донъя ҡуйһа, икенсеһе лә тиҙ генә уның артынан китә. Быны минең ҡайным менән ҡәйнәм шулай булды. Вәли менән Мөслимә, бер-береһенә ярап, бер-береһенә "кейем" булып, 75 йәшкә тиклем йәшәнеләр ҙә, бер-бер артлы донъя ҡуйҙылар.

**Хәлиҙә ВӘЛИЕВА, 60 йәш, пенсионер:**

- Аллаһы Тәғәлә биргән бер генә ғүмерҙе нисек башҡаларға сарыф итмәк кәрәк?! Мин кейәүгә сығып ҡараным да, кешегә яраҡлашып, тик уның көйөнә генә бейеп йәшәгем килмәгәс, ташланым да ҡайттым. Башҡаса ғаиләү ҡороу тураһында уйлап та ҡараманым. Былай рәхәтерәк, бер кем ҡамасауламай, бер кемгә лә ярарға кәрәкмәй. Бала аҫырап, ир ҡарап, кем рәхәт күргән, әйтеп ҡарағыҙ әле миңә?

**Айрат ЗАҺИҘУЛЛИН, 50 йәш, эшһеҙ:**

- Эйе, ир менән ҡатын бер-береһенә "күлдәк" булырға тейеш. Минең ҡатын минә "күлдәк" була алманы, минең эсеүем, етешһеҙлектәрем менән килешергә теләмәне. Артыҡ ғауғалашмай, тыныс ҡына айырылыштыҡ. Бар мөлкәтемде, һалған йортомдо ҡатыным менән улыма ҡалдырҙым да, атай йортона ҡайтып киттем. Үҙем теләгәнсә йәшәйем. Әлбиттә, яңғыҙыма күңелһеҙерәк, ләкин иреклемен, шуға маһайып йәшәйем.

**Лиана ВӘЛИУЛЛИНА әҙерләне.**

ТӘҮБӘ



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ

## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын...

### 8-се һабаҡ: "Ете сәбәп"

Бер кеше өс көн буйы эшенә бармаған, ти. Дүртенсе көндө эшенә килгәс, хужаһы саҡыртып алып, келәмгә баҫтырған.

- Өс көн буйына эшкә сыҡмай ҡайҙа йөрөнөң, ниңә хәбәр итмәнең? - тип ябырылған уға талапсан хужа.

- Ней бит әле, Фәлән Фәләнович! Эсеүҙе ташлағайным, шул шатлыҡтан эсеп ташлағанмын, - тигән, үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәйенсә, аҡланырға теләгән хеҙмәткәр.

- Шәп булған! Ярай, ташланың, ти, шатлығыңдан байрам да иттең, ти, ә иртәгәһен һуң, эшкә килергә була ине бит, - тип оторо ярһыған түрә, хеҙмәткәренә тишә ҡарап.

- Килә алманым шул, иртәгәһенә баш төҙәттем, - тип яуаплаған тегеһе.

- Ә өсөнсө көн, кисә ниңә килмәнең? - тип ябырылған бүлмә хужаһы.

- Ней бит әле, Фәлән Фәләнович! Бахмурҙан ауырыным... - тигән булған келәмдә баҫып тороусы.

Был лаҡапты ниңә һөйләйемме? Бер нисә тапҡыр уҡталып, эсеүҙән туҡталып, аҙаҡ кире башлап, тағы ташлап, иң һуңынан бөтөнләй туҡтаған кеше булараҡ, кешене араҡы эсеүҙе ташларға, аҙаҡтан кире эсеп китергә мәжбүр итеүсе сәбәптәргә туҡталмаҡсымын.

Наркологтар кеше өс осраҡта, өс сәбәп арҡаһында үҙенән-үҙе, тик ихтыяр көсө ярҙамында эсеүҙән ҡотола ала, тип иҫәпләй. Бына улар:

1. Кеше самаһыҙ күп һәм оҙайлы ваҡыт эсеп, йәшәү менән үлем араһында тороп ҡалғанда, әгәр ҙә йәшәүҙе һайлаһа, тәүбәгә килә һәм эсеүенән туҡтай.

2. Тормош иптәшенең йәки башҡа ғаилә ағзаларының: " Йә - беҙ, йә - араҡы!"- тип ҡуйған "ультиматум"ын тыңлағандан һуң, әгәр ҙә ғаиләһен юғалтҡыһы килмәһә, эсеүенән баш тарта.

3. Эшләгән ерендәге хужаһының йәки коллектив ағзаларының уның эсеүенә ҡарата белдергән дәғүәһенән һуң, әгәр ҙә эш урынын юғалтҡыһы килмәһә, араҡынан ваз кисә.

Былар кешене эсеүҙән үҙе теләп баш сөйөргә мәжбүр итеүсе сәбәптәр. Ошо осраҡтарҙа ғына эсеүҙән яфаланыусы кеше, үҙе теләмәһә лә, ғүмерен, ғаиләһен йәки эш урынын һаҡлап ҡалыр өсөн был аҙымға бара.

Ауырыуға дусар булғанда табибҡа әүереләһең, тигән һымаҡ, мин үҙемсә башҡа сәбәптәр тураһында ла уйландым. Наркологтар өс сәбәп тураһында белмәй әйтмәйҙер. Әммә кеше тота килеп, ошо өс сәбәпкә бәйле өс ҡурҡыныс янамаған хәлдә лә, эсеүенән туҡтай алмаймы ни? Ҙур хәрефтәр менән яҙам: ТУҠТАЙ АЛА!!!

Беренсенән, ғүмер бер генә, нисек йәшәһәң дә, барыбер үтә. Спиртлы эсемлектәрҙән бөтөнләй азат булып, емертеп донъя көтөп, бәхетле йәшәүселәргә ҡарап һоҡланыусы һәм көнләшеүсе кеше, сәмләнеп һәм намыҫланып китеп, үҙе туҡтай ала. Мин бындай миҫалдарҙы күп беләм.

Икенсенән, кеше күңеленең иң мөҡәддәс тойғоho - мөхәббәт. Ошо тойғо хаҡына кеше нимә генә эшләмәй, утҡа ла, һыуға ла инә. Төптән уйлағанда, донъялағы бар нәмә мөхәббәт өсөн яратылған, уйлап сығарылған, төҙөлгән. Аллаһы Тәғәлә тәүҙә Әҙәм менән Һауаны яралтҡан һәм яратҡан. Әҙәм менән Һауа үҙҙәренең мөхәббәт емеше итеп кешелекте тыуҙырған. Уларҙың мөхәббәт емештәре өсөн тора-бара йорт, ауылдар, ҡалалар, машина, сәнғәт кәрәк булған. Һәр тереклектең нигеҙендә лә мөхәббәт ята. Шул уҡ тойғо кешене иң ауыр саҡта барлыҡ һәләкәттәрҙән ҡотҡара ала. "Мине мөхәббәт ҡотҡарҙы" тигән бүлектә мин был хаҡта яҙғайным инде.

Өсөнсөнән, ислам дине, "Ҡөрьән" китабы. Араҡы эскән кешенең күңеленә Иблис шайтанды индереп ултырта, тинек. Донъяла диндән дә, беҙҙең өсөн Ислам диненән дә йәшәйеш өсөн ҡулайлы һәм изге булған мәктәпте бер кем дә уйлап сығармаған әле. Динле булыу, намаҙ уҡыу үҙе үк шайтан ризығынан азат булыуҙы аңлата. Дингә бәйле уйҙарымды алдараҡ һөйләрмен.

Дүртенсенән, кешене һиҫкәндерергә мәжбүр иткән ваҡиға, ғибрәтле хәл. Аллам һаҡлаһын, әммә эсеү арҡаһында кемдәрҙер һаулығын юғалта, янып үлә, үҙ-үҙенә ҡул һала. Был хәлдәрҙе теләмәһәк тә, тормошобоҙҙа улар көн һайын тиерлек осрап тора. Ғибрәтме? Ғибрәттең дә ниндәйе бит әле! Был хәлдәрҙең шаһиты булған кеше киләсәк хаҡына ошо юлдарҙы уҡығас та эсеүенән ваз кисергә бурыслы.

Өс сәбәп янына тағы ла дүртәү өҫтәлгәс, улар барлығы етәү булып китте. Иң мөһиме - теләк һәм ихтыяр ғына булһын. Үҙемдән сығып, шуны беләм: был сәбәптәрҙең береһе тәүге аҙымды яһағанда ғына кәрәк, ҡалған алтауһы киренән эсеп китмәҫ өсөн берҙәм таяныс булһын.

Бер тапҡыр ташлап, киренән эсеп китеү өсөн сәбәп юҡ, сөнки ете сәбәп бер-береһенә ныҡ бәйләнгән, улар бер-береһен тулыландыра, береһен генә алып ташлаһаң, башҡалары ла эйәрә. Киренән эсеп китеү өсөн һылтау ғына булыуы ихтимал. "Һыныҡҡа - һылтау" тигәндәй, ҡулыңды рюмкаға үрелергә мәжбүр итеүсе хәл-ваҡиға һинең хужаңа әүерелә. Ә нисек итеп уны еңергә була? Әлеге лә баяғы, ихтыярға килеп еттек. Алдағы һанда ИХТЫЯР хаҡында һөйләшербеҙ.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!

### Гөбәҙиә

Бер стакан йылы һөткә берәр ҡалаҡ ҡоро сүпрә, шәкәр ҡушып әсетергә ҡуйырға. Йомшартылған 200 грамм аҡ майға 2 стакан ондо иләп, ыуып ҡына ҡушырға ла, баяғы әсеткегә һалып болғатып, ике-өс сәғәткә һыуытҡысҡа ҡуйырға. Һыуытҡыстан алғас, тағы ла он ҡушып, йомшаҡ ҡына итеп ҡамырҙы баҫып, икегә бүлеп, йәймә йәйергә.

Эслек өсөн: йәйелгән ҡамырға тоҙло һыуҙа бешкән 250 грамм дөгө ярмаһын тигеҙләп һалырға. Үткәрелгән 200 грамм итте майҙа ҡурғас, айырым табала ҡыҙҙырылған 50 грамм һуған менән тоҙлап-борослап болғатып, дөгө өҫтөнә йәйергә. Ике бешкән йомортҡаны ҡырғыстан үткәреп, ит өҫтөнә һалғас, 100 грамм йөҙөм, 50 грамм ҡара емеш турап һалып сығабыҙ ҙа, 25 грамм аҡ май һөртөп, йәймәнең икенсеһе менән ябып, тирәләрен йәбештереп сығабыҙ. Духовкала 160 градуста 40 минут бешереп алабыҙ.

### Балыҡ быҡтырыу

Сазан балыҡты таҙартып, бик яҡшы итеп йыуып, тоҙ һөртөп сыҡҡас, эсе-тышына ҡаймаҡ (йә майонез) һөртөп, бер ни тиклемгә һалып ҡуйырға. Табаны майлап, фольга түшәгәс, балыҡты һалып, эсенә туралған петрушка һәм башҡа төрлө тәмләткес үләндәр һалаһың. Балыҡтың өҫтөнә йоҡа ғына итеп теленгән лимон киҫәктәрен теҙгәс, фольга менән ныҡ итеп урарға ла 160 градус эҫелектәге духовкаға 40-45 минутҡа бешерергә ҡуйырға. Йылы көйө ашаһаң, бик тәмле була.

### "Йәй бүләге" - ҡышҡылыҡҡа турама

Йәшелсәләрҙе яҡшы итеп йыуып, йомшаҡ сепрәккә һөртөп ҡоротоорға. Һуғанды тышы менән йыуып, ике осон алып ташлағас, оҙонсалап тәгәрмәс формаһында турарға. Кишерҙе эре ҡырғыстан үткәрергә. Кәбеҫтәне турағас, барыһын да бергә һалып, тәменә ҡарап тоҙлап болғатырға. Иң һуңынан помидорҙы турап, иҙмәй генә ҡушып болғатҡас, банкыларға тултырып, һәр береһенә берәр ҡалаҡ шәкәр ҡомо, көнбағыш майы һалып стерилләргә. Быны өсөн ҙур һыулы һауытҡа һыу эсенә, йә духовкала 0,75 литрлы банкаларҙы 30 минутҡа, 1 литрлы банкаларҙы 50 минутҡа ултыртып алырға кәрәк. Турама өсөн икешәр кило помидор, кәбеҫтә, кишер, берәр кило башлы һуған, борос кәрәк була.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Уңышһыҙлыҡ даланһыҙ кеше тигәнде аңлатмай

Ҡасан да булһа "Әгәр ҙә нәмәгәлер өйрәнгең килһә, хаталар эшләргә тура килә" тигән фекерҙе ишеткәнең бармы? Эйе, ҡайһы саҡта кешеләр уңышһыҙлыҡтан ҡурҡып, ниндәйҙер яңы аҙым эшләп ҡарауҙан баш тарта, уны даланһыҙ кеше, тип иҫәпләүҙәрен теләмәй.

Әммә уңышһыҙлыҡ һәм даланһыҙ кеше араһында айырма бар. Тормошта бер тапҡыр булһа ла уңышһыҙлыҡ кисермәйенсә бер нәмәгә лә өйрәнеп булмай. Велосипедта йөрөргә өйрәнгәндә, моғайын да, бер нисә тапҡыр тигеҙлек юғалтырға тура килгәндер? Бәлки, юҡтыр ҙа. Ә шулай ҙа һин шундуҡ һәйбәт итеп йөрөп китә алмағанһыңдыр, әллә күпме тапҡыр уңышһыҙлыҡтар кисерһәң дә, тора-бара был һәләткә эйә булғанһыңдыр.

Велосипедта йөрөргә өйрәнеү ваҡытында күңелең ҡайтып, үҙ уңышһыҙлығыңда һине өйрәтергә тырышҡан кешене ғәйепләгән сағыңды иҫләйһеңме? Эргәңдән йүгереп барып, йығылмаһын тип һине тотоп барыусы кеше була инде ул. Тиҙҙән һин ярҙамдан баш тартаһың һәм ирекле рәүештә йөрөй башлайһың. Ә инде бынан һуң да ҡолаһаң, һине өйрәтеүсе кешене вилосипедты иртә йәки һуңлап ысҡындырғаны өсөн ғәйепләүең ихтимал.

Тормошта ла ҡайһы саҡ беҙҙе кемдер йәки нимәлер уңышһыҙлыҡҡа этәргән кеүек тойола. Бүтән кеше йәки ниндәй ҙә булһа хәл-ваҡиға маҡсаттарыбыҙға өлгәшергә ҡамасаулай, тип иҫәпләү - ғәҙәти күренеш. Ә үҙебеҙҙең әҙерлек кимәлебеҙҙе һәм аҙ тырышлыҡ күрһәтеүебеҙҙе уйлап та бирмәйбеҙ. Шуға ла бындай осраҡта тәүҙә үҙеңдән барыһын да тейешенсә башҡара алыу-алмауыңды һора һәм ебәргән хаталарыңды ҡыйыу танырға өйрән. Был хатаны үҙең ебәреүеңде аңлағас, бүтәнсә уны ҡабатламаҫҡа ҡарар ҡыл һәм үҙеңде ғәфү итеп, артабан юлыңды дауам ит.

Ғөмүмән, беҙгә бер кемде лә, хатта үҙебеҙҙе лә ғәйепләргә кәрәкмәй. Үҙен йәки башҡа кешеләрҙе һәм хәл-ваҡиғаны ғәйепләргә әҙер торған кеше дөрөҫ фекер йөрөтөү үҫешен тотҡарлай һәм был ваҡытлыса ҡаршылыҡ булыуын аңлау урынына, үҙен даланһыҙ кеше хәленә ҡалдыра. Үҙеңде йәлләү йәки бүтәндәргә асыуланыу урынына үҙеңдән "Артабан нисек? Алға ҡуйылған маҡсатҡа өлгәшеү өсөн хәҙерге ваҡытта мин тағы ла нимә эшләй алам?" тип һора.

Әгәр беҙ бүтәндәрҙе ғәйепләп, ваҡытыбыҙҙы һәм энергиябыҙҙы бушҡа түкһәк, бер ҡасан да өйрәнер, үҫер һәм һалған тырышлыҡтарыбыҙҙан яҡшы һөҙөмтәләр алыр өсөн кәрәкле әйберҙе күрә алмаясаҡбыҙ. Беҙ күп тапҡырҙар уңышһыҙлыҡтар кисерәсәкбеҙ, әммә ул бер ҡасан да аҙаҡҡыһы булмаясаҡ. Әгәр ҙә кеше уңышһыҙлыҡ кисергән хәлдә лә, ғәйепләүҙәргә һәм йәлләү тойғоһона маҡсатына өлгәшергә ҡамасауларға юл ҡуймай икән, ул даланһыҙ кеше булмаясаҡ.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*

# ЯҢҒЫҘЛЫҠ...

## файҙалы ла, зыянлы ла

**Күп осраҡта яңғыҙ ҡалыу бик кәрәкле: бер үҙең генә ҡалып, ғүмер тураһында уйланыр, күңел бойоғоуҙарын асыҡлар, үрмәксе ауы кеүек фекерҙәреңде тағатыр өсөн… Шулай ҙа яңғыҙ оҙаҡ ҡалыуҙың һаулыҡҡа зыян килтереүе лә бар. Һеҙ оҙаҡ яңғыҙ ҡалған саҡта кәйеф төшөүен, шулай уҡ дөйөм хәл торошоноң насарайыуын һиҙгәнегеҙ юҡмы?**

Питтсбургтағы Карнеги-Меллоун университеты ғалимдары фекеренсә, аралашыуҙың етмәүе, бигерәк тә яңғыҙлыҡ стресс барлыҡҡа килеүҙең сәбәбе булып торорға мөмкин. Өҫтәүенә, был осраҡта иммунитеттың күҙгә күренеп төшөүе һиҙелә, был төрлө ауырыуҙарға килтереүе лә ихтимал.

Шулай уҡ АҠШ Наркобәйләнгәнлек институты ғалимдары, аралашыу синдромы һәм гиперәүҙемлек әҙ булған осраҡта кешенең наркотик бәйләнештәргә тиҙ бирешеп бара икәнлеген асыҡлаған. Ундай кешеләрҙең мейеһендә дофаминдың әүҙемлеге күҙәтелә. Дофамин - ул нейромедиатор, кеше мейеһенә тойғо реакцияларын ебәреүсе, рәхәтлекте йә ауыртыныуҙы тойорға мөмкинлек биреүсе биологик әүҙем химик матдә. Тикшеренеүселәргә аралашыу синдромы һәм гиперәүҙемлек әҙ булған кешеләрҙең башҡаларҙан күп тартыуы, алкоголгә һәм башҡа наркотиктарҙы урынһыҙ файҙаланыуы билдәле. Аралашыу һәм гиперәүҙемлек әҙ булған кешеләрҙә дофамин әүҙемлеге кәмеүен Нора Волкоу былай тип аңлата: "Әгәр ҙә бәйлелеккә алып килеүсе матдә - алкоголь булһынмы ул, никотинмы йәки кокаинмы - ҡулланһағыҙ, һеҙ мейелә дофамин тупланыуына булышлыҡ итәһегеҙ".

Иғтибар ҡытлығы кисергән кешеләр үҙҙәрен яҡшыраҡ тойор һәм эш әүҙемлеген арттырыр өсөн наркотиктар ҡулланыусан. Шуға күрә, яңғыҙ һәм ауырыу булып ҡалғығыҙ килмәһә, һеҙгә ниндәй ҙә булһа сараларға, ҡунаҡҡа йөрөргә кәрәк, һәм үҙебеҙҙең яҡындарыбыҙ, дуҫтарыбыҙ, таныштарыбыҙҙың да шулай уҡ аралашыуға, иғтибарға мохтаж булып, һаулығына зыян килтереүе бар икәнен онотмайыҡ.

# ҠОТЛАЙБЫҘ!

Мәсетле районының Оло Ыҡтамаҡ ауылында йәшәүсе ҡәҙерле тормош иптәшем, һөйөклө әсәйебеҙ **Нәсимә Әхсән ҡыҙы БӘҘРЕТДИНОВАны** тыуған көнө менән ысын күңелдән ҡайнар ҡотлайбыҙ!

Ҡәҙерлебеҙ, килер көндәреңдең яҡты, бәхет-ҡыуаныстарға мул булыуын, сәләмәтлектең ҡоростай ныҡлығын, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙың мөлдөрәмә тулыһын, өмөт-хыялдарыңдың тормошҡа ашыуын, күңелебеҙ ҡояшы, йортобоҙҙоң йәме булып, атайыбыҙ Эдуард Фәрхетдин улы БӘҘРЕТДИНОВ менән киләсәктә лә иңгә-иң терәшеп, оҙон-оҙаҡ ғүмер итеүегеҙҙе теләйбеҙ!

Балаларыңдың изгелеген күреп,<br>
Йәшә әле, әсәй, йөҙгәсә.<br>
Изге теләктәрең, доғаларың<br>
Беҙгә дөрөҫ юлды күрһәтә.<br>
Рәхмәт һиңә, әсәй, барыһы өсөн,<br>
Шат күңелдәр менән ғүмер ит.<br>
Ергә ҡояш нисек кәрәк булһа,<br>
Һин дә беҙгә шулай кәрәк бит!

**Иң изге теләктәр менән тормош иптәшең Эдуард, ҡыҙҙарың Гөлназ менән Айгөл, улың Айгиз.**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*




**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

## Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры



### Юбилей миҙгелен ҡаршылап…

Быйылғы йыл милли мәҙәниәт тарихында башҡа бик күп күренекле саралар менән бер рәттән, Башҡорт академия драма театрының 90 йыллығын байрам итеү миҙгеле булып та хәтерҙә ҡаласаҡ. Театрҙың юбилейы ысын мәғәнәһендә халыҡ байрамына, мәҙәниәтебеҙ тантанаһына әүерелһен өсөн әҙерлек күптән алып барыла. Был иң тәү сиратта юбилей уңайынан әҙерләнгән спектакль. Ошо йәһәттән театрҙың баш режиссеры Айрат Абушахманов Нәжип Асанбаевтың "Зәки Вәлиди" драматик трилогияһы өҫтөндә эшләй.

Башҡортостандың халыҡ шағиры, драматург Мостай Кәримдең тыуыуына 90 йыл тулыу айҡанлы театр әҙиптең билдәле проза әҫәрен тамашаға хөкөмөнә сығарырға йыйына. "Ауыл адвокаттары" повесын Мөсәлим Күлбаев сәхнәләштерәсәк. Быйылғы юбилей миҙгеленең тағы ла бер үҙенсәлеге шул: Бөләкәй сәхнәлә Софоклдың "Эдип батша" трагедияһы уйналасаҡ. Уны 2005 йылдан бирле Санкт-Петербургтың А.С. Пушкин исемендәге Рәсәй дәүләт академия драма театры режиссеры булып эшләгән яҡташыбыҙ Искәндәр Саҡаев ҡуясаҡ.

Юбилей саралары шулай уҡ республикабыҙ буйлап һәм илебеҙҙең ҙур ҡалалары сәхнәләрендә сығыш яһау, төрлө осрашыуҙар, фестивалдәрҙә ҡатнашыу, артистарҙың юбилей кисәләрен уҙғарыу менән бергә үрелеп барасаҡ. Яңы иҗад миҙгеле 25 сентябрь Кен Кизиның "Кәкүк ояһы" спектакле менән асыласаҡ.

**32-се һандағы кроссворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** 7. Сөмбөлә. 8. Елкәсуҡ. 11. Бейә. 12. Һарыбауыр. 13. Елән. 16. Илтер. 17. Тайра. 18. Йәймә. 21. Терпе. 22. Тибенге. 24. Бөкөрөй. 25. Сәллә. 29. Мөһөр. 30. Иблис. 31. Бәрей. 34. Иҙән. 35. Ҡатлансыҡ. 36. Кәзә. 39. Сикәсуҡ. 40. Әмәйлек.

**Вертикаль буйынса:** 1. Һебә. 2. Эйәр. 3. Көйәнтә. 4. Ялғаш. 5. Алдыр. 6. Ҡуллама. 9. Тышау. 10. Ғазраил. 14. Терегөмөш. 15. Сәңгелдәк. 19. Өпсөн. 20. Бесәй. 23. Сөмбөлә. 26. Гөбәҙиә. 27. Бирнә. 28. Беләҙек. 32. Тамуҡ. 33. Быума. 37. Бәлә. 38. Өйөр.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ӘҮЛИӘЛЕК, КИРӘМӘТЛЕК...

## ишандарҙың сәлләһе ише генә...

**15 августа Баймаҡ районының Муллаҡай ауылында күренекле дин әһеле, атаҡлы хәҙрәт, үҙ заманында мосолман донъяһында Ғәбдулла бин Сәйет әл-Болғари әл-Бөрйәни әл-Һаҡмари (Муллаҡай) тип танылған аҫыл затыбыҙға зыярат ҡылдыҡ. Быға тиклем 11 июлдә Хәйбулла районының Вәлит ауылында Ғатаулла ишан Әбделмәликовты иҫкә алыу йыйыны үткәйне. Иншалла, милли йолаларыбыҙ менән бер ҡатар дини йыйындарыбыҙ ҙа үткәрелә башланы һәм улар тиҙ арала киң йәмәғәтселек ҡатнашҡан сараларға әүерелә бара.**

Баймаҡ районы мосолмандары мөхтәсибиәте ойошторған был йыйында урындағы хакимиәт вәкилдәре лә ҡатнашыуы сараға оло мәртәбә, рәсмилек өҫтәне. Йыйында Баймаҡ, Әбйәлил, Йылайыр, Бөрйән, Хәйбулла райондары, Өфө, Сибай ҡалалары, республикабыҙҙың башҡа район-ҡалалары дин әһелдәре лә ҡатнашты. Сарала күп һандағы сығыш яһаусылар Ғәбдулла хәҙрәт Сәидиҙең тормош юлына, дини, ғилми һәм донъяуи эшмәкәрлегенә байҡау яһаны, уның донъя һәм башҡорт милләте даирәһендә тотҡан урынын, әһәмиәтен билдәләне, хәҙрәттең рухына аят бағышланы, ҡорбан салды. Муллаҡайҙар үҙҙәренең хәҙрәт олаталарының изге рухына тоғро, ҡәбере ҡараулы, ауыл зыяраты тәртиптә тотола. Хәҙрәттең изге һөйәктәре ятҡан ҡәбер янында уның улы Мөхәмәтәнүәр хәҙрәт, шулай уҡ заты, ошо төбәктең арҙаҡлы шәхесе Рафаэль Сәйетов ерләнгән. Ошо уҡ зыяратта Ғәбдулла Сәидиҙең замандашы, фекерҙәше Баһумандың ейәне билдәле яҙыусы Аҫылғужа Баһуманов үҙенең мәңгелек төйәген тапҡан.

Вәлиттә һәм Муллаҡайҙа үткәрелгән ике сарала ла ҡатнашҡан кеше булараҡ, мин Ғатаулла ишан һәм Ғәбдулла Сәиди кеүек ошо ике бөйөк дини шәхесебеҙҙең әһәмиәтен билдәләгән сығыштарға, үҙ-ара әңгәмәләрҙәге ҡайһы бер фекерҙәргә иғтибар итеп ҡуйҙым. Әйтергә кәрәк, күп кенә милләттәштәребеҙ, миңә ҡалһа, ошондай шәхестәребеҙҙең милләтебеҙ тормошонда алып торған урынын аңлауҙан үтә алыҫ тора, йә булмаһа, уларҙың аңлауы бик сикләнгән, йә бер яҡлы - ошо аптырашта ҡалдыра. Бер яҡтан ҡарағанда, кешенең ниндәйҙер мәсьәләлә сикләнләнлеген ғәйепләп тә булмайҙыр, был хәл мәғлүмәт етешмәүҙән дә килә. Атеизм һаҙлығынан әле генә ҡотола барабыҙ. Шулай ҙа XIX быуат менән XX быуат арауығында милләтебеҙ тормошо өсөн иң яуаплы, ауыр, һынылышлы осорҙа мөһим роль уйнаусы Зәйнулла, Ғатаулла, Ғәбдулла ишандар кеүек шәхестәребеҙҙең йөҙөн билдәләүсе сифаттарҙы беҙ тик әүлиәлеккә йә кирәмәтлеккә генә ҡайтарып ҡалдырабыҙ һәм уларҙың ошо сифаттарына ғына баҫым яһайбыҙ икән, был уларҙан әкиәт геройҙары яһарға ынтылыуға тиң ғәмәл генә булыр ине. Бөгөн беҙҙең тарихсыларыбыҙ алдында Башҡортостан автономияһы, Рәсәй Федерацияһы төҙөлөүендә суфыйҙарҙың роле һәм әһәмиәтен билдәләү буйынса байтаҡ хеҙмәттәр яҙыу зарурлығы тора. Әгәр ҙә Әхмәтзәки Вәлиди Зәйнулла ишан Рәсүлевтан тыш үҙен тик бер сауҙагәрҙең һатыусыһы итеп кенә күҙ алдына килтергән икән, бында беҙгә тәрән итеп уйланырға етди сәбәптәр бар. Дөрөҫөн әйткәндә, Зәйнулла, Ғатаулла ишандар үҙ мәҙрәсәләрендә тәрбиәләгән шәкерттәр Башҡорт ғәскәрендә атҡа атланған, йәғни дәүләтселегебеҙҙең физик һәм интеллектуаль йөҙөн тәшкил иткән бит. Әйтергә кәрәк, бөгөнгө Башҡортостандың да нигеҙен беҙҙең суфый ҡартатайҙар һалған. Улар булмаһа, беҙ бөгөн белгән Башҡортостанда йәшәр инекме?

Һүҙ юҡ, ысынлап та, Зәйнулла, Ғатаулла, Ғәбдулла ишандар, Ғәбдулланың улы Мөхәмәтәнүәр һәм Мөжәүир хәҙрәттәргә әүлиәлек, төрлө кирәмәт, кешеләрҙе энәһеҙ-бысаҡһыҙ дауалау, өшкөрөү юлы менән һауыҡтырыу һәләте хас булған. Әммә былар барыһы ла ишан-хәҙрәттәребеҙ эшмәкәрлегенең меңдән бер өлөшө, икенсе төрлө әйткәндә, айсбергтың диңгеҙ өҫтөнә сығып торған өлөшө генә. Беҙ иһә, шул диңгеҙ өҫтөнә сығып торған өлөштө генә күрәбеҙ ҙә, диңгеҙ эсендәге өлөшкә бөтөнләй иғтибар итмәйбеҙ.

Әйткәндәй, айсбергтың диңгеҙ өҫтөнә сығып торған өлөшө ишан-хәҙрәттәребеҙҙең башына ураған сәлләһе ише генә. Сәллә башҡа урала, баш меңәрләгән ҡан тамырҙары менән бер туҡтауһыҙ "Аллаһ", тип типкән йөрәккә, йөрәк тағы ла йөҙәр меңәрләгән, тик тойорға ғына мөмкин булған тамырҙар менән күңел даръяһына, Аллаһы Тәғәләгә, Ислам диненә, тәриҡәткә тоташа. Ә йөрәге бер туҡтауһыҙ "Аллаһ" тип тибеүгә өлгәшкән инсанды суфый тип атайҙар. Бына шундай инсан булған Ғәбдулла Сәиди, Зәйнулла Рәсүлев, Ғатаулла Әбделмәликов ишандар....

**Икенсе бер мәсьәлә:**

**Дини сараларҙа ҡатнашыусылар араһында һаман да ошондай аҫыл заттарыбыҙ ҡәберенә зыярат ҡылыуҙы ек күреүселәр осрап тора. Ундайҙарға шулай тип өндәшке килә: "Беҙ уларҙың ҡәберҙәренә табынмайбыҙ, бары тик үҙ эшмәкәрлеге менән Аллаһы Тәғәлә хозурына һәм шәфәғәтенә ирешә алыусы, милләтебеҙгә мәңгелек ғүмер һәм мәрхәмәт юллаусы ошондай заттарыбыҙҙың тәриҡәт юлын милләтебеҙ өсөн иң хаҡ юл тип һанайбыҙ һәм шул юғарылыҡтан тороп, Хаҡ Тәғәләгә өндәшәбеҙ генә. Шуның өсөн дә уларҙың изге һөйәктәре ятҡан ергә килеп аят бағышлайбыҙ, ҡорбан салабыҙ. Беҙ шундай шәхестәребеҙҙе һанламаһаҡ, беҙҙе кем һанлар?.."**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**



АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҘЫРАҠ БИРЕРГӘ,

## күберәк алырға тырышабыҙ ҙа ул...

Үҙ ғәйебенден ниҙә икәнен... балаң үҫкәс белерһең.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Тормошта үҙ урынынды тапҡанһың икән, уның... бушағанын көтөп тор.

**(Михаил Генин).**

Беҙ ғүмер буйы аҙыраҡ бирергә һәм күберәк алырға тырышабыҙ, шунан иһә, тормош беҙҙе алданы, тип зарланабыҙ.

**(Антоний Лесьневский).**

Йәшәү - ул йәшәүгә әҙерләнеү генә. Ысын мәғәнәһендә йәшәй башлайым тигәндә генә, Хоҙай: "Ошо йәшәү булды ла инде, хәҙер үлергә ваҡыт" - ти.

**(Кароль Ижиковский).**

Кәртәнең теге яғындағы үлән һәр ваҡыт йәшелерәк була.

**(Инглиз мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ишәк ҡоҙоҡҡа ҡолап төшә лә, ярҙамға саҡырып, ҡыҫҡыра башлай. Уның ҡыҫҡырыуын ишетеп, хужаһы йүгереп килеп етә. Ләкин ишәкте ҡоҙоҡтан һөйрәп сығарыу мөмкин булмай. Шунан хужа ошондай ҡарарға килә:"Ишәгем ҡарт инде, күп йәшәргә лә ҡалмаған, йәш ишәк һатып алырға күптән йыйынам. Был иҫке ҡоҙоҡто ла күмеп ҡуйырға ниәтләнә инем. Ярай, бер юлы ике эште атҡарып ҡуяйым, ҡоҙоҡто ла күмәйем, ишәгемде лә ерләйем..." Шулай уйлаған да хужа, ярҙамға кешеләр саҡырып, ҡоҙоҡто күмдерә башлаған. Ҡоҙоҡ эсенә тупраҡ ташлаған ыңғайы ишәк тағы ла яманыраҡ итеп ҡыҫҡыра тотонған. Шунан тынып ҡалған. Хужа ҡоҙоҡ эсенә күҙ һалһа, ни күрә: ишәк өҫтөнә ташланған тупраҡты һелкеп бәрә лә, аяҡ аҫтына һалып тапай, ти. Күпмеләр ваҡыттан һуң хайуан ҡоҙоҡтоң өҫтөнә үк килеп сыҡҡан һәм ергә һикергән... Бына шулай, һинең өҫтөңә лә көн һайын әллә күпме ауырлыҡтар ишерелеп кенә тора. Һин дә уларҙы өҫтөңдән һелкеп алып ташлай һәм өҫкә күтәрелә алаһың. Һәр проблема - тормош һиңә табан бырағтырған таш. Әммә шул таш өҫтөнән атлап, көслө ташҡын аша атлап сығып була икәнен дә онотма. Бының өсөн ошо ябай ғына ҡағиҙәләрҙе үтәү ҙә етә: йөрәгеңде нәфрәттән арындыр һәм барыһын да ғәфү ит; йөрәгеңде борсолоу-тулҡынланыуҙарҙан арындыр - уларҙың күбеһе файҙаһыҙға; булғаны менән ҡәнәғәтләнеп йәшәргә тырыш; күберәкте бир; аҙыраҡты көт".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 5569
Заказ 3574